ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

15-21 ғинуар (һыуығай) 2022

№2 (992)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Һарттар: Урта Азия башҡорттарыбыҙ



7

Үҙең яраҡлашҡын килмәһә...

заманды үҙеңә яраҡлаштыр!



8-9

Үҙебеҙсә үтһен туйҙарыбыҙ!



11,16

Монафиҡты нисек айырырға,

йәки Әҙәм балаһына иң әүәл нимә кәрәк?



12-13

ТВ-программа 14

***"Беҙ бөтә торған ҡәүем түгел, бәлки, донъяла мәңге торор үә башҡа милләттәр менән берлектә Ер йөҙөнән файҙаланыр өсөн килгән милләтбеҙ".***

***Ризаитдин Фәхретдин.***

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

***Быйылғы йыл Рәсәй халыҡтарының мәҙәни мираҫ йылы тип иғлан ителде. Илебеҙ халыҡтарының йолаларын, боронғо кәсептәрен тергеҙеү, сәнғәтен күтәрмәләү, үҫтереү, байытыу, һаҡлау йәһәтенән был ҡарарҙың әһәмиәтен нисек баһалайһығыҙ?***

***Артур ӘЛИБӘКОВ, Республика Халыҡ ижады үҙәгенең генераль директоры, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре:*** Эйе, үткән йылдың һуңғы көнө - 31 декабрҙә РФ Президенты Владимир Путин 2022 йылды Рәсәй халыҡтарының мәҙәни мираҫ йылы итеп үткәреү хаҡында указға ҡул ҡуйҙы. Был ҡарарҙы беҙ, халыҡ сәнғәте һәм мәҙәниәте өлкәһенә туранан-тура мөнәсәбәте булған хеҙмәткәрҙәр генә түгел, ә бөтөн милләт халыҡтары ла ҡыуаныс менән ҡаршы алғандыр. Минеңсә, бик кәрәк һәм ваҡытлы ҡарар. Дөрөҫ, бөгөн илдә пандемия, иҡтисади көрсөк кисергән осор булыуға ҡарамаҫтан, халҡыбыҙ күңел төшөнкөлөгөнә бирелмәй. Һәр ваҡыттағыса, бай тарих һәм традицияларға эйә булған, күпте кисереп, ихтыяры сыныҡҡан Рәсәй халыҡтары эшләй ҙә, ял да итә, байрамдар ҙа үткәрә белә, сөнки ниндәй генә шарттарҙа ла тормошобоҙҙо мәҙәниәт һәм сәнғәтһеҙ күҙ алдына килтереүе ҡыйын.




Халыҡ сәнғәте төрлөлөгө һәм уның үҙенсәлектәре, мәҙәни мираҫ һәм тарихи ҡомартҡыларыбыҙға һаҡсыл мөнәсәбәт буйынса Башҡортостан Рәсәйҙә лайыҡлы рәүештә алдынғы урындарҙың береһен биләй, шулай уҡ ул донъя күләмендә лә күптән танылыу яуланы. Һуңғы ике йыл эсендәге ҡаҙаныштарыбыҙ ғына ла ошо хаҡта яҡшы һөйләй: халыҡ сәнғәтенең юғары үҫеш кимәлен 2021 йылда республикабыҙҙа ҙур уңыш менән үткәрелгән абруйлы Фольклориада ла раҫланы. Һәр хәлдә, Башҡортостан Бөтөн донъя фольклор үҙәге итеп юҡҡа ғына һайланманы бит. Бик күп милләт вәкилдәре һыйышып, тыныс йәшәгән республикабыҙ һәр береһе үҙенең этник үҙенсәлеге менән айырылып торған, ошоға тиклем һаҡланып килгән боронғо традицияларға эйә йырлы-моңло, талантлы халыҡтар төйәге икәнен бөтөн донъяға күрһәтә алды.

Беҙ үткәргән саралар күп йәһәттән республикабыҙ етәкселеге тарафынан яҡлау таба. Былтыр, мәҫәлән, 14 декабрь - Башҡорт теле көнөндә хөкүмәт ҡарары буйынса Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың шәхсән булышлығында үткәрелгән Башҡорт милли кейемдәренең "Тамға" халыҡ-ара конкурсы мәҙәни мираҫ хазиналарыбыҙҙың халыҡ күңелендә ни тиклем ҡәҙерләп һаҡланыуы һәм уның иҫ киткес популярлығы тураһында һөйләүсе уникаль күренеш булды. Унда ҡатнашыусылар үҙ ҡулдары менән теккән, боронғо өлгөләрҙән ҡарап тергеҙелгән башҡорт милли кейемдәре, биҙәүестәр һәм аксессуарҙарҙан торған 1500-ләп эшен күрһәтте.

Шулай итеп, Башҡортостан халыҡтарының сәнғәт ҡаҙаныштары беҙҙең күҙ алдында үҫешә, байый һәм киң популярлыҡ яулай. Мәҙәни мираҫыбыҙ халыҡ тормошонан, уның сәнғәтенән айырылғыһыҙ, сөнки был өлкә ошо сәнғәтте бар итеүсе йыр-моң, оҙон көй, бейеү, туған тел байлығы, ауыҙ-тел ижады, эпостарыбыҙ, йола һәм традицияларыбыҙ, ғөрөф-ғәҙәттәребеҙ, халыҡ кәсептәре, халыҡ уйындары, художество ҡанундары, музыка ҡоралдары технологияһы, милли символика һәм биҙәк өлгөләре, башҡа бик күп рухи һәм матди хазиналарыбыҙҙы, шулай уҡ боронғо тарихи ҡомартҡыларыбыҙҙы үҙ эсенә ала. Ошо өлкәлә билдәле бер тәртип булдырыу, уны һаҡлау, файҙаланыу, өйрәнеү маҡсаттарында 2020 йылда БР Дәүләт Йыйылышы "Рухи-мәҙәни мираҫ тураһында" закон ҡабул иткәйне. Ошо законға ярашлы, беҙ матди булмаған мәҙәни мираҫ объекттарының махсус реестрын төҙөнөк. Был бик мөһим эш булды, уның нигеҙендә матди булмаған объекттарҙың тарихи һәм художество ҡиммәттәре, үҙенсәлектәре билдәләнә, шулай уҡ ҡайһы берҙәренең юғалыу хәүефе иҫкәртелә.

## БАШ ҠАЛАМ

# ДИМ БИҪТӘҺЕ...

## бәләкәй генә үҙ донъям

**"Киске Өфө"нө атай-әсәйем алдыра, мин дә ҡыҙыҡһынып уҡып барам. Айырыуса баш ҡала тураһындағы фекерҙәр баҫылған гәзитте ҡулыма эләктерә һалып алам, сөнки мин Өфөлә тыуып, ошонда буй еткереп килгән үҫмер егет. Ололар менән бер рәттән, баш ҡала тураһында үҙ фекерҙәремде лә еткергем килгәйне.**

Беҙ Дим биҫтәһендә йәшәйбеҙ. Эйе, ҡайһы берәүҙәргә Өфөлә тормош тик үҙәк райондарҙа ғына гөрләй кеүек тойола, буғай. Ләкин ҡаланан ситтә ятҡан райондарҙа ла шулай уҡ кешеләр йәшәй, эшкә һәм уҡырға йөрөй, түңәрәктәр эшләй, спорт мәктәптәре, парктар һәм башҡалар бар. Йәштәр дуҫтары менән осраша, ғөмүмән, йәнле тормош бара. Шуға күрә мин нәҡ үҙемдең Дим биҫтәһе тураһында яҙып үткем килә.

(Дауамы 2-се биттә).




12+

✓ *Үткән йылда беҙ бик ҡыҙыҡлы боронғо кәсеп төрө - "Иң оҫта сарыҡ тегеүсе" конкурсы иғлан иткәйнек, уға быйыл майҙа йомғаҡ яһаласаҡ. Түбә ауылы ағинәйҙәре районда беренсе булып сарыҡ тегеп кейҙе.*

*БАШ ҠАЛАМ*

# ДИМ БИҪТӘҺЕ...

## бәләкәй генә үҙ донъям

**(Башы 1-се биттә).**

Дим биҫтәһен тимер юлсыларҙың бәләкәй генә ҡалаһы, тип әйтергә лә мөмкиндер, моғайын, сөнки бында бөтә Рәсәй тимер юлындағы иң ҙур станцияларҙың береһе урынлашҡан. Шулай уҡ бөгөн айырым ҙур районға әүерелгән Дим биҫтәһе ваҡытында Ағиҙел йылғаһының һул ярында барлыҡҡа килгән бәләкәй генә тимер юлы разъезынан башланған. Разъезға исемде эргәһендә ағып ятҡан йылғанан - Димдән - алғандар. Биҫтәлә шулай уҡ башҡа күп төрлө тимер юлы ойошмалары бар. Хатта Дим биҫтәһененең айырылып торған үҙенсәлеге булған Ухтомский урамы ла паровоз арт-объекты менән башлана һәм тимер юлы аша үткән күпер менән тамамлана. Әйткәндәй, был күпер Дим биҫтәһененең тағы ла бер билдәһе, сөнки уның һымаҡ оҙонлоҡтағы тимер юлы аша үткән йәйәүлеләр өсөн күпер тотош республикала башҡа юҡ.

Биҫтәлә матур урындар күп, ләкин ипкә килтереүҙе талап иткәндәре лә етерлек. Миңә, мәҫәлән, беҙҙең райондағы буш территорияларҙың күп булыуы оҡшамай. Улар бер нәмә менән дә тултырылмаған, ә унда мәктәп уҡыусылары, йәштәр өсөн ылыҡтырғыс урындар эшләргә мөмкин. Өфөнөң Ленин урамында "Арт-квадрат" майҙансығы миңә нык оҡшай, шундай уҡ өлгөләрҙе ҡаланың бөтә урындарында ла эшләп булалыр бит, тигән һорау менән мөрәжәғәт иткем килә етәксе ағай-апайҙарға. Әгәр ошондай ҡыҙыҡлы урындар булһа, подъезд эсендә һәм тышында, балалар майҙансығында йыйылышып һөйләшеп торған йәштәр шунда бармаҫ ине тиһегеҙме? Әлбиттә, барырҙар ине.

Беҙҙең Дим биҫтәһендә берҙән-бер парк бар. Унда ҙур саралар уҙа, концерттар була, ата-әсәләр бәләкәй балалары менән йөрөп ята, йәштәрҙең дә йыйылған урындарының береһе ул. Инфраструктура йәһәтенән дә замандан артта ҡалмайҙар. Ләкин миңә һәм күпселек дуҫтарыма унда яңғыраған музыка оҡшамай. Төрлө йүнәлештәге һәм заманса музыкаль әҫәрҙәр ҡуйылһа, барыһының да күңеленә хуш килер ине. Шулай ҙа был беҙҙең парк, беҙ унда бәләкәйҙән уйнап үҫкәнбеҙ һәм беҙ уны яратабыҙ.

Парктың, ғөмүмән, тотош райондың үҙ атмосфераһы: унан йылылыҡ бөркөлә, ул минең күңелемә яҡын, минең тыуған һәм торған ерем. Беҙҙә кешеләр һәйбәт, яғымлылар. Дөйөм алғанда, Дим биҫтәһендә йәшәү өсөн бөтә шарттар ҙа бар. Транспорт эше яҡшы ойошторолған, күренекле музейыбыҙҙан кеше өҙөлмәй, мәктәптәр һәм балалар баҡсалары ла етерлек. Бында үҙенә генә хас тормош һәм ул башҡа райондарҙыҡына оҡшамауы менән дә минең күңелемә яҡын. Дим биҫтәһе минең өсөн бәләкәй генә баш ҡалам һәм унда йәшәүем менән бәхетлемен.

**Айрат ӘБСӘЛӘМОВ.**

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

?

***Быйылғы йыл Рәсәй халыҡтарының мәҙәни мираҫ йылы тип нарыҡланды. Илебеҙ халыҡтарының йолаларын, боронғо кәсептәрен тергеҙеү, сәнғәтен күтәрмәләү, үҫтереү, байытыу, һаҡлау йәһәтенән был ҡарарҙың әһәмиәтен нисек баһалайһығыҙ?***



***Гүзәл МОНАСИПОВА, Баймаҡ районы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе:*** Баймаҡ районы ағинәйҙәре Рәсәй халыҡтарының мәҙәни мираҫы йылы хаҡындағы ҡарарҙы хуплап ҡаршы алды, сөнки беҙҙең ойошманың төп эшмәкәрлеге тап ана шул указ талаптарына яуап бирә лә инде. Беҙ, республика "Ағинәй" йәмғиәте ағзалары, был йүнәлештә күптән эш алып барабыҙ. Башҡорт халҡының милли традицияларын, йолакәсептәрен, ғөрөф-ғәҙәттәрен өйрәнеү, тергеҙеү, һаҡлау һәм таратыу, быуындар бәйләнеше булдырыу, үҫеп килгән быуында илһөйәрлек, телһөйәрлек, үҙаң, рухилыҡ тойғолары тәрбиәләү һәм уға булышлыҡ итеү быйылғы йыл девизына бик тә ауаздаш. Боронғо милли кейемдәрҙе, биҙәүестәрҙе, халыҡ кәсептәрен тергеҙеү, сарыҡ тегергә, кейеҙ баҫырға, балаҫ һуғырға өйрәнеү һәм башҡалар ошо ҡомартҡыларыбыҙҙың башҡа халыҡтарҙыҡынан бер ҙә кәм булмауын, боронғобоҙ менән ғорурланыу тойғоһо тәрбиәләү, ата-бабаларыбыҙҙың ҡатын-ҡыҙҙы ололауын, хөрмәтләүен, тәрбиәгә ҙур иғтибар биреүен, шулай уҡ башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының матурлығын, нәзәҡәтлеген, әҙәп ҡанундарын замандаштарыбыҙға, йәштәргә, башҡа халыҡтарға күрһәтеү һәм киләсәк быуындарға аманат, мираҫ итеп ҡалдырыу өсөн кәрәк. Мәҫәлән, үткән йылда беҙ бик ҡыҙыҡлы боронғо кәсеп төрө - "Иң оҫта сарыҡ тегеүсе" конкурсы иғлан иткәйнек, уға быйыл майҙа йомғаҡ яһаласаҡ. Түбә ауылы ағинәйҙәре районда беренсе булып сарыҡ тегеп кейҙе. Иҫке Сибай ағинәйҙәре лә сарыҡлы булдылар, оҫталыҡ дәрестәре лә үткәреп торалар. Ошо боронғо аяҡ кейеме тегеү буйынса уларҙың тәжрибәһе район ағинәйҙәре президиумы ултырышында өйрәнелде, хупланды һәм был тәжрибә таратыуға тәҡдим ителде. Иҫке Сибай ағинәйҙәре менән бергә уларҙың ир-егеттәре лә "Иң оҫта сарыҡ тегеүсе" район конкурсына ҡушылды. Улар бергәләп ир-егеттәр һәм балалар өсөн дә сарыҡ тегәсәктәр. Боронғо милли көнкүреш әйберҙәрен тергеҙеү менән шөғөлләнгәндә ир-егеттәр ҡулы кәрәк булып китә, шуға күрә улар ҙа дөйөм эшкә йәлеп ителде.

Ярат ауылы ағинәйҙәренең дә эш тәжрибәләре республика күләмендә күп кенә таратылды. Улар ҙа "Аҡһаҡалдар ҡоро" менән бергәләшеп-кәңәшләшеп эшләй, был ыңғай һөҙөмтәләр бирә. Район ағинәйҙәре йыйындарында Ярат аҡһаҡалдары ла ҡатнашып, эшлекле кәңәштәре менән сығыш яһай. Төркмән ауылы ҡатын-ҡыҙҙарының эш тәжрибәләре лә маҡтауға лайыҡ. Улар менән беҙ "Ҡорама ҡорау" онлайн оҫталыҡ дәрестәре ойошторҙоҡ. Дәрестәрҙе көн һайын "Иң оҫта ҡорама ҡораусы- 2021"район конкурсында Гран-при яулаған Хәҙисә Ҡотлоғужина алып бара.

Быйыл "Иң яҡшы ағинәй булмәһе" район конкурсына ла йомғаҡ яһаласаҡ. Ағинәйҙәргә ауыл биләмәләре башлыҡтары махсус булмә биреп, уны ремонтларға ярҙам итә, бының өсөн уларға бик тә рәхмәтлебеҙ! Ағинәй булмәләре йәштәр ҡатнашлығында ҡатын-ҡыҙҙар менән тәрбиәүи саралар, оҫталыҡ дәрестәре үткәреү өсөн файҙаланыла. Шулай уҡ был бүлмәләрҙә йәмғиәткә ҡағылышлы бөтөн кәрәкле норматив-хоҡуҡи документтар, эш пландары, үткәрелгән сараларҙан отчеттар тупла на, шулай уҡ милли кейемдәр һәм биҙәүес өлгөләре, ҡуйыла.

Беҙ, Баймаҡ ағинәйҙәре, милли кейемдәр һәм биҙәүестәр, һарауыс, таҫтар, сарыҡ тегеү, шулай уҡ халҡыбыҙҙың аш-һыу, ризыҡ йүнәтеү йолалары, ғаилә ҡиммәттәрен нығытыусы ғөрөф-ғәҙәттәрҙе тергеҙеү буйынса эштәребеҙҙе быйыл айырыуса рухланып дауам итәсәкбеҙ, сөнки беҙ тоғро юлда һәм был йүнәлештәге эштәр ил етәкселеге тарафынан хупланып тора. Президент В.Путиндың халыҡтарҙың мәҙәни мираҫ йылы хаҡындағы указы шуға яҡшы дәлил.

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# КҮҢЕЛЕМДЕ БИКЛӘНЕМ



**"Әгәр ҙә һин кем өсөндөр насарға әйләнгәнһең икән, тимәк, һин был кеше өсөн бик күп яҡшылыҡ эшләгәнһең", тигән кемдеңдер һүҙҙәрен яҙып алғанмын. Ошо хаҡлыҡҡа ярашлы ҡыйынһыныу кисереп йөрөгән саҡта күҙемә эленгәндер инде был һүҙҙәр. Кемгә нисектер, әммә минең үҙемә шул тиклем тура килә был. Сөнки мин изгелек эшләп, шунан кинәнес табыусыларҙанмын.**

Юҡ, изгелегем өсөн рәхмәт көҫәп йөрөмәйем мин. Изгелекте бит барыбер үҙеңдең күңелең ятҡан, һүҙең береккән, быға лайыҡлы тип иҫәпләгәндәргә ҡарата ихласлап эшләйһең. Ул кеше быны шатланып ҡабул итһә, рәхмәтле булһа, һиңә лә ҡыуаныс.

Бер ҙә улай уйланғаным юҡ ине: бына әле ошо юҫыҡта үҙемде төңөлдөргәндәрҙе күҙҙән үткәреп ултырамсы. Шунан тиҙ генә ул темаға күңелемде бикләй һалып ҡуям. Күңелемә теге йөҙҙәрҙе индермәйем. Ә шулай ҙа башта әйткән аҡыл телдә урала: эйе, уларға мин мохтаж саҡтарында ярҙам иткәйнем, әммә улар был изгелекте аңламаған кешеләр булып сыҡты. Улар хәҙер минең юлдаштар түгел. Онотолһондар, әйҙә. Йөрөп ятһындар. Иҫән-имен булһындар...

**Гөлбаныу ГӘРӘЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Роспотребнадзорҙан хәбәр итеүҙәренсә, Башҡортостанда коронавирус, грипп һәм киҫкен респиратор вирус инфекцияһы менән сирләү осраҡтары кәмене. Башҡортостанда Роспотребнадзор идаралығы 348 тикшереү үткәргән. Ун биләмәнән аэропортҡа инеү сикләнгән. Был 28 ноябрҙә үк ғәмәлгә индерелгәйне. Өфө аэропортына килгән бөтә пассажирҙарға тест үткәрелә.

✓Роспотребнадзорҙан хәбәр итеүҙәренсә, коронавирустың яңы төрө Өфө аэропортына килеп төшкән туристарҙа асыҡланған. Икәүһе - Танзанияла, Ырымбурҙа йәшәгән ханым ейәндәре менән Төркиәлә ял иткән. "Омикрон" йоҡторған сирлеләр дауаханаға оҙатылған, уларҙың хәле ҡәнәғәтләнерлек. Улар менән бәйләнештә булғандарҙың бөтәһе лә, шул иҫәптән рейс пассажирҙары, пилоттар һәм ғаилә ағзалары изоляцияла ултыра. Барыһы ла табиптар күҙәтеүендә. Уларға көн һайын коронавирус инфекцияһына тест үткәрелә. Яңы омикрон штамы Рәсәйҙең 13 төбәгендә асыҡланған.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Нуриман районына эш сәфәре барышында муниципалитеттың төп аҙыҡ-түлек сәнәғәте предприятиелары менән танышты һәм уларҙы артабан яңыртыу, ассортиментты киңәйтеү мөмкинлектәрен тикшерҙе. Республика етәксеһе Ҡыҙылъяр ауылы янында "Люкс" компанияһының алкоголле һәм алкоголһеҙ эсемлектәр етештереү комбинатында булды. Билдәләнеүенсә, компания бөтә эсемлектәрҙе үҙенең ваҡлап һатыу селтәрендә һата, уның республика буйынса 80-дән ашыу сауҙа нөктәһе бар. Радий Хәбиров компанияға юл буйы сервисын үҫтереү буйынса республика программаһында ҡатнашырға тәҡдим итте.

✓Башҡортостан Хөкүмәтендә уҙған оператив кәңәшмәлә республика етәксеһе Радий Хәбиров социаль объекттарҙа, атап әйткәндә, фитнес-клубтарҙа, спорт һәм мәҙәниәт учреждениеларында, сауҙа үҙәктәрендә, шулай уҡ транспортта тикшереү буласағын хәбәр итте. Рейдтар 11 ғинуарҙа уҡ башланды. Радий Хәбиров муниципалитет башлыҡтарына үҙ биләмәләрендә тикшереүҙәр үткәрергә ҡушты. "Коронавирус бер ҡайҙа ла китмәне. Сирлеләрҙең кәмеүенә иғтибар итергә кәрәкмәй. Халыҡты ышандырырға, эшләргә, һаулыҡ һаҡлау системаһын көр кәйефтә тоторға кәрәк", - тине Башҡортостан Башлығы.

✓ *Юлдарҙа үлемесле авариялар булып торғанда һәм шул һәләкәттәрҙең байтаҡ өлөшөндә эскән килеш руль артына ултырыусы водителдәр ғәйепле булыуына ҡарамаҫтан, АЗС-тарҙа һыра һатыу башҡа һыймай.*



БЫНАҒАЙЫШ!

**Почта бүлексәләрендә беҙгә хеҙмәттәр күрһәтеү менән бергә, көнсәләр тауарҙары, кер порошогы, һабын, парфюмерия, түшәк кәрәк-ярағы кеүек һәм башҡа төр көнкүреш-хужалыҡ тауарҙары ла тәҡдим ителеүенә һәм һатып алырға мөмкин булыуына өйрәнгәнбеҙ инде, һәм бында әллә ни хилафлыҡ күрмәйбеҙ: ниндәйҙер тыйыу һалынған йә рөхсәте сикләнгән әйбер һатмайҙар бит, шуныһына ла шөкөр. Тик бынан почта предприятиеларына берәй килем-төшөм бар микән - уныһы беҙгә ҡараңғы.**

# БЕНЗИНГӘ ҠУШЫП... ҺЫРА?



Ә бына уҙған йыл ахырында Рәсәй мәғлүмәт сығанаҡтарында таралған хәбәр күптәрҙе аптырашта ҡалдырыу ғына түгел, йомшаҡ итеп әйткәндә, асыу тойғоһо тыуҙырмай ҡалмағандыр. Дөрөҫ, бөгөн бер почта предприятиеларының ғына хәле мөшкөлдән түгел, иҡтисад бөлгөнлөгө ҡағылмаған тармаҡ, учреждение-ойошма юҡтыр ҙа. Хатта хаҡы көнләп-сәғәтләп арта барған стратегик продукция - яғыулыҡ менән сауҙа итеүсе бензин ҡойоу станциялары ла (артабан - АЗС тип алыныр) "саҡка тын ала" башлаған, тиҙәр. Әйткәндәй, почтала оҙаҡ йылдар эшләгән бер таныш менән булған һөйләшеү иҫкә төшә. Почта хәлдәре менән ҡыҙыҡһынғас, ул "Почтальондар фәҡирләнә, юғарылағы топ-менеджерҙар байый", тип яуап биргәйне.

Туҡтағыҙ, бензин менән дә шулайыраҡ хәл килеп сыға түгелме? Көн-төн йоҡламай бензин һатыусы станциялар ҙа фәҡирлек сигенә еттеме ни инде? Ошо мәлдә күҙ алдынан һәр ваҡыт ҡәнәғәт йылмайған "бензин королдәре" йөҙҙәре сағылып китә. Юғарылағыларға рәхәт тә ул, тик бына бөтөн ҡара эште башҡарыусы түбәнге звеноларҙың хәле күренмәйҙер шул уларға... Шулай булмаһа, аптырағандың көнөнән арты менән һыуға сумған ҡош хәләнә төшмәҫ ине улар. Дөрөҫөрәге, хәле мөшкөлләнгән АЗС-тарға сауҙа менән әллә ни уртаҡлығы булмаған "икенсе һулыш" РФ Энергетика министрлығы бирмәксе икән. РБК, "За рулем", Интерфакс сайттарында һәм "Известия", "Московский комсомолец" гәзиттәрендә хәбәр ителеүенсә, Энергетика министрлығы АЗС-тарға... һыра һатыу мөмкинлеге биреү тәҡдиме менән Рәсәй Хөкүмәтенә мөрәжәғәт иткән, имеш. Яғыулыҡ булмаған тауарҙар ассортиментын киңәйтеү бензин станцияларының көндәлек килем кимәлен арттырып, уларҙың иҡтисади хәлен яҡшыртасаҡ, йәнәһе. Шулай булырмы-юҡмы - билдәһеҙ, тик шуныһы асыҡ: юлдарҙа көн һайын үлемесле авариялар булып торғанда һәм шул һәләкәттәрҙең байтаҡ өлөшөндә эскән килеш руль артына ултырыусы водителдәр ғәйепле булыуына ҡарамаҫтан, АЗС-тарҙа бензин менән бергә һыра һатыу тәҡдимен айыҡ аҡыл менән ҡабул итеүе ҡыйын. Предприятиелар хәлен еңеләйтеү маҡсатында һөҙөмтәлерәк механизмдар эҙләү һәм табыу урынына, иҡтисад һәм сауҙа ведомстволары эшенә ҡыҫылып, Энергетика министрлығының уларға "тишек-тошокто" популяр булмаған өҫтәмә сауҙа кәсебе ярҙамында "ямау һалып" ҡотолорға тәҡдим итеүен бер ҙә генә профессиональ идара итеү ысулы тип әйтеп булмай. Шул элеккесә "алыпһатарлыҡ" шөғөлө генәлер инде был, бер яңылыҡ та түгел.

Әйткәндәй, АЗС-тар өсөн дә был яңылыҡ түгел, элек улар был кәсеп менән шөғөлләнгән булған, ләкин 2012 йылда бензин станцияларында һыра менән сауҙа ҡәтғи тыйылған. Ә икенсе тапҡыр бер үк тырмаға баҫыуҙың ни менән бөтөрө билдәле. Эксперттарҙың байтағы был аҡылһыҙ идеяның киләсәге юҡ тип ҡараһа ла, уның бойомға ашырылырына өмөт иткән һәм хатта уны хуплаған әҙәмдәр ҙә етерлек. Рәсәй Яғыулыҡ союзы етәксеһе Евгений Аркуша фекеренсә, был сара барыбер АЗС проблемаларын хәл итә алмаясаҡ. Тыйыуҙы юҡҡа сығарып, һыра һатыу алдан иҫәпләүҙәр буйынса бер литр бензинға ни бары 30-40 тин генә өҫтәмә бирәсәк икән. Шулай булғас, был хәүефле башланғысҡа тотоноп тороу ҙа кәрәкмәй!

Юғиһә, автоһәүәҫкәрҙәрҙең кәсәһенә икеләтә яу буласаҡ. АЗС витринаһында теҙелеп торған һәр төрлө шешәләр кемеһенең генә күҙен ҡыҙыҡтырмаҫ? Иң ихтыярлылар менән ҡатын-ҡыҙ водителдәрҙең генә шешәләргә иҫе китмәҫ китмәнә, ә башҡалар үҙҙәрен бик бәхетле һәм ҡәнәғәт тойор, моғайын. Тик был юл-транспорт ваҡиғаһы йә булмаһа, тәүге Юл-патруль посы хеҙмәткәре туҡтатҡанға тиклем генә дауам итер. Һәр хәлдә, һемереп өлгөргән водитель штраф түләп кенә ҡотолһа ла шөкөр ҡыласаҡ. "Рөхсәт итһәләр, итһендәр, әйҙә. Ләкин руль артында эскән водитель, бер яҡтан, беҙҙең өсөн табыш ҡына - анралар бар икән, шуны белеп ҡуйһындар", - тип интервью бирә билдәһеҙ ҡалырға теләгән Юл-патруль хеҙмәтендә эшләүсе берәү "Московский комсомолец" хәбәрсеһенә. Дөрөҫ һүҙгә яуап юҡ.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Быйылғы йыл Рәсәй халыҡтарының мәҙәни мираҫ йылы тип иғлан ителде. Илебеҙ халыҡтарының йолаларын, боронғо кәсептәрен тергеҙеү, сәнғәтен күтәрмәләү, үҫтереү, байытыу, һаҡлау йәһәтенән был ҡарарҙың әһәмиәтен нисек баһалайһығыҙ?***

***Ғәбиҙә ВӘЛИЕВА, Башҡорт милли кейемдәренең "Тамға" халыҡ-ара конкурсы призеры:*** Мәҙәни мираҫ йылы тураһындағы ҡарарҙы үҙемдең эш өлгөләрем менән ҡаршылайым. Бик кәрәкле, ваҡытлы ҡарар. Ҡурған өлкәһе Сафаҡул районының Ҡалмаҡ-Әбдрәш ауылында тыуып үҫтем. Беҙҙә боронғо кәсеп-шөғөл, милли кейемдәр тегеп кейеү традициялары ҡәҙерләп һаҡлана ғына түгел, ә көндәлек ғәҙәтебеҙгә әүерелгән. Ҡурғандар әлеге ваҡытта ла боронғо башҡорт костюмдарын көндәлек кейем итеп файҙалана. Был электән шулай тәңгә яҡын, йәнгә йылы булып ғәҙәткә һеңгән, бының аңлатып булмай торған ниндәйҙер һаҡлағыс ырымы бар төҫлө. Бигерәк тә әбейҙәр үҙҙәренең сигеүле биҙәктәр һалынған камзулдарын, күлдәктәрен көндәлек тормошта яратып кейә. Бәләкәй саҡта беҙ, кескәй ҡыҙсыҡтар ҙа, ошо кейемдәрҙә кейеп үҫтек, шуға күрә уның һәр биҙәге, һәр детале күҙ алдымда.

Беҙҙең кейемдәр айырым башҡа үҙенсәлектәре менән күҙгә бәрелеп тора. Мәҫәлән, апайҙар балитәкле йә тоҡон ғына күлдәк һәм камзулдарына тәңкәләр тағып кейәләр. Ә бына ҡушъяулыҡты байрамдарҙа ғына ябыналар. Оло йәштәге ирҙәр ҙә пинжәк урынына кәзәкей кейә. Атайым да мәңге өҫтөнән кәзәкейен һалмаҫ ине. Уны өлкәндәргә күршебеҙҙә йәшәгән бер тегенсе еңгәбеҙ тегә ине. Әбейҙәр ҙә күлдәктәрен унан тектереп алыр булды. Ул еңгәбеҙ әле лә иҫән. Минә ҡомартҡы итеп атаһының әллә ҡасанғы кәзәкейе менән бишмәтен биргәйне, шуларҙың өлгөһөнә ҡарап, иремә яңыларын тектереп алдыҡ. Иремә тағы ла музейҙағы өлгөгә ҡарап, башҡортса күлдәк тектек



һәм боронғоса биҙәкләп, сигеү һалдым.

Шулай итеп, тәжрибә тупланды һәм мин тәүге "Тамға" конкурсында ла бер ҡатын-ҡыҙ кейеме тегеп ҡатнашҡайным, ә былтырғы конкурсҡа өс комплект әҙерләнем. Күлдәктәрҙең итәген ҡурғандарса үҙебеҙҙең элмә менән тектем (беҙҙә "сиктем" тимәйҙәр, ә сигеүҙе лә "тектем" тиҙәр). Шулай итеп, һары төҫтән сатин күлдәктең итәген әберкәләп, үҙебеҙҙең биҙәктәрҙе һалдым һәм кәүҙә яғын аппликациялар эшләп, сәскәләр сиктем дә, үҙебеҙҙәгесә - боронғоса стилдә урталарына тәңкәләр ҡаҙап сыҡтым. Икенсе күлдәкте күк сатиндан, итәген тар ғына әберкәләп, өсөнсөһөн бешкән сейә төҫөндәге сатиндан бер ниндәй "мажараһыҙ" ғына итәк-еҙ остарына элмә-сигеү һалып сыҡтым. Быларҙы моделдәр кейҙе, баштарына ҡушъяулыҡ ябындырҙыҡ, ҡайыулы алъяпҡыс һалдылар, ә үҙем тағы бер ижад өлгөм - таҫтарымды ябынып сыҡтым. Тәүге конкурста ла икенсе урын яулағайным, былтыр ҙа эшем юғары баһаланды, рәхмәт! Үҙебеҙҙең Ҡурған яҡтарына ғына хас элементтары менән боронғо кейемдәрҙе тергеҙергә хыяллана инем, ниһайәт, моратыма ирештем, шөкөр. Башҡортостан юлдаш каналының "Башҡорттар" тапшырыуында иһә Ҡурған башҡорттарының милли аш-һыу төрлөләгән, ерҙәштәремдең ризыҡ әҙерләү тәртибен һәм нескәлектәрен күрһәтеп сығыш яһаным. Тик ҡурғандарса ғына бишбармаҡ, йыуаса бешереп күрһәттем, саламай әҙерләнем, буҙа ҡойоу ысулдарын өйрәттем, сигеү өлгөләре менән таныштырҙым. Мине йыш ҡына ҡул эштәре буйынса ла оҫталыҡ дәрестәре күрһәтергә саҡыралар. Йәштәрҙе тамбур, элмә, туптырма ысулдары менән сигергә өйрәтәм. Ғөмүмән, халҡыбыҙҙың боронғо рухи-мәҙәни ҡомартҡыларын, йола һәм традицияларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен өйрәнеү, тергеҙеү эштәре күңел талабыма әүерелде, асылымды ошо өлкәлә таптым.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓2022 йылда Башҡортостанда нефть сығара башлауға 90 йыл тула. Шуға бәйле республика етәксеһе ошо мөһим юбилейға әҙерләнеү һәм уны ойоштороу тураһында Указға ҡул ҡуйҙы. Документҡа ярашлы, Ишембайға "Хеҙмәт ҡаһарманлығы ҡалаһы" исемен биреүҙе юллау планлаштырыла. Бынан тыш, юбилей саралары барышында Башҡортостан нефтен беренсе булып асыусылар майҙанына, Губкин урамына капиталь ремонт үткәрелә, башҡа объекттар төҙөкләнderелә.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Башҡортостан" телерадиокомпанияһын дәүләт унитар предприятиеһында булды. 2022 йылдың икенсе яртыһында республика "Башҡортостан" телерадиокомпанияһын акционерлыҡ йәмғиәтенә үҙгәртеү, тип билдәләне Башҡортостан Башлығы. Ул Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы етәкселегенә телерадиокомпания етәкселеге менән берлектә юл картаһын әҙерләргә һәм компанияның матди-техник базаһын яҡшыртыу буйынса тейешле документтар тапшырырға ҡушты.

✓В.Путин указы менән Омскиҙа казарма емерелгәндә иҫән ҡалған Өфө егете Рөстәм Нәбиев Рәсәй Федерацияһы Йәмәғәт палатаһына ағза итеп алынды. Рөстәм Нәбиев параспортсы, блогер, ҡулдары менән Рәсәйҙең һәм Европаның иң юғары нөктәһе Эльбрусҡа менеп еткән тәүге кеше булараҡ билдәле.

✓Урал тау-металлургия компанияһы үҙ биләмәһендәге 7-10 класс уҡыусылары өсөн яңы мәғариф проекты - "Инженер мәктәбе" аса. Ул илдең 24 ҡалаһы һәм 11 төбәген үҙ эсенә аласаҡ. Уның маҡсаты - уҡыусыларҙың белем кимәлен күтәреү һәм уларҙы киләсәктә аңлы рәүештә һөнәр һайлауға өйрәтеү. 2022 йылдың ғинуарынан май айына тиклем "Инженер мәктәбе"ндә ҡатнашыусылар уҡыуҙы көндөҙгө һәм онлайн форматта үтәсәк. Уҡыусылар шулай уҡ компанияның Инженериада турында ҡатнаша ала.

✓2021 йылдың ноябрендә тыуым кимәле 2020 йыл менән сағыштырғанда 5,2 процентҡа артҡан. Росстат мәғлүмәттәре буйынса, ноябрҙә республикала 3 275 сабый донъяға килгән, был 2020 йылдың ошо уҡ осорона ҡарағанда 161 сабыйға күберәк. Артым 5,2 процент тәшкил иткән. Артым буйынса республика Волга буйы төбәктәре араһында - өсөнсө, илдә алтынсы урынды яуланы. Дөйөм алғанда, 2021 йылдың ғинуарынан ноябренә тиклем Башҡортостанда 36 136 сабый тыуған, был былтырғыға ҡарағанда 3,7 процентҡа аҙыраҡ.

✓ *"Рәшит Закир улын башҡорт халҡының рухи таянысы тип йөрөтәләр. Һәр юлды ул йөрәгенән үткәреп яҙа. Уның әҫәрҙәре тыуған еренә, туған теленә һөйөү менән һуғарылған", - тип яҙҙы Радий Хәбиров.*



ҠЫҪҠАСА

# ПОЧТАЛАР ЯҢЫРТЫЛА

✓**Рәсәй Хөкүмәте ауыл ерендә почта бүлексәләрен яңыртыуға 5 миллиард һум аҡса бүлә.** Президент ҡушыуы буйынса Хөкүмәт ауылдарҙа һәм барып етеүе ҡыйын булған төбәктәрҙә урынлашҡан почта элемтәһе бүлексәләрен яңыртыу эшен башлай. 2021 йылдың аҙағына тиклем резерв фондтан ошо маҡсатҡа 5 миллиард һум йүнәлтелә. Был аҡса 1,2 меңгә яҡын почта бүлексәһен норматив хәлгә килтерергә, шул иҫәптән уларҙы яңы мебель һәм ҡоралмалар менән йыһазландырырға мөмкинлек бирер тип көҙәллана. Хөкүмәт рәйесе Михаил Мишустин шундай бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы. Тиҙ төҙәлә торған биналар һалыныуы ихтимал. Был эш өс йылға иҫәпләнгән. Бөтәһе ошондай 25 160 объект яңыртыла. Уларҙың яртыһынан күберәге - 50 проценттан ашыуы иҫкергән.

✓**Рәсәйҙең дүрт төбәге заманса инфекция үҙәктәре төҙөү өсөн Башҡортостан проектын файҙалана.** Был проект Өфө районында һәм Стәрлетамаҡ ҡалаһында ковид-госпиталдәр төҙөүҙә һынап ҡаралды. "Медицина форумында нимә кәрәклеге тураһында һөйләштек. Хәҙер беҙҙең проекттар һәм технологиялар буйынса Силәбелә ковид-госпиталдәр ҡалҡып сыҡты, Ырымбурҙа, Калугала төҙәлеп бөтөп килә тип ышаныслы әйтә алабыҙ. Белгородта ике госпиталь төҙөү эшенә тотондолар. Был бик уңышлы проект булып сыҡты", - тине Башҡортостан Башлығы. Ошо арала Сибайҙа һәм Туймазыла ике яңы инфекция үҙәге төҙөлөшөнә старт бирелде, тип иҫкә төшөрҙө Радий Хәбиров: "Уларҙың төҙөлөшөн контролдә тоторға, тиҙерәк төҙөп бөтөргә кәрәк, сөнки коронавирус инфекцияһына бәйле хәлдең артабан нисек булырын белмәйбеҙ".

✓**"Цифрлы иҡтисад" милли программаһының "Цифрлы иҡтисад өсөн кадрҙар" федераль проекты сиктәрендә Рәсәй Цифрлаштырыу министрлығы уҡыусы балаларҙы программалау теленә өйрәтеү буйынса пилот проектын ғәмәлгә ашырмаҡсы.** 2021 йылда Рәсәйҙең ун төбәге, шул иҫәптән Башҡортостан уҡыусыларына Putho, C#, Java, PHP һәм JavaScript кеүек программалау телдәрен өйрәнеү өсөн 24 курстың береһенә яҙылыу мөмкинлеге бирелде. Проектта ҡатнашау өсөн курс һайлағандан һуң уҡыусыға һөнәри йүнәлеш һәм мотивацияға инеш тест үтергә, ата-әсәһе менән берлектә анкета тултырырға һәм белем биреү ойошмаһы менән килешеү төҙөргә кәрәк буласаҡ. Был курстар математика һәм информатика буйынса нигеҙ мәктәп программаһына өҫтәмә буласаҡ. Уҡыуҙар 14 йәштән өлкән уҡыусыларға иҫәпләнә. Курстар кәмендә 144 академик сәғәт тәшкил итәсәк. 2022 йылдан мәктәп уҡыусылары программалау телдәренә өйрәтеү буйынса ике йыллыҡ курстар Рәсәйҙең бөтөн төбәктәрендә лә мөмкин буласаҡ.

✓**Республикала 2021 йылдың яҙында урмандарҙы парһыҙ ебәк күбәләгенә ҡаршы эшкәрткәндә хужалыҡтары зыян күргән умартасыларға компенсация түләнә.** Субсидия алыусыларҙың исемлеге Башҡортостандың Ауыл хужалығы министрлығы сайтында баҫылған. Бөтәһе 17 миллион һумға яҡын аҡса бүленә. Аҡса 61 эшҡыуарға бирелә, субсидиялар күләме 1,3 миллион һумдан 25 мең һумға тиклем тәшкил итә. Умартасылар юғалтыуҙарҙы ҡаплау өсөн 2021 йылдың 24 ноябренән 22 декабренә тиклем ғариза бирә алды. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Башҡортостанда урмандарҙы парһыҙ ебәк күбәләге ҡарышлауыҡтарына ҡаршы эшкәрткәндән һуң биш райондың умартасылары зыян күрҙе. 26-28 майҙа бал ҡорттарының ҡырылыуы тураһында тәүге хәбәрҙәр килә башланы. Мәксүт һәм Мораҡ ауылдары умартасылары беренселәрҙән булып саң ҡаға башланы. Йылайыр һәм Ейәнсура райондарында ла бал ҡорттарының ҡырылыуы теркәлде.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ТӨПКӨЛДӘ ХӘСТӘРЛӘП...

**Башҡорт дәүләт медицина университеты майҙансығында Цифрлы медицина институты асылды. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә ошо турала хәбәр итте.**

"Башҡорт дәүләт медицина университетының Цифрлы медицина институтын асыу медицинаны цифрлаштырыу һәм заманлаштырыу йәһәтенән үҫеш. Был ситтән тороп телекоммуникациялар, республикабыҙҙың төпкөл биләмәләрендә йәшәгәндәргә ситтән тороп консультация биреү һәм юғары квалификациялы медицина ярҙамы күрһәтеү мөмкинлеге", - тип билдәләне республика етәксеһе. Уның һүҙҙәренсә, Башҡорт дәүләт медицина университеты әүҙем үҫешә, яҡшы белгестәр әҙерләй. Юғары уҡыу йорто "Өҫтөнлөк-2030" программаһында уңышҡа өлгәште, халыҡ-ара рейтингтарҙа алдынғы позицияларҙы биләй. Сит илдәрҙең танылыу яулаған фәнни һәм белем биреү үҙәктәре менән берлектәге ғилми проекттарҙы үҫтерә, яңы перспективалы һөнәрҙәр аса. "Былтыр Бөтә Рәсәй күҙ һәм пластик хирургия үҙәге Башҡорт дәүләт медицина университеты составына инде. Быйыл Өфө күҙ ауырыуҙары ғилми-тикшеренеү институтын да ошо уҡ университет составына тапшырыу тамамлана. Шул рәүешле республикабыҙҙа ҡеүәтле офтальмология кластерын булдырасаҡбыҙ. Был халыҡ, тармаҡ, медицина фәнен һәм практиканы үҫтереү өсөн бик мөһим ваҡиға булыр" - тип яҙҙы Радий Хәбиров.

# ӘҘИПТЕ ҠОТЛАНЫ

**Радий Хәбиров яҙыусы һәм ғалим Рәшит Шәкүрҙе 85 йәшлек юбилейы менән ҡотланы.**



Башҡортостан Башлығы "Һокланғыс кешеләрҙең тормошо" тигән рубрикаһында абруйлы аҡһаҡал, күренекле йәмәғәт эшмәкәре, Башҡортостандың халыҡ шағиры, филология фәндәре докторы, профессор, Өфөнөң почетлы гражданы Рәшит Шәкүр хаҡында һөйләне. "Рәшит Закир улын башҡорт халҡының рухи таянысы тип йөрөтәләр. Публицистик мәҡәлә йәки шиғыр, проза йәки монография булһынмы, һәр юлды ул йөрәгенән үткәреп яҙа. Уның әҫәрҙәре тыуған еренә, туған теленә һөйөү менән һуғарылған", - тип яҙҙы Радий Хәбиров. Тап Рәшит Закир улы "Башҡортостан" энциклопедияһын булдырыу идеяһын тәҡдим итте, ул күп томлы универсаль "Башҡорт энциклопедияһы"ның концепцияһын әҙерләп, ошо проектты уңышлы тормошҡа ашырҙы, уның мөхәррирлегендә башҡорт телендә Ҡыҫҡаса энциклопедия донъя күрҙе, тип билдәләне республика Башлығы. Радий Хәбиров үҙенең аккаунтын уҡып барыусыларға ғалим һәм яҙыусының тәүге һөнәренең нефтсе булыуы, ғаиләһе - тормош иптәше Марина Нәби ҡыҙы һәм ҡыҙҙары Шәүрә, Гөлдәр хаҡында ла бәйән итте.

# АЛДЫНҒЫ УҠЫУ ЙОРТОБОҘ

**М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты Волга буйы федераль округы RAEX юғары уҡыу йорттары рейтингына ингән.**

Рейтингты төҙөүселәр ассоциацияһы һәм RAEX рейтинг агентлығы Рәсәй ректорҙар берекмәһе, Фән һәм мәғариф министрлығы ярҙамы менән федераль округтар буйынса вуздар рейтингының пилот версияһын тәҡдим итте. Волга буйы федераль округы ҡатнашыусылар һаны буйынса икенсе урында, локаль рейтингыға 59 вуз ингән. М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты рейтингыға ингән республика юғары уҡыу йорттарының береһе. Локаль рейтингыны төҙөү алымы милли һәм глобаль исемлекте формалаштырыуҙан айырыла. Беренсенән, ул объектив мәғлүмәткә генә таяна. Икенсенән, сифатлы кадрҙар әҙерләү өсөн шарттар күрһәткесенә һәм вуздың әһәмиәтенә иғтибар бирелә. Уның йәмәғәт миссияһы ла мөһим: төбәк өсөн кадрҙар әҙерләүҙә өлөшө, маҡсатлы йүнәлтмә менән уҡыусылар һәм башҡа төбәктәрҙән килгән студенттар һаны, уҡыу йортоноң белем биреүҙең селтәрле формаһында ҡатнашыуы, өҫтәмә һөнәри программаларҙы бойомға ашырыуы, киң мәғлүмәт сараларында вуз тураһындағы материалдарҙың булыуы, сайт аудиторияһы, социаль селтәрҙә яҙылыусылар һаны, спорт күрһәткестәре иҫәпкә алына.

# ҺАЛЫМ ҠАЙТАРМАҺЫ КЕМГӘ?

**2022 йылдан дауаланыу, балалар уҡытыу, хәйриә ярҙамын күрһәтеү һәм күсемһеҙ милек алыуҙан тыш, тағы физик культура-һауыҡтырыу хеҙмәтенә һалым ҡайтармаһын алырға мөмкин.**

Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев билдәләүенсә, һалым ҡайтармаһының күләме 120000 һум тип билдәләнгән, ошо сумманың 13 процентын, йәғни 156000 һумды кире ҡайтарырға була. Уны алыр өсөн физик культура-һауыҡтырыу хеҙмәтенә түләгән сығымды раҫлаған документтарҙы, йәғни килешеү һәм касса чегы күсермәләрен тапшырыу мөһим. Ҡайтарма республиканың спорт министрлығы исемлегенә индерелгән хеҙмәттәргә генә бирелә. Уны үҙең өсөн генә түгел, балалар өсөн дә алып буласаҡ. Документтарҙы эш биреүсе, шулай уҡ һалым инспекцияһы аша тапшырырға мөмкин. Эш биреүсе аша биргәндә йыл аҙағына тиклем тултырырға була. Был осраҡта һеҙҙең эш хаҡынан 13 процент НДФЛ тотолмаясаҡ, ә ул сумма һалым ҡайтармаһы түләнеп бөткәнсе һеҙҙең иҫәпкә күсерелеп барасаҡ. 2022 йылда түләнгән аҡсаның һалым ҡайтармаһын 2023 йылдан башлап алырға мөмкин. Шуны ла иҫәпкә алырға кәрәк: фитнес өсөн һалым ҡайтармаһы балалар уҡытыуға, дауаланыуға түләүҙән һәм хәйриә ярҙамынан тыш, башҡа социаль түләүҙәргә лә ҡушыла, йәғни, әгәр һалым осоронда үҙеңдең уҡыуыңа 10 000 һум түләү алырға тейеш булһаң, фитнес өсөн ҡайтарма 5600 һумдан артмаясаҡ.

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓2022 йылдың 15 ғинуарынан 6875/6876-сы Өфө - Яңы Абҙаҡ поезы маршрутында яңы туҡталыш барлыҡҡа килә. Был - Белореттан 150 саҡрым алыҫлыҡта урынлашҡан Йөйәк станцияһы. Башҡортостан ҡала яны пассажирҙар компанияһынан хәбәр итеүҙәренсә, туҡталыш халыҡ һорауы буйынса булдырыла. Был поезд менән Өфөнән Урал арьяғындағы тау саңғыһы курортына барып ҡайтырға мөмкин.

✓Яңы йылдан һуң өфөләр байрам көндәрендә өй түрендә күҙ яуын алып ултырған урман һылыуҙарын сүплеккә сығарып ташлау урынына уларҙы эшкәртеүгә тапшыра ала. Был экологик акция 2018 йылдан дауам итә һәм быйыл ул 15, 16, 22, 23 ғинуарҙа 15 майҙансыҡта үтә. Сараның маҡсаты - ҡала халҡының иғтибарын көнкүреш ҡалдыҡтарын айырым йыйыуға һәм шыршыларҙы артабан икенсел сеймал сифатында ҡулланыу проблемаһына йөләп итеү. Йыйылған шыршылар "Кроношпан" заводына ебәреләсәк.

✓1 ғинуарҙан "Йылы Өфө" колл-үҙәге Ситуация үҙәге итеп үҙгәртелде. Ҡала колл-үҙәге былтыр сентябрҙән алып эшләй башлағайны. Бында Өфө халҡы йылылыҡ менән тәьмин итеү, артыҡ йылытыу, йылылыҡ өсөн түләү һәм башҡа мәсьәләләр буйынса мөрәжәғәт итте. Хәҙер колл-үҙәк халыҡтан йәмәғәт транспорты, шулай уҡ сүп-сарҙы ваҡытында сығарыу мәсьәләләре буйынса ла шылтыратыуҙар ҡабул итә башлай. 8 (347) 277-09-11 телефонынан тыш, мөрәжәғәттәр @Ufahotbot телеграм-боты ярҙамында, "Йылы Өфө" һәм "Карлы Өфө" сервистарында муниципалитет сайты аша ҡабул ителә.

✓Өфө мәктәптәрендә коронавирустан ревакцинация пункттары асыуҙары ихтимал. Өфө хакимиәте башлығы Сергей Греков мэрияла уҙған оператив кәңәшмәлә ошондай тәҡдим индерҙе. "Уҡытыусылар өсөн ревакцинация ваҡыты етеп килә. Мәктәптәрҙә, әйтәйек, райондарҙа, ревакцинация пункттарын ойоштороуға тәҡдим итәм. Уҡытыусыларға шунда килеп, прививка яһатырға мөмкин", - тине Сергей Греков.

✓Өфөнән фехтование буйынса олимпия чемпионы Аделина Заһиҙуллина наградалары менән ҡыуандыра. Был юлы Өфө кәндәрҙә ул Смоленскиҙа үткән Рәсәй кубогында тәүгеләрҙән булып алтын миҙал яуланы. Заһиҙуллина 83 ҡатнашыусы араһында иң шәп спортсы булды, тип хәбәр иттеләр Рәсәй Фехтование федерацияһының матбуғат хеҙмәтенән.

**БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*



# ЮБИЛЕЙ ЭМБЛЕМАҺЫН ЭШЛӘЙЕК!

**Тағы ла ҡар, йылылыҡ, түләүҙәр, тажзәхмәт һәм башҡа темалар тураһында уҡырға теләйһегеҙме? Юҡ, бөгөн һүҙ ул хаҡта булмаясаҡ. Хатта Яңы йыл байрамдарын баш ҡалала нисек байрам итеүҙәре хаҡында ла түгел. Бер аҙ киләсәк тураһында һөйләшеп алырға ниәтләйбеҙ әле. Дөрөҫөрәге, ҡала хакимиәтендә яңы йылда үткән тәүге оператив кәңәшмәлә ҡаралған мәсьәләләрҙән Өфөнөң алдағы ике тиҫтә самаһы йыл эсендә нисек үҙгәрергә тейешлеген тикшереүҙә халыҡтың нисек ҡатнашыуы тураһында һүҙебеҙ.**

Ҡала хакимиәтенең Архитектура һәм ҡала төҙөлөшө баш идаралығы начальнигы урынбаҫары Ольга Сарапулова Өфө-2040 Генераль планы проекты буйынса фекер алышыуҙар тураһында ентекләп таныштырҙы. Уның белдереүенсә, Генераль план әҙерләнә башлаған 2019 йылдан алып әллә күпме саралар уҙғарылған, уларға былтыр декабрҙә һәм быйыл үткән йәмәғәт фекер алышыуҙары нөктә ҡуйған. Халыҡтан барлығы 17 мең самаһы мөрәжәғәт килгән. Был Екатеринбургтағы шундай сара һөҙөмтәләре күрһәткесенән - биш, Ҡазандан өс тапҡырға күберәк, йәғни Өфө халҡы ҡала үҫешенә һәм уның киләсәгенә етди ҡарай. Килгән мөрәжәғәттәрҙең барыһы ла һығай фекер белдерә тип уйларға ярамай - уларҙың 317-һе генераль планды хупламай. 5 меңдән ашыуы иҫкәрмәләр индерә: уларҙың 2800-ө документтың методологияһы һәм бирелеше, 344-е - транспорт инфраструктураһын яҡшыртыу, 1232-һе - социаль объекттарҙы зоналарға бүлеү һәм урынлаштырыу, 822-һе рекреацион зоналар мәсьәләһенә ҡағыла. Барлыҡ был мөрәжәғәттәр тиҙҙән ведомствоара комиссия ултырышында ҡаралаcаҡ.

Оператив кәңәшмәлә шулай уҡ 2024 йылда үтәсәк Өфө ҡәлғәһенә нигеҙ һалыныуҙың 450 йыллығын билдәләүҙең заманса, үҙенсәлекле, эстетик һәм артабан ҡулланырлыҡ фирма стилен булдырыу буйынса конкурс ойоштороу һәм уға ғаризалар ҡабул итеү башланыуы хаҡында ла белдереү булды. Ижади конкурста айырым профессионалдар ҙа, уларҙың дизайн, графика, һынлы сәнғәт өлкәһендә берләшкән командалары ла ҡатнаша ала. Эштәр 20 ғинуарҙа ҡабул ителә башлай һәм өс аҙна дауам итә. Был хаҡта ентекле мәғлүмәтте ufakonkurs450.ru сайтында табырға мөмкин. Бәйгенең өс еңеүсеһе билдәләнәсәк һәм уларға, урындарына ҡарап, 150, 100, 50 мең һум аҡса тапшырыласаҡ. Еңеүсенең эше иһә Өфөнөң 450 йыллығы сараларында ҡулланыласаҡ.

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

## ТӘҮҘӘ КҮПЕР ҺӘМ ЮЛДАР...



**Алдағы 18 йылда баш ҡала Затон, Дим, Миловка, Романовка, Цветы Башкирии ҡасабалары ингән "Көнбайыш дуғаһы" буйынса үҫешәсәк.**

Был территорияларҙа 6,8 миллион квадрат метр торлаҡ төҙөү планлаштырыла, ә уларҙың халҡы 226 мең кешегә артыуы ҡуҙаллана. Был һауанан алынған һандар түгел - 2040 йылға тиклем Өфөнөң яңы Генераль планын эшләүселәр үткәргән онлайн-стрим барышында шундай һандар килтерелә. Иң ҙур район булып Затон тора - унда 80 мең кешегә иҫәпләнгән 2,6 миллион квадрат метр торлаҡ төҙөү ҡаралған. Димдә был һан 1,9 миллион квадрат метр (63 мең кеше), Миловка-Романовкала - 2,1 миллион квадрат метр (70 мең кеше). Цветы Башкирии ҡасабаһында 13 мең кеше өсөн 400 мең квадрат метр торлаҡ төҙөлөүе көтөлә.

Яңы Генпланды эшләүселәр баш ҡаланың ошо йүнәлештә үҫешеүе Өфө ярымутрауы менән транспорт бәйләнеше проблемаһын тыуҙырыуы ихтимал, тип иҫкәртә. Быны ң өсөн бер нисә яңы күпер һалырға кәрәк буласаҡ, был иһә Нижегородканы киң күләмдә үҙгәртеүҙе һәм тимер юлы магистралдәрендә ҡиммәтле юл сиселештәре һалыуҙы талап итә. Хатта күперҙәр булған хәлдә лә рельефтың тигеҙ булмауы һәм төҙөлөш тығыҙлығы ҡала үҙәге менән транспорт бәйләнешен тотҡарлыҡһыҙ тәьмин итеү мөмкинлеген бирмәй. "Мега" сауҙа үҙәген һәм Кузнецовск затонын тоташтырасаҡ Ағиҙел аша төҙөү планлаштырылған күпер көсөргәнеште ни бары 15-20 процентҡа ғына кәметәсәк һәм транспорт коллапсын хәл итмәйәсәк. Ҙур проблемаларҙы иҫкәртеү өсөн яңы Генпланды эшләүселәр "Көнбайыш дуғаһы" районындағы төҙөлөш проекттарының техник-иктисади нигеҙләнеүен ҡабаттан ҡарарға, тәү сиратта автомобиль күперҙәре һәм инженер коммуникацияларын төҙөргә тәҡдим итә.

## АЭРОПОРТҠА ТРАМВАЙ МЕНӘНМЕ?



**Баш ҡаланың 2040 йылға тиклем яңы Генераль планы буйынса фекер алышыу ваҡытында Мәскәүҙең Генплан институтының архитектура-планлаштырыу оҫтаханаһы начальнигы Максим Викулин трамвай юлдарын аэропортҡа саҡлы һуҙырға тәҡдим итте.**

Бөгөн баш ҡаланың трамвай юлы 35,4 километр тәшкил итһә, 2025 йылға уны Үҙәк менән Черниковканы тоташтырыу өсөн Октябрь проспектындағы трамвай юлын ҡабаттан тергеҙеү һөҙөмтәһендә 46 километрға еткереү планлаштырыла. Артабан инде маршрутты Өфөнән ситкә сығарыу арҡаһында юлдарҙың оҙонлоғо 119,5 километрға етергә тейеш. Һөҙөмтәлә туҡталыштар зонаһына 800 мең самаһы, йәғни ҡала халҡының 62 проценты инәсәк. Белгестәр әйтеүенсә, был автомобиль йөрөтөүселәрҙе йәмәғәт транспортына күсергә этәрәсәк һәм автоюлдарҙағы транспорт көсөргәнешен кәметәсәк.

Был план бигерәк тә үҙәктән ситтә ятҡан райондарға трамвай юлдарын көйләү стримда ҡатнашыусы өфөләрҙә бик күп һорауҙар тыуҙыра. Октябрь проспектына ҡабат трамвай рельстары һалыу ҙа шик уята. Әммә был амбициоз пландарҙы тормошҡа ашырыуҙа төп ҡаршылыҡ - финанслау. Трамвай юлдарын төҙөү һәм туҙған вагондар паркын яңыртыу тиҫтәләрсә миллиард һум талап итә. Быңдай аҡса ҡалала ла, хатта республикала ла юҡ. Мәсьәләне бары тик федераль үҙәк ярҙамында ғына хәл итеп була. Был хаҡта күптән түгел үткән матбуғат конференцияһында БР транспорт һәм юл хужалығы министры Александр Булушев белдергәйне. Уның һүҙҙәренсә, республиканы трамвай юлдарын үҫтереү өсөн федераль ярҙам алырға тейешле пилот төбәктәр исемлегенә индереү мәсьәләһе ҡарала.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әҙерләне.**

*ҠЫҪҠАСА*

## ТАҒЫ ЛА АРТА...

✓ **1 ғинуарҙан Өфөлә ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтарын сығарыу яңы тариф буйынса иҫәпләнә.** Ҡулланыусыларҙың барлыҡ категориялары өсөн дә ТКО-ның 1 кубометры 500 һум тора. Сүп-сарҙы сығарыу һәм һаҡлауҙың кубометры 811 һум 43 тин була. Баш ҡалала күп фатирлы йорттарҙа йылына 1,92 кубометр норматив билдәләнһә, шәхси секторҙа йәшәүселәр өсөн был һан 1,95 кубометр. Һөҙөмтәлә фатирҙарҙа йәшәүселәр өсөн айына түләү хаҡы 75 һумдан 80 һумғаса арта, шәхси йорттарҙа йәшәүселәргә айына 81 һум 26 тин түләргә тура киләсәк. 1 июлдән иһә ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтарын сығарыу тарифы тағы ла артып, кубометры 514 һумға етәсәк.

✓ **Рәсәйҙең Мәғариф министрлығы Башҡортостан Республикаһының "Мәктәпкәсә белем биреү сертификаты" проектын шәхси балалар баҡсаларында өҫтәмә урындар булдырыу буйынса иң яҡшы тәжрибә тип таныны.** Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Башҡортостанда ике йыл "Мәктәпкәсә белем биреү сертификаты" проекты эшләй (Өфөлә, Стәрлетамаҡта, Нефтекамала). Йәмғеһе 2000 сертификат тапшырылды. Был сертификат 2 айҙан алып 3 йәшкә тиклемге балаларға шәхси балалар баҡсаһында урын алыу хоҡуғын бирә. Шәхси балалар баҡсаларына бер бала өсөн айына алты мең һум аҡса бүленә: республика ҡаҙнаһынан - 5 700 һум, урындағы бюджеттан иһә 300 һум.

✓ **"Хәүефһеҙ сифатлы юлдар" милли проектын тормошҡа ашырыу һөҙөмтәһендә баш ҡала юлдарын нормативҡа тап килтереү дауам итә.** Быйыл дөйөм оҙонлоғо 20 километр тәшкил иткән 15 участкала ремонт эштәре уҙғарыласаҡ. Иң оҙон һәм киң күләмле объекттарҙың береһе - Ағиҙел йылғаһы аша һалынған күперҙән алып Мебелселәр юл үткәргесе сатына тиклем араулыҡтағы Затон шоссеһы. Уның оҙонлоғо - 8,5 километр. Әлеге ваҡытта был участкала юл тигеҙ түгел һәм колеялар барлыҡҡа килгән. Яҙ етеп, һауа торошо тотороҡланыу менән юлдар ремонтлана башлаясаҡ. Бынан тыш, быға тиклем ремонт башланған объекттарҙа: Ибраһимов бульвары, Эшсе хәбәрселәр урамы (академик Урахсин урамынан Степан Кувыкин урамына тиклем), Зинин ауылындағы һәм "Урал" М-5 автоюлының Нуғай шоссеһы менән тоташҡан урынындағы транспорт сиселешендә эштәр дауам ителәсәк.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, анык диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Бәүел йыш килһә

**Бәүел ҡыуығының юғары мускул тонуһын кәсһеҙләндереү өсөн табип тәғәйенләгән төп дауаланыу ысулына ярҙамға халыҡ ысулдары бар:**

❖ 40 грамм һары мәтрүшкәгә 1 литр ҡайнар һыу ҡойорға һәм төнгәләккә ҡалдырырға. Иртәнсәк һөҙөргә. Төнәтмәне аҙ-аҙлап көн дауамында һыу урынына эсергә.

❖ Бер ус ҡыҙыл көртмәлегә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 15-20 минут төнәтергә һәм һөҙөргә. Көнөнә 2 тапҡыр сәй урынына эсергә.

❖ 1 ҡалаҡ киптерелгән юл япрағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға. 1 сәғәт төнәтеп һөҙөргә. Көнөнә 3-4 тапҡыр ашарҙан 10-15 минут алда 1-әр ҡалаҡ эсергә.

Үҙәгә ысулдар менән әҙерләнгән дауаларҙы сиратлаштырып ҡулланырға. Шуныһы ла мөһим: халыҡ дауаһын ҡулланырҙан алда бәүел инфекцияһы, хроник цистит йәки бәүел ҡыуығы яман шеше кеүек сирҙәр булмауын теүәл билдәләр өсөн тикшеренеүҙәр үтеү кәрәк. Был ауырыуҙар ҙа бәүел йыш килеүенә сәбәпсе булыуы бар.

### Астма

❖ Астма менән ҡаты сирләгән осраҡта тын юлдарын дауалағанда файҙалы шифалы шалфей, кейәү үләне (чабрец), укроп, меңьяпраҡ, үгәй инә үләне, ҡурай еләге, йүкә, кесерткән, календула, андыҙ, ҡылыс үлән (аир болотный) йыйып алырға. Үләндәрҙе киптереп ваҡларға. Төнәтмәне ошо үләндәрҙең береһенән 1 ҡалаҡ алып, өҫтөнә 1 литр ҡайнар һыу ҡойоп әҙерләргә. Көнөнә 5-әр стакан төнәтмә эсергә һәм шул рәүешлә 2 ай дауамында дауаланырға. Бынан тыш, төнәтмәгә көн һайын 30 мл сөйәл үләне төнәтмәһен ҡушырға. Дауаланыу осоронда татлы һәм тоҙло ризыҡтарҙан баш тартырға. Күберәк һөт ризыҡтары һәм бешерелгән тауыҡ ите менән туҡланырға, шулай уҡ арыш һәм бойҙай ондарын аралаштырып бешерелгән икмәкте генә ашарға. Ҡыҙҙырылған аштарҙы ла ашамай торорға. Дауаланғанда аҙна һайын хәл яҡшырыуын-яҡшырмауын билдәләү өсөн анализдар тапшырып тороу, ике айҙан бронхоскопия үтеү мөһим.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

ЙОЛАНДАН ЙӘН ТАП!



# ЙОРТ ЙЫҺАЗДАРЫ

Түшәк һәм һандыҡ аҫтарына ҡуйыла торған махсус әйберҙәр - биҙәү сәнғәтендә башта ҡусмә, аҙаҡ ултыраҡ тормошҡа бәйле булған үҙенсәлекле күренештәрҙең береһе. Улар "урын аяғы", "һандыҡ аяғы", "кейем урыны" тип йөрөтөлгән. Һандыҡ һәм түшәк менән бергә (йәки айырым түшәк кенә) улар урындыҡтың стена буйындағы тар яғын тотош алып торған һәм гәҙәттә йорттоң "таҙа" өлөшөндә урынлашҡан. Килен бирнәһе булған осраҡта аш-һыу яраштырған өлөштә ҡуйылған. XX быуат баштарында С.И. Руденко сеймәрле урын аяҡтарын таулы райондарҙа осратҡан. Рәссам В.С. Сыромятников Бөрйән районындағы бер нисә урын аяғын 30-сы йылдарҙа һүрәткә төшөрөп алған. Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының 1958 йылда ойошторған экспедицияһы барышында Башҡортостандың көньяҡ һәм көньяҡ-көнсығыш райондарынан өр-яңы мәғлүмәттәр тупларға ярҙам итә; этнография бүлегенең архивында рәссам Г.И. Мөхәмәтшиндың төҫлө һүрәттәре, оҫталар һәм һәр районда был әйберҙәрҙе эшләү үҙенсәлектәре тураһындағы мәғлүмәттәр һаҡлана.

Элек аяҡтар (подставки) түшәк һәм һандыҡ аҫтына ҡуйыу өсөн генә түгел, ә һаба (тура дүртмөйөш төплө күн ҡымыҙ һауыты) аҫтына, өҫтөнә таҡта ябылғандары тирмәнең хужалыҡ өсөн тәғәйенләнгән өлөшөндә һауыт-һаба һаҡлау, самауыр ҡуйыу өсөн һ.б. тотонолған. Улар ҙурлығы, эшләнеше, биҙәлеше менән айырылып торған.

XX быуат урталарында Башҡортостандың көньяҡ-көнсығышында осраған аяҡтар XIX быуатта йәки XX быуат башында эшләнгән. Уларҙы биҙәй белгән оҫталарҙың да исемдәре халыҡ хәтерендә һаҡланған. Мәҫәлән, Баймаҡ районында Ғәҙелбай ауылынан Ғәләү Батыршинды яҡшы белгәндәр. XIX быуат урталарында 1-се Этҡол ауылында йәшәгән оҫта Сөләймәнов тураһында хәтерләп һөйләгәндәр. XX быуаттың 20-се йылдары аҙағында Буранбай ауылында Муса Баҡыев урын аяҡтары эшләгән. Уға төрлө ауылдарҙан заказдар килгән.

Тирмәлә йәшәү һәм ҡусмә тормошҡа яраҡлаштырылған башҡа йорт йыһаздары кеүек үк, урын аяҡтары ла тәпәш кенә булған: иҙәндән өскө ҡырына тиклем ни бары 30-35, һирәк осраҡта 40 см бейеклектә эшләнгән. Киңлеге 50 см тирәһе, ә оҙонлоғо 90-130 см итеп алынған. Бороңғо әйберҙәрҙең һәр өлөшө уйланылып эшләнгән булғанға күрә, ауырлығы бик еңел тартҡан. Ҡабырғалары менән ҡуйылған ике таҡтаны (урын аяғының оҙонлоғона) ситтән саҡ ҡына эскә индереп киңлегенә тап килгән өс-дүрт беркеткес арҙамында тоташтырғандар. Ошо рам-рәшәткәгә аяҡтары тоташтырылған. Ултыраҡ тормошҡа күскәс, ҡатмарландырылыраҡ эшләнгәндәр. Алғы яғын тулыһынса ҡаплап эшләй башлағандар, йөҙлөк һәм өскө мөйөштәрен ҡаплап торған ҡанаттары барлыҡҡа килгән. Ҡайһы берҙәренә шылдырып асылмалы тартма йәки кәштә һәм асылмалы ҡапҡастар оҫталағандар.

Күсмә осорҙан булған барлыҡ йыһаздарҙағы кеүек, урын аяғының тик алғы өлөшө генә биҙәлгән. Уны нырлап, рәсем менән аралаштырып, ҡайһы саҡта тик биҙәк төшөрөп кенә матурлағандар. Шул уҡ ваҡытта биҙәк төшөрөү ғәҙәте лә электән килгән һәм үҙенсәлекле сәнғәт кимәленә күтәрелгән. Урын аяҡтарын йыһазлауҙың һәр ерҙә үҙ йолаһы барлыҡҡа килгән. Бигерәк тә Бөрйән, Баймаҡ һәм иң көньяҡта Ейәнсура менән Йылайыр райондарында был асыҡ сағылған.



Һырланған һәм биҙәк төшөрөлгән урын аяҡтары. Бөрйән, Баймаҡ райондарынан. Рәссамы В.М. Шутова

Светлана ШИТОВА.
"Башҡорттарҙа ағас семәрләү һәм биҙәк төшөрөү" китабынан.

ШАҢДАУ



# АУЫЛДАРҒА...

## адвокаттар кәрәк!



**"Киске Өфө" гәзитенең былтырғы 51-се һанында баҫылған "Иҫтә ҡалған яңы йыл" тигән мәҡәләне ҡыҙыҡһынып уҡый башланым. Ғәҙәттә, яңы йыл мажараларға бай була, бында ла шундай ҡыҙыҡ ваҡиғалар тураһында яҙылғандыр, тип уйланым. Етмәһә, авторы ла минең фамилиялаш - Фәүзиә Ҡотлогилдина.**

Ғафури районының Ватан (Родина) ауылынан килгән был хат бер ҙә ҡыҙыҡ түгел, ә фәһемле һәм файҙалы ине. Ауыл старостаһы Фәүзиә ханымдың ауылдаштарына нисә йыл күрмәгән Яңы йыл байрамын ойоштороу өсөн нисек урын, аҙаҡ клуб даулап йөрөүҙәре, үҙе әйтмешләй, китап яҙырлыҡ, уның эшмәкәрлеге күптәргә өлгө булырлыҡ. Ауыл уртаһында павильон эшләтеп, халыҡҡа үҙе етештергән уңыштарын, шәхси хужалығынан артҡан әйберҙәрен һатырға мөмкинлек тә булдыра ул. Быныһы ла бик кәрәк эш. Сөнки бөтә кеше лә, бигерәк тә өлкән йәштәгеләр, мал тота алмай. Һөтөн, майын, ҡаймағын, эремсеген, ҡоротон, ҡатығын һатып алһа, әллә күпмегә етә. Һатҡан кешегә лә файҙа. Ә бит ауыл ерендә баҡса үҫтергән кешеләр ҡайнатмаһын да, компотын да, салаттарын да, тоҙлаған әйберҙәрен дә үҙенән арттырып һата ала. Оло инәйҙәр ойоҡ, бейәләй, йөн тәпешкәләр бәйләп тәҡдим итергә мөмкин.

Быларҙы ниңә яҙам, тиһегеҙме? Күп ерҙәрҙә старосталарҙың исем өсөн генә һайлап ҡуйылыуын белгән өсөн яҙам. Күптәре шул силсәүит ойошторған сараларҙа ҡатнашыуҙан (дөрөҫөрәге, ҡарап тороуҙан) ары уҙмайҙар икәненә лә шаһит булған бар.

Фәүзиә ханымдың мәҡәләһе "Киске Өфө" гәзитенә яңы рубрика тәҡдим итергә этәргес бирҙе: "Ауыл адвокаттары". Эйе, Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең дә шул исемдәге әҫәре бар. Ысынлап уйлап ҡарағанда, ауыл старосталары, адвокаттар кеүек, ауыл мәнфәғәтен яҡлап йөрөүселәр булырға тейеш бит. Күреүегеҙсә, Фәүзиә ханым үҙ ауылында павильон аса, клубҡа бина даулауға өлгәшә, аҙаҡ бинаның беренсе ҡатына ла хужа булып алалар. Һуңынан унда китапхана, медпункт, элемтә үҙәге урынлаша. Бер ҡатын ғына ни тиклем эш башҡарған! Бына, исмаһам, староста!

Әгәр гәзиттә "Ауыл адвокаттары" тигән рубрика асһағыҙ, бөтән ауылдарҙағы старосталар ҙа үҙҙәре башҡарған эштәр тураһында һөйләр, тәжрибә уртаҡлашыр ине. Бәлки, шуларҙы уҡып, ҡул ҡаушырып ҡына йөрөгән старосталар ҙа "ууяныл", дәртләнеп эш башлар. Бигерәк тә әлеге мәлдә, республикабыҙҙа "Айыҡ ауыл" конкурсы барған осорҙа, старосталарҙың эш тәжрибәһе менән уртаҡлашыуы файҙаға ғына булыр. Ысынында, ауыл халҡына бөтөн башланғыстарҙы күтәрмәләп йөрөгән Фәүзиә Ҡотлогилдина кеүек тынғыһыҙ, уйлы-ғәмле кешеләргә әйләп, үҙ көнөн үҙе күрергә, үҙ биләмәһен үҙе һаҡларға, үҙе тәртип урынлаштырырға тейеш икәнен аңларға ваҡыттыр инде.

Зөһрә ҠОТЛОГИЛДИНА.

ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

# ҠУРСАҠТАРЫМ - БҮЛӘККӘ



**Шундай ваҡытта йәшәйбеҙ, магазиндағы хаҡтар артынан ҡыуып етеп тә булмай. Шуға күрә, һәр кем төп эш урынында алған эш хаҡынан тыш, тағы ла килем алыу юлдарын эҙләй. Мин дә улар рәтендә. Гәзит уҡыусыларына үҙемдең аҡса килтереүсе шөғөлөм тураһында яҙып үтмәксемен, бәлки, берәйһенең күңенә салынып, файҙа килтерер.**

Мин һәләк ҡул эше менән булырға яратам. Көн һайын ниндәй ҙә булһа эш менән шөғөлләнмәһәм, күңелем булмай. Шуға күрә нәҡ ошо өлкәне һайлап, шөғөләмдә файҙалы һәм килемле итеү яйын таптым. Оҙаҡламай Яңы йыл етә. Һәр кем туған-тыумасаһын, дуҫтарын һәм коллегаларын бәләкәй генә булһа ла бүләк менән һөйөндөрөргә теләй. Ул бүләк матур, шул уҡ ваҡытта үҙенсәлекле һәм артыҡ ҡиммәт тә булмаһын, тигән принцип тәүге урында тора күптәрҙең алдында. Мин нәҡ ошондай талаптарға тап килгән бүләктәр әҙерләйем.

Һөнәрҙәр күп төрлө хәҙер. Төрлө өлкәлә эшләүселәрҙең, ғәҙәттә, үҙҙәренә генә хас билдәләре менән айырылып торған махсус кейемдәре, билдәләре була. Мәҫәлән, банкта эшләүсе гүзәл заттар аҡ блузкала, ҡара итәктә һәм галстуктарҙа була. Медицина өлкәһендә эшләүселәрҙең үҙҙәренең махсус кейеме. Тимер юлы менән бәйле хеҙмәткәрҙәрҙең дә барыһынан да айырылып торған үҙ формаһы бар. Һәм ошондай төрлө-төрлө һөнәр эйәләре бихисап. Мин ошо үҙенсәлекте күҙ уңында тотоп, ҡурсаҡтар эшләп һатыуға сығарам. Бындай бүләктәр һәр кемдең күңеленә хуш килә, сөнки ул нәҡ уға тәғәйенләнеп эшләнеүен күрһәтеп тора.

Эште былай башланым. Тәүҙә ҡағыҙға төрлө һөнәр эйәләрен сағылдырған ҡурсаҡтар эшләнем дә, уларҙың фотоһүрәтен ватсап аша дуҫтарыма, таныштарға, интернет селтәрендәге төрлө төркөмдәргә үҙ хеҙмәтемде тәҡдим итеп ебәрҙем. Йәйлы ваҡытҡа тура килдем, 8 март алдынан ғына иғландар таратып сыҡҡан инем, "байрамға өлгөртөргә", тигән фарман менән 10 ҡурсаҡҡа заказ килеп тә төштө. Шулай, тәүге ҡурсаҡтарымды медицина хеҙмәткәрҙәре итеп "кейендереп", тәғәйен ваҡытҡа өлгөрттөм. Заказ биреүсегә ифрат оҡшаны эшем һәм хәҙер ул минең даими ҡулланыусым.

Тәүге партияны тиҙ өлгөртөргә кәрәк булғас, интернет селтәренән уртаса ҙурлыҡтағы ҡурсаҡтарҙы яҙҙыртып алып, уларға кейем генә тегеп бирҙем. Улай, тәбиғи, эшемдең килеме әллә ни ҙур булманы. Шуға күрә хәҙер сепрәктән ҡурсаҡтарҙы үҙем тегеп, уларҙы кейендереп бирәм. Былай иткәндә, эшемдән ярайһы ғына килем алам. Ҡурсаҡтарҙы нимәнән, нисек тегергә өйрәткән, хатта тейешле ҙурлығын күрһәтеп, һәр нескәлеген төшөндөрөп яҙылған махсус һыҙмалар ҙа интернет киңлегендә етерлек. Һайлап алырға ғына ҡала.

Хаҡтарға килгәндә, улар төрлөсә - заказдың эшләнеү ваҡытына, ҡурсаҡтарҙың ҙурлығына, ҡатмарлығына һәм башҡа сәбәптәргә бәйле. Һәр кем үҙенең эшенә хаҡты үҙе ҡуя. Минең эштәрем 500 һумдан башлана. Бөгөнгө көнгә табип, полиция хеҙмәткәре, балыҡсы, умартасы һәм башҡа төрлө ҡурсаҡтар эшләп һаттым. Улар хужалары күңеленә хуш килгәндер, тип ышанам. Оҫта ҡуллыларҙы миңә ҡушылырға саҡырам. Шөғөлөгөҙ килем килтереп ҡыуандырһын.

Гөлгөнә ИСКӘНДӘРОВА.
Өфө ҡалаһы.

ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# ҺАРТТАР: УРТА АЗИЯ БАШҠОРТТАРЫБЫҘ

**Байтаҡ ҡына башҡорт ырыуҙары составында үҙҙәрен һарт тоҡомдары тип иҫәпләгән кешеләр бар, ә Себер даруғаһында ваҡытында Һарт олоҫо ла теркәлгән була. Кемдәр һуң улар - һарттар?**



Бәғзе бер Рәсәй тарихсылары тарих төпкөлдәрендә һарт атамаһының этноним түгел, ә соционим, йәғни, билдәле бер социаль төркөм исеме булыуы хаҡында яҙа. Мәҫәлән, В.В. Радлов (1837-1918) һарт атамаһының һиндтарҙа ҡулланылыуын билдәләй. Һинд уддтарының "Лотос сутраһы" ("Саддхарма пундарика сутра") изге Будда яҙмаһында "сартһабаһа" һүҙе сауҙагәр йәиһә каруан йөрөтөүсе мәғәнәһендә иҫкә алына. Ошо атама уйғыр теленә "сартпау" рәүешендә килеп инә, ул "өлкән сауҙагәр" ("сатыкчи улуг") тигәнде аңлатҡан. Күрәһең, X-XI быуаттарҙа ошо уҡ атама төрки телдәре лексикаһына ла килеп инә, ул караханидтар һәм хаканидтарға ҡараған яҙмаларҙа (ғәрәп графикаһында) осрай. В.В. Радлов караханид шағиры Йософ Баласағуни тарафынан ижад ителгән "Ҡутадғу билик" ("Ҡот килтереүсе белем") поэмаһында ла шул уҡ "сарт" һүҙенең сауҙагәр мәғәнәһендә ҡулланылыуына иғтибар иткән.

Мәхмүт әл-Ҡашғариҙың (XI б.) ғәрәп телендә яҙылған "Диван лугат ат-турк" ("Төрки телдәре һүҙлеге") энциклопедик йыйынтығында ла "Сарт - сауҙа итеүсе", тип билдәләнә. Һуңынан "һарт" атамаһы, сауҙа эше менән генә шөғөлләнгән кешеләрҙән башҡа, айырым бер мәҙәни-хужалыҡ итеү менән бәйле булған этник төркөмдәргә ҡарата ла ҡулланыла башлай. XIII быуат башында инде Урта Азияла фарсы йәиһә төрки сығышлы, ултыраҡ тормош алып барған, ер эшкәртеү, һөнәрселек һәм сауҙа менән шөғөлләнгән кешеләр "һарттар", тип атала башлай. XIV быуат тарихсыһы Рәшид ад-дин мәғлүмәттәренә ярашлы, һижри иҫәп буйынса 607 йылда (1210 - 1211) карлук хакимы Арыҫлан хан Сыңғыҙ ханға буйһона, шул саҡта монгол ханы "уға үҙ ырыуынан ҡыҙ бирә һәм уны Арыҫлан-сартактай, йәғни тажик тип атарға бойора". Күренекле тарихсы В.В. Бартольд ошо хаҡта бына нисек яҙа: "Здесь имя народа выступает в форме сартак; окончание тай присоединялось монголами к названию для обозначения мужского представителя соответствующего народа". Карлуктарҙың Арыҫлан ханы, Көнсығыш Төркөстандың һәм башҡа төрки күсмә ҡәүемдәренең хакимы булған хәлдә лә, Сыңғыҙ хан тарафынан сартактар, йәғни һарттар тип аталған йәмғиәт вәкиле сифатында ҡабул ителә. Академик В.В. Бартольд бөйөк хандың һарттарға ҡарата булған мөнәсәбәтен ошолай баһалай: "...сартактаи были для монголов людьми не столько определенной национальности и языка (карлуки были, как известно, тюркским народом), сколько принадлежащими к определенному культурному типу - персидско-мусульманскому".

Монголдарҙың "Йәшерен хикәйәт"ендә ("Монголдарҙың йәшерен тарихы"), хорезмшах Мөхәммәткә ҡаршы һуғыш башланған мәл хаҡында бәйән ителгәндә, "Сыңғыҙ хан Арай артылышы аша Сартаул халҡына һуғыш менән барҙы", тип әйтелә. Дошмандарын тар-мар иткәс, монгол сардарҙары үҙ хакимына ошондай хәбәр ебәрә: "Беҙ һиңә буйһонмаған Сартаул Солтанын түңкәрҙек һәм уның ҡалаларын һәм халҡын алдыҡ... Беҙ барыбыҙ ҙа, һинең кешеләрең дә һәм аттарың, шатланабыҙ һәм тантана итәбеҙ, сөнки күктәр һәм ер беҙҙең ҡеүәтебеҙҙе арттырҙы, һәм бына беҙ Сартаул халҡын тар-мар иттек".

Сыңғыҙ хан заманында, һуңынан Алтын Урҙа дәүләтенең Джучи һәм Сығатай (Чагатай) олоҫтары күскенселәре Урта Азияның ултыраҡ тормошта йәшәүсе халыҡтарын, шул иҫәптән төркиҙәр менән бергә тажиктарҙы ла, һарт тип атағандар. XVI быуатта үзбәк ханы Мөхәммәт Шейбани Мавераннахрҙы яулап алғандан һуң, уның ҡулы аҫтындағы үзбәк төркиҙәренән айырмалы рәүештә, яһаҡ түләүсе төрки һәм фарсы телле ҡәүемдәр ҙә һарт тип исемләнгән. Күренеүенсә, ошо осорҙа һарт атамаһы экзоним, йәғни ситтән бирелгән атама булған. Тора-бара Урта Азия территорияһында көн итеүсе айырым этник төркөмдәр (ултыраҡ тормош алып барыусылар, ҡалаларҙа йәшәүселәр) ошо этнонимды ҡабул итеп, үҙҙәрен башҡа халыҡтарға һарт тип таныта башлай.

XX быуат башында Көнсығыш тарихы буйынса абруйлы белгес, төркиәтсе В.В. Радлов та Урта Азия ҡалаларында йәшәүселәрҙең һарт атамаһы менән нарыҡланыуын билдәләй. Был осраҡта ла "һарт" атамаһының айырым бер этник төркөмгә ҡарата ҡулланылмағанлығын, ә билдәле бер ижтимағи ҡатлам кешеләрен аныҡлаусы термин булараҡ формалашыуын белдерә. Күренекле башҡорт этнографы Р.Ғ. Кузеев ошо хаҡта бына ниҙәр яҙа: "... "һарт" терминының, башлыса, Урта Азияның төньяҡ райондарындағы ултыраҡ тормошта йәшәгән ҡала кешеләрен аңлатыуы хаҡындағы ҡараш, XIX быуатҡа ҡарата тулыһынса дөрөҫ булған хәлдә лә, мәсьәләнең асылын бар тулылығында асып бөтә алыуы икеле".

Рәсәй империяһында 1897 йылда уҙғарылған беренсе бөтөн халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәренә ярашлы, һарттарҙың дөйөм һаны - 968 655, ә үзбәктәрҙең - 726 534 кеше була. Ә XX быуаттың 20-се йылдарында, Урта Азия халыҡтары айырым милли республикаларға бүленгәндән һуң, Үзбәк ССР-ында төп халыҡ бары бер генә этноним - республикаға исем биргән милләт атамаһын ала. Һарт этнонимы инде бөтөнләйгә ҡулланылмай башлай.

Урта Азия һарттарының башҡорт халҡы составына инеүе, хәҙерге осорға килеп еткән мәғлүмәттәргә ҡарағанда, оҙайлы процесс булған. Башҡорт-һарт бәйләнештәре, монгол яуҙарына тиклем байтаҡ элек үк башланып, XVIII быуатҡа тиклем дауам итә. Һарт атамалы Урта Азия кешеләре, күрәһең, башҡорттарҙың Арал-Каспий-Ҡара диңгеҙ буйҙарында көн иткән ата-бабалары менән бик боронғо дәүерҙәрҙән бирле аралашып йәшәгән. Был йәһәттән башҡорттарҙың Әйле ырыуҙар берләшмәһе составында һарт сығышлы төркөмдәрҙең булыуы, ә шул уҡ төп әйле ырыуы сығышы менән Амударъя-Һырдаръя буйҙарынан булып, Урта Азия һарттары менән тығыҙ этник бәйләнештә йәшәүе ысынбарлыҡҡа тап килә. Әйлеләр составында һарт-әйле аймағы булыуы ла ошоға дәлил.

Әйлеләрҙең бер боронғо риүәйәтендә Һырдаръя артындағы бер Бохара бейенең мөгөҙлө айғыры һәм бер көтөү аттары юғалғас, һарт-әйлеләрҙең Башҡорт ерҙәренә килеп сығыуы бәйән ителә. Р.Ғ. Кузеев фекеренсә, һарттарҙың бер өлөшө IX быуатта уҡ Арал һәм Һырдаръя буйындағы далаларҙа йәшәгән уғыҙҙарҙың әйле ҡәбиләһенә ҡушыла, а һуңынан әйле берләшмәһе, Көньяҡ Уралға килеп етеп, башҡорт иленең айырым бер ҙур өлөшөн хасил итә. Әммә бында боронғо һарттарҙың айырым этник төркөм булмайынса, өҫтәрәк килтерелгән фаразға ярашлы, тик социаль атама булыуын да оноторға ярамай. Һарттар, Р.Ғ. Кузеев фаразынан айырмалы, башҡорттар араһына башҡа бер тарихи сәбәптәр арҡаһында ла килеп инеүе мөмкин. Шул уҡ монголдарҙың һарттарҙы "сартак", тип атап йөрөтөүе хаҡында алдараҡ һүҙ булғайны. Байтаҡ быуаттар үткәс тә, батша Рәсәйендә Һарт олоҫо башҡорттарына ҡарата "сартак" атамаһы ҡулланылған. 1735-1740 йылғы башҡорт ихтилалы заманына ҡараған бер документта ошондай мәғлүмәт бар: "...башкирцы в собрании вверх Аю в Сартаковских улусах стоят". Бынан һарттарҙың башҡорттар составына ҡушылыуын XII-XIV быуаттар арауығы менән дә бәйләп була, монгол яулап алыу походтарынан бер аҙ алдараҡ та, һәм аҙағыраҡ, Алтын Урҙаның Джучи олоҫо барлыҡҡа килгән замандарҙа ла, һарт исемле ҡәүем кешеләренең Көньяҡ Урал башҡорттарына ҡушыла барыуын күҙалларға була.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ әҙерләне. (Дауамы бар).**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 76



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Мәңгелеккә рейд: бер туғандай үтәнеләр изге Ватан ҡушҡанды

Ҡалҡыулыҡта тағы ла 7 дошман танкыһы пәйҙә була. Улар беҙҙең яугирҙарыбыҙҙың тылына үтеп китһә, ҡарлы ҡола яланда ятыусы яугирҙар һәләкәттән ҡотола алмаҫ ине. Тап шул саҡта яугирҙарыбыҙ янына артиллерист Хәмит Әүхәтов килеп етеп, тиҙ арала үҙ орудиеһынан дошман танкыларына ут аса. Был саҡта орудие расчетында Әүхәтовтың үҙенән башҡа бер кем дә булмай, расчет яугирҙары автоматсылар менән дошман һалдаттарына ҡаршы сыҡҡан була. Хәмит снарядтарҙы үҙе ташый, пушканы үҙе ҡора һәм үҙе ата. Ә 7 дошман танкыһы уның орудиеһына төбәп ата башлай. Әүхәтов һис ҡаҡшамай, тирә-яғында шартлаған снарядтарға иғтибар итмәйенсә, дошман танкыларына туранан-тура төҙәп атыуын дауам итә. Ул дошмандың 3 танкыһын, 1 штурм орудиеһын сафтан сығара. Немецтарҙың башҡа танкылары ҡалҡыулыҡты ташлап, артҡа сигенә.

Рейдтан сығыусыларға фронт һыҙығына етеү өсөн ни барыһы 10 саҡрымдан да ашыу булмаған арауыҡты үтә алыу кәрәк була. Тик шуныһы - фронт һыҙығы артындағы территория дошман көстәре менән шығырым тулы була. Беҙҙең 16-сы гв. атлы дивизияһына йәнәш 15-се гв. атлы дивизияһы хәрәкәт итә. Комкор Борисов ошо дивизия яугирҙарына 23 февралдә иртә менән Фромандиновка ауылындағы дошманға һөжүм итеп, уның орудиеларын ҡулға төшөрөргә бойора: әгәр был уңышлы килеп сыҡһа, ошо орудиелар менән дошманға ут асып, башҡа яугирҙарҙың фронт һыҙығы аша сығыуын ҡаплап тороп булыр, тип иҫәпләй комкор. 15-се дивизияның 78-се атлы полкы Фромандиновкалағы дошманды атакалай, әммә уңышҡа өлгәшә алмай: немецтарҙың оборонаһын йырып сығыу мөмкинлеге булмай. Ошо полк ҙур юғалтыуҙарға дусар булып, туҡталып ҡала. Алыш барышында 15-се гв. атлы дивизияһы командиры урынбаҫары, гв. полковнигы В.М. Горбатенко һәләк була, ошо уҡ дивизияның политбүлеге начальнигы, полковник Г.С. Кузнецов ауыр яралана.

22 февралдә кискә табан корпус командиры комдив М.М. Шайморатовҡа яңы боевой маҡсат ҡуя: Широкий һәм Малониколаевка торлаҡ пункттарына табан һөжүм итеп, дошмандың ошо йүнәлештәге оборонаһын өҙөргә. Комкор Борисов армия штабынан үҙ исеменә килгән бойороҡто ҡабатлай был юлы. Шуныһы үкенесле, фронт һыҙығының теге яғында, беҙҙең алғы частарҙан күпкә арттараҡ урынлашҡан штаб "ҡорттары" немец оборонаһы артындағы дошман көстәренең ҡайҙа һәм күпме тупланыуын бер нисек тә аныҡ белмәгән. Тап шуның өсөн беҙҙең 3-сө армия штабынан көн һайын, дошман тылынан немецтарҙың күпкә өҫтөн көстәре менән бер туҡтамайынса бәрелеш-ҡыйралышҡа инеп, рейдтан сығып килгән корпусҡа яңынан-яңы, береһе икенсеһенә тура килмәгән бойороҡтар яуып ҡына тора. Ә уның һуңғы бойороғо 7-се гв.корпусының рейдта иҫән ҡалған көстәрен дошмандың алдан әҙерләгән тоҙағына ҡаптырыуға тиң, тип әйтергә була. Комкор Борисов та, тәжрибәле боевой офицер булараҡ, үҙҙәрен ни көтәсәген һиҙенгәндер, моғайын. Әммә ул шул уҡ саҡта армия тиклем армия штабының юғары чиндарына һис ҡаршы килмәй, дошман тылындағы ситуацияны аңлатып та ҡарамай. Бында Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында йыш ҡабатланған бер трагик хәрби традиция хөкөм һөрә: юғары генералитет, хәрби чиновниктар бойороғо һис бер тайпылышһыҙ үтәлергә тейеш. Генерал-майор М.Д. Борисов тап шулай эшләй ҙә инде.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне. (Дауамы бар).**

**Яҙмыш ғәли йәнәптәре йыш ҡына әҙәм балаһын төрлө юлдарҙан, боролоштарҙан йөрөтөп-йөрөтөп, ҡасан да булһа, иртәме-һуңмы, тейешле һуҡмағына сығара ла, уның булмышына, тәғәйенләнешенә тура килгән яңы маҡсаттар, бурыстар билдәләп ҡуя. Әгәр кеше үҙен-үҙе эҙләһә… Бер урында тапанмаһа… Өлгәшелгәндәрҙә туҡталып ҡалмаһа… Публицист, шағир, әҙәби тәнҡитсе Азамат Рәмил улы ЮЛДАШБАЕВ менән осрашып, уның хәйләһеҙ, шул уҡ ваҡытта серле лә күңел донъяһын сәйәхәт ҡылғандан һуң, уны тормошондағы һәр этапты лайыҡлы үтеүе һәм йөкмәтелгән бурысты уңышлы атҡарыуы менән башҡаларға өлгө итеп ҡуйырға йөрьәт иттем.**

**Азамат Рәмил улы, шиғырҙарығыҙ, публицистикағыҙҙы һөйөүселәр өсөн ҡапыл балҡып, нисектер ҡапыл юғалып ҡалған кеүек булдығыҙ. Бының сәбәптәре нимәлә? Әллә, бәлки, роман яҙаһығыҙҙыр?**

- Балҡыуҙар тураһында һүҙ алып барғанда, унан алда мин мәғариф өлкәһендә лә сағыу балҡып, атылған йондоҙ бит әле. Шунан һуң ғына журналистикаға, әҙәбиәткә килдем. Әммә ул өлкәләрҙән киткән хәлдә лә, уларҙың һәр береһе минең булмышымда әле лә бар. Уҡытыусылыҡ, мәктәп директорлығы... Улар ҙа ғүмер буйы үҙем менән йөрөйәсәк. Шул уҡ ваҡытта журналистиканан да, әҙәбиәттән дә ваз яңы маркалы айфон йәки яңы моделле БМВ автомобиле сыҡҡанын көтәме? Әллә криптовалюта менән һатыу итәме? Әллә пенсияһының йәки эш хаҡының осон осҡа ялғап йәшәйме? Ошо тормошонда уның ниндәй уйҙар, кисерештәре менән яныуы ҡыҙыҡ миңә. Бөгөнгө заман үҙгәрештәре эсендәге башҡортто ҡызыҡһындырған яҙмышы. Яраҡлашҡанмы ошо глобаль үҙгәрештәргә, әллә яраҡлашмағанмы?

**Ә заманға яраҡлашырға кәрәкме беҙгә?**

- Бөгөнгө йылдам үҫешкән осорҙа заманға яраҡлаша белеү бик мөһим. Заманға яраҡлашмайбыҙ икән, цифрлаштырыу, нанотехнологиялар, оҫтаханаһы Тик-ток майҙанында 1 миллион 300-гә яҡын подписчик йыя икән, нисек мин подпольела була алам? Ә мине уҡыусылар 200 миллионға яҡынлашҡан. Хәҙер был рубежды ла күптән үттем. Әгәр ҙә лайктар менән һанаһаҡ, улар 11 миллиондан ашыу. Америка Ҡушма Штаттары майҙансығы беҙҙең оҫтахана тураһындағы видеоға репост эшләгәйне, күп тә үтмәне, уны 31 миллион кеше ҡараны. Миллионлап просмотрҙар тураһында һүҙ алып барабыҙ икән, подполье тураһында һүҙҙең булыуы ла мөмкин түгел. Унан тыш, оҫтахана Инстаграмда, Ютубта, Яндекс.Дзенда, Пинтереста иң төп иғтибар үҙәгендә.

мәçкә тейеш, тигән фекер тыуҙырһа, бына шунда мин мәғәнә күрәм.

Ошо көндәрҙә Америка eBay.com маркетплейс майҙансығынан хат килеп төштө. Унда һеҙҙең һатыуҙарығыҙ күп, шуға күрә һеҙгә өҫтәмә лимит бирәбеҙ, тигәндәр. Быға тиклем беҙҙең 41 мең долларға тиклем генә һатыу хоҡуғыбыҙ бар ине. Ә хәҙер айына 82 мең долларға тиклем һатырға мөмкин. Беҙҙең һатыуҙарҙың күбеһе уның аша үтә, атап әйткәндә, АҠШ, Австралия, Англия, Мексика кеүек 40-тан ашыу илгә оҙатыла.

Башҡортостанда беҙҙең тауарҙарҙың 15 проценты тирәһе, Рәсәй буйлап 70 проценты һатыла, 15 процент тауарҙарыбыҙ сит илгә китә. Беҙҙең маҡсат - сит илгә һатыуҙы арттырыу. Уларҙа күн әйберҙәргә, ҡул эштәренең хаҡын, баһаһын яҡшы беләләр. Шуға күрә уларға һатыу беҙгә күпкә файҙалыраҡ. Ҡыҙғаныска ҡаршы, Башҡортостанда күн әйберҙәргә, ҡул менән эшләнгән әйберҙәргә ихтыяж ҙур тип киткән Азамат тәүлегенә 24 сәғәт, аҙнаһына 7 көн, айына 31 көн, йылына 365 көн эшләй.

**Бизнес донъяһы әҙәбиәт, ижад донъяһынан нимәһе менән айырыла? Ул донъяның ҡанундары ҡаты, тиҙәр...**

- Уларҙың бер ниндәй уртаҡлығы ла юҡ. Икеһе - ике даирә. Әле мин, 57 йәшлек ир, үҙемде эшҡыуарлыҡ өлкәһендә икенсе класс уҡыусыһы һымаҡ ҡына итеп тоям, 3 йылда саҡ беренсе синыфты тамамланым. Сөнки илле биш йәшлек тормош тәжрибәмдең бөтәһен дә һыҙып ташлап, яңынын башланым. Бизнес әлифбаһын башланым. Шуға күрә уларҙың уртаҡлығын тапмайым.

Эшҡыуарлыҡ донъяһының ҡанундарына килгәндә, гәҙел генә итеп әйткәндә, закондар-ҡанундар, киреһенсә, зыялылар араһында күпкә ҡатыраҡ. Төрлө интригалар ҙа күберәк. Ғәйбәт, көнләшеү кеүек кире күренештәр ҙә йышыраҡ осрай. Ә бизнес донъяһында ба-

# ҮҘЕҢ ЯРАҠЛАШҠЫҢ

кисмәгәнмен. Уларҙан ҡасып сығып китмәгәнмен. Был өлкәнән китеүемдең сәбәбе, моғайын, минең үҙемдең характерыма, һәр ваҡыт эҙләнеү юлында булыуыма бәйлелер.

Ғөмүмән, мин бер кәртәгә, бер ҡалыпҡа, бер өлкәгә һәм бер даирәгә генә һыйып, күнеп йәшәй торған кешеләрҙән түгелмен. Минә һәр ваҡыт экстремаль ситуация кәрәк. Бер ҡусты: "Азамат ағай, һин үҙеңдең яҙмышың менән эксперимент үткәргән һымаҡһың. Һәр ваҡыт үҙеңде ниндәйҙер экстремаль шарттарҙа һынау алдына ҡуяһың", - тип яҙа ине. Бәлки... Лермонтовтың һәр ваҡыт "дауыл көҫәп йәшәгән елкәне" кеүекмендер. Ғөмүмән, тормош - үҙе үк бик һәйбәт экспериментал майҙансыҡ. Дөйөм әйткәндә, тормошомдоң һәр этабы менән ҡәнәғәтмен, ул "этаптар" минең менән ҡәнәғәтме, белмәйем, әйтә алмайым.

Юҡ, роман яҙмайым. Роман яҙырға сабырлығым етмәй. Енел атлеттар араһында спринтерҙар һәм стайерҙар була бит, йәғни, ҡыҫҡа һәм оҙон араға йүгереүселәр. Мин стайер түгел. Минә һеҙәмтәһен тиҙ күрә торған эш кәрәк. Шуға күрә ҙур күләмле әҫәрҙәр яҙырға түҙемлегем етмәй, шуның өсөн дә ул эшкә тотонғаным юҡ. Әммә киләсәктә, бәлки, яҙырмын да. Темалар күп. Минә милләт яҙмышы эсендәге кеше яҙмышы темаһы яҡын, сөнки беҙ күп ваҡыт халыҡ, милләт тураһында һөйләйбеҙ. Ошо глобализм шарттарындағы 7 миллиард кеше араһындағы туҙан бөртөгөндәй бер кеше образында милләт яҙмышын да һүрәтләргә мөмкин бит. Ул нимә уйлай, бөгөнгө заманда ниндәй кисерештәре өҫтөнлөк итә, криптовалюталар хаҡында белергә теләмәйбеҙ икән, заман беҙҙе тапап үтеп китәсәк, йәғни яҡын киләсәктә үҙ илебеҙҙә гастарбайтер булып, башҡаларҙы хеҙмәтләндереүсе генә булып ҡалыуҙы оҙаҡ көтөргә тура килмәйәсәк. Шуға күрә йә заман менән бергә, йәки унан алдараҡ атлайбыҙ, йә гастарбайтер булып ҡалабыҙ.

Яраҡлашыу, тигәндән. Ул ниндәйҙер баш эйеп йөрөүҙе, булмышыңды, динеңде, енесеңде, милләтеңде, телеңде алмаштырыу тигәнде аңлатмай, ә ошо замандың геройына әйләнеү хаҡында һүҙ алып барыла. Тирмә ҡороп, ҡымыҙ эсеп, йылҡы һуйып, ҡурай уйнап ултырыу мотлаҡ булһын. Тик был һинең ҡалағы офисыңда ниндәйҙер бер нисә миллион һумлыҡ килешеүгә ҡул ҡуйғандан һуң сығып байрам итеү ваҡиғаһына ғына әйләнергә тейештер.

Эйе, яраҡлашыу һүҙе, ғәҙәттә, кире тойғо ла тыуҙыра ул. Бик матур һүҙ түгел, әлбиттә. Әммә яраҡлашҡың килмәһә, заманды үҙеңә яраҡлаштырырға мөмкин. Яңы компьютер программалары өҫтөндә эшләйһең икән, шулай уҡ смартфондарҙың ҡушымталарын беләһең икән, йә булмаһа, һалма интеллект йәки яңы дизайн өлкәһенә яңы алымдар индереп, донъяның һушын алаһың икән, бына шунда донъя һинә яраҡлашасаҡ.

**Һәр ваҡыт йәмәғәтселек күҙе алдында, иғтибар үҙәгендә булған Азамат Рәмил улын "Подпольеға киткән" тип уйлаусылар ҙа булманы түгел...**

- Юҡ, подпольела түгелмен. Әгәр ҙә әле мин башҡоллә шөғөлләнгән эшмәкәрлегем майҙаны - минең "Мосафир"

Эйе, мин матбуғаттан ситләштем, радио, телевидение эфирҙарынан да ситкә киттем, һәр хәлдә, йыш йөрөмәскә тырышам. Сәбәбе бик ябай: мәғәнә күрмәйем. Әгәр минең һүҙем милләтемә, милләтемдең бер генә булһа ла вәкиленә ыңғай кисерештәр алып килмәй икән, минең әйткән һүҙемдән ни мәғәнә! Һүҙҙе һүҙ булһын өсөн генә яҙырға, әйтергәме ни?

Ә бына эшҡыуарлыҡта яңы мәғәнә күрәм, сөнки ниндәйҙер кимәлдә йәштәргә өлгө була алам. 55 йәшемдә үҙ эшемде асырға йөрьәт иткәнмен икән, был күптәргә үрнәк булырға тейеш, тип уйлайым. Минең өлгөм, һаҡалы ағарып бөткән ирҙең ҡулынан килә икән, нишләп беҙҙең ҡулдан кил-

**заманды үҙеңә**

әйтә алмайым. Шуға күрә тауарҙарыбыҙҙың 50 процентын сит илгә, 25 процентын - Мәскәүгә, ҡалғанын Рәсәй буйлап сығарыу - маҡсатыбыҙ.

Әлбиттә, беҙҙең төп маҡсат аҡса эшләү генә түгел. Беҙ глобаль проекты тормошҡа ашырыу менән булабыҙ. Беҙ "Мосафир" брендын булдырабыҙ. Был бренд донъяуи кимәлдә танылыу яуларға тейеш. Тауарға патент алыу ҙа бик мөһим. Аллаға шөкөр, бер йыллыҡ процестың һөҙөмтәһе шул - бөгөн Рәсәй киңлегендә "Мосафир" тауар билдәһенең эйәһе беҙ. Эш күп, пландар ҙур, йәғни, бөгөн подпольеға

рыһы ла асыҡ. Кемдең кем икәнлеге асыҡтан-асыҡ күренә. Унда матур, беҙрә һүҙҙәр менән, ике төрлө стандарттар менән алға китә алмайһың.

**Һеҙ һәр ваҡыт логикаға ҡаршы барған кеүек: был үҙмаҡсатмы, әллә донъяны үҙегеҙсә ҡабул итеүегеҙме?**

- Юҡ, мин бер ваҡытта ла логикаға ҡаршы бармайым. Бында эш минең логиканың башҡаларҙыҡына тап килмәүендә генә. Миҫалға әле генә булған ваҡиғаны килтергем килә: редакцияға ингәндә мине: "Ооо, Азамат һаҡал үҫтереп ебәргән!" - тип ҡаршы ал-



# КИЛМӘҺӘ...

## яраҡлаштыр!

дылар. Был йыш ҡына ҡабатлана торған күренеш. Беҙҙә һәр ваҡыт төҫ-ҡиәфәткә, өҫ-башҡа, кейемгә ныҡ иғтибар бирәләр. Бер-береһенең өйөнөң ҙурлығын, машинаһының затлылығын күрәләр. Әгәр ҙә һин иғтибар итәһең икән, тимәк, һин азат түгелһең. Кешенең кейеменә, байлығына ҡарамай, уның кемлегенә генә иғтибар итһәң, һин шул ваҡытта ғына ирекләһең. Антуан де Сент-Экзюпериҙың "Бәләкәй принц"ындағы кеүек әйткәндә, "Они не спрашивают какой он человек, а спрашивают, сколько он зарабатывает". Минә кешенең ниндәй өйҙә йәшәүе, ниндәй маркалы машинала йөрөүе, кейеме бөтөнләй ҡыҙыҡ түгел. Уларға ҡарап кеше тураһында фекер йөрөтөү - анахронизм, үткән заман ҡалдығы. Беҙ бөгөн бөтөнләй икенсе донъяла йәшәйбеҙ. Мин кешегә: "Был минең өсөн ҡыҙыҡлы кешеме, әллә юҡмы?" - тип ҡарайым. Минә уның кейеме лә, өҫ-башы ла, мөгөҙлөмө ул, әллә ҡойроҡломо - барыбер.

Былар, әлбиттә, минең логика. Ә дөйөм ҡабул ителгән логикаға килгәндә, ул, әлбиттә, түбәндәгесә: "Башҡортостан" гәзитенең баш мөхәррире Азамат Юлдашбаев шул дәрәжәгә өлгәшкән икән, ул шунда ултырырға, пенсияға тиклем эшләргә тейеш, Яҙыусылар берекмәһе ағзаһы икән, ваҡыты-ваҡыты менән уның йыйылыштарына йөрөргә, биш йылға бер тапҡыр китабын сығарырға, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре тигән билдәһе булырға һәм артабан халыҡ шағиры йәки халыҡ яҙыусыһы тигән исем юллай башларға тейеш. Үрҙә әйтеп киткәнемсә, был - дөйөм ҡабул ителгән логика.

Ә хәҙер минең логика: "Мин вафат булғанда үҙем менән нимәләр алып китә алам? Мин үҙем менән ирекле, азат йәшәгән көндәремде, үҙем менән аралашҡан кешеләрем тураһында матур хәтирәләрҙе һәм үҙемдең шикһеҙ-хәсрәтһеҙ йоҡлаған тыныс төндәремде, үҙемдең сәйәхәттәремде алып китәсәкмен". Бына шулай. Шуға күрә дөйөм ҡабул ителгән логикаға, ҡалыптарға һыймайым икән, эш миндә генә түгел, ә ҡалыптарҙың тарлығындалыр, бәлки?

Ә иң ҡыҙығы нимәлә, беләһегеҙме? Ул ҡалыптарҙың булмауында. Ул ҡалыптар юҡ. Ул һәр кемдең башында. Шикшөбһәләрендә. Ҡурҡыуында. Күршеләр нимә тип әйтер? Ауылдаштар нимә тип уйлар? Нимә тип һөйләрҙәр? Бармаҡ төртөп күрһәтерҙәрме икән? Быны ошолар барыһы ла дөйөм логиканың нигеҙен тәшкил итә.

**▶ Бер мәл, йәштәр күберәк ҡалаға күсергә тейеш, тигәнерәк фекер әйткәйнегеҙ. Һаман да шундай ҡараштаһығыҙмы? Башҡорт ауылының киләсәген нисек күҙаллайһығыҙ?**

- Милләт ҡалала формалаша. Йәштәр ҡалаға күсергә тейеш, тигән фекер шунан сығып әйтелгәйне. Бына, мәҫәлән, үткән быуаттың 30-сы йылдар тулҡынын алайыҡ. Ул осорҙа милли интеллигенцияның, зыялыларҙың сығанағы ауылдан булды. Исемләп ҡарағанда Һәҙиә Дәүләтшина, Афзал Таһиров, Ғәбәй Дәүләтшин һәм башҡалар. Шунан башланды урбанизация процесы.

Алтмышынсы йылдарҙа икенсе тулҡын килде. Иң көслө быуын, тип ҡарайым уны. Уларҙың бөгөн күптәре иҫән. Тап ошо йылдарҙа ҡала башҡорт интеллигенцияны формалашты. Уларҙың бөтәһенең дә сығышы ауылдан: Рауил Бикбаев, Тимер Йосопов, Ҡәҙим Аралбаев, Хәсән Назар, Тамара Ғәниева. Бына улар - алтмышынсы йылдар. Алтмышынсы-етмешенсе йылдарҙа милли рухи донъябыҙ шул тиклем нығынды, көсәйҙе. Әҙәбиәтте алып ҡараһаҡ, шул уҡ Мостай Кәрим, сәнғәттә Арыҫлан Мөбәрәков, Заһир Исмәғилев, Әхмәт Лотфуллин. Шул тиклем көслө рухи күтәрелеш булды, улар беҙҙең аңда революция эшләне. Алтмышынсылар. Беҙ бөгөн ана шул рухи байлыҡтың дивидендтарына йәшәйбеҙ. Бизнесмендар инвестиция һала бит, шуның кеүек, беҙ ҙә уларҙың рухи дивидендттарын әле булһа файҙаланабыҙ. Рәми Ғариповтың дивидендтарын һаман булһа "ашайбыҙ". Хатта ки уларҙың рухи байлығын һаман һурып, әрәмтамаҡҡа әйләнә барабыҙ. Хәҙер ауылдың милли кадрҙар биреү краны ябыла бара. Сөнки хәҙер ҡалала ана шул алтмышынсы йылғыларҙың балалары, ейән-ейәнсәрҙәре үҫеп килә. Бөгөн ҡала мәҙәниәтенә ихтыяж ҙур. Әйтәйек, алтмышынсы йылғыларҙың ижады бөтәһенең дә тиерлек ауылға, ауыл темаһына йүнәлтелде. Ауыл уҡыусыһына, ауыл тамашасыһына. Бөтәһе лә тип әйтмәйем, әммә башлыса шулай булды.

Ә бөгөн яңы ихтыяж тыуҙы. Ҡалала үҫкән, ҡала мөхитендә тәрбиәләнгән кешеләр тыуҙырырға тейеш башҡорт ҡала мәҙәниәтен. Һәм бында рухи мираҫты яңы етештереүселәр, яңы ҡулланыусылар булырға тейеш. Тамашасылар, ҡулланыусылар, уҡыусылар, тыңлаусылар һәм башҡалар.

Йәштәр элекке һымаҡ шаушыулы исемдәргә мохтаж түгел, тип әйтеп үттем бит инде. Улар күберәк заман талаптарына ярашлы тыуҙырылған продукттарҙы ҡабул итергә әҙер. Бөгөн йәштәр бөтөнләй икенсе. Улар ирекле, улар азат, ҡурҡып, баҫылып йәшәгән быуын түгел. Халыҡ яҙмышын да белә, уны үҙҙәренсә хәл итә. Утыҙынсы йылдарҙа милли интеллигенцияны үҫтереүгә, алтмышынсы йылдарҙа уны СССР кимәленә сығарырға, күтәрергә ихтыяж бар ине. Беҙҙең ағайҙар, апайҙар күтәрҙе, рәхмәт. Әммә бөгөн, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, тип әйтәйекме, рухи аҙыҡты етештереүгә лә, ҡулланыуға ла ихтыяж ҙур түгел.

Аңлатып китәм: ул ваҡытта китаптар 70, 80, 100 мең дана менән сыҡһа, ә гәзит-журналдарҙың тиражы 50,60,100 мең дана булһа, бөгөн китаптар 500 дана, гәзит-журнал 300-ҙән башлап 3000-4000 дана тирәһе генә тарала. Тимәк, ихтыяж юҡ. Бизнес термины менән әйткәндә, бөгөн яҙыусыларҙың күп итеп яҙыуына һәм рухи продукт етештереүенә ихтыяж юҡ, йәғни ҡулланыусы юҡ. Уның сәбәптәрен эҙләргә кәрәк. Бәлки, бер кемгә лә кәрәк булмаған тауар етештерәләлер? Бәлки, бер кемгә лә кәрәкмәгән һәм авторҙың үҙенән башҡа берәүгә лә ҡыҙыҡ булмаған тема күтәреләләр. Әйтәйек, мин роман яҙҙым да, уны уҡыусы һәм аңлаусы юҡ, тип бар ғәләмгә ғәйеп тағам. Ғәфү итегеҙ, бер мин хаҡлы булып, 1 млн 600 мең башҡорт ахмаҡ була алмай. Киреһенсә булыуы бик тә ихтимал. 1 млн 600 мең кеше бер юлы яңылыша алмай. Ә, бәлки, китапҡа, театрға һәм башҡа рухи ҡиммәттәргә ихтыяж юҡтыр? Һәм бер ҡасан да булмаҫ. Ҡатмарлы һорау был.

Утыҙынсы, алтмышынсы йылдарҙа барлыҡҡа килгән рухи ҡиммәттәр бөгөн милләтте һаҡлап, яҡлап, ҡурсалап тора һәм милләтте башҡа халыҡтар араһында тиңдәш итеп тойорға булышлыҡ итә. Эшҡыуарлыҡ та шулай. Бәләкәй, урта һәм эре бизнес. Әгәр бөгөн милләттең буржуазияһы булмаһа, бөтә милләт, мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәренән, ҡурайсыларҙан, йырсыларҙан, уҡытыусыларҙан ғына тора икән, уның киләсәге бик ҡыҙғаныс. Шуға күрә йәштәргә бөгөн ошо юҫыҡта үҫешеү мөмкинлеге бар икән, шул йүнәлештә үҫешергә кәрәк.



Бөгөн - башҡортса белгән, тамырҙарын онотмаған, милли музыка тыңлаған, милли китап уҡыған, милли театрға йөрөгән, шул уҡ ваҡытта заманса технологиялар менән эш итә белгән, фекерләгән, финанс грамоталығы булған эшҡыуарҙар заманы. Улар киләсәктә беҙҙең милләтебеҙҙең нигеҙен тәшкил итергә тейеш. Ни өсөн? Сөнки улар, бәләкәй, урта, эре бизнес вәкилдәре, ирекле һәм бюджет имсәгенә йәбешкән ҡатламға ҡарағанда азатыраҡ һәм иреклерәк. Бөгөнгө һәм киләсәк йәштәрен шулай күрәм.

**▶ Башҡортостанды 100 йылдан һуң нисек күҙ алдына килтерәһегеҙ?**

- Мин ун йылдан һуң да нисек булырын күҙ алдына килтерә алмайым. Сөнки ваҡыт шул тиклем йылдам үҙгәрә. Элек үҙгәрештәр ун йылға һуҙылһа, хәҙер бер йылдан теге йәки был яңылыҡ иҫкелек ҡалдығы булып күренергә мөмкин. Пандемия күрһәтте бит цифрлы технологияларҙың мөһимлеген. Бында күрәҙәлек итеү хатта урынһыҙ. Бер йылдан нимә булыуын да күҙ алдына килтерә алмайым.

**▶ Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев менән дуҫ инегеҙ. Уның вафатын нисек кисерҙегеҙ? Уның хаҡында иҫтәлек яҙырға уйығыҙ юҡмы?**

- Эйе, Рауил Бикбаев менән дуҫ булдыҡ. Минең яҙмышымда, булмышымда иҫ киткес роль уйнаны ул. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, һуңғы йылдарҙа бик аралаша алманыҡ. Иҫтәлектәргә килгәндә, уның алдында был минең рухи бурыс булып тора. Иҫтәлектәрҙән бигерәк, уның ижадының тәрәнерәк ҡатламдарын байҡарға ине, Алла бирһә. Ун йылдар элек самалап, ниәтләп ҡуйған пландарым бар. Экзистенция күҙлегенән. Нисек бер уҡ ваҡытта бар милләттең күҙ алдында йәшәгән аҡһаҡал булырға һәм шул саҡта уҡ шиктәр, икеләнеүҙәр хас булған, ваҡыты менән ҡысҡырып торған яңғыҙлыҡ тураһында. "Бар ғүмерем ҡуныр урын тапмай, яңғыҙ ҡоштоң осоп барғаны", тигән юлдарын хәтерләйһегеҙме? Хоҙай насип итһә, ул иҫтәлектәр яҙылыр тип уйлайым. Ғөмүмән, уның тураһында яҙырға кәрәк, сөнки Рауил Бикбайҙы уҡыусыһы өсөн бик асылған шағир тип әйтә алмайым.

Ярай, фараз итмәйек, бөгөнгә көн тураһында ғына һөйләшәйек.

**▶ Әлеге ваҡытта һеҙҙе ныҡ борсоған проблема ниндәй?**

- Дөрөҫөн генә әйткәндә, бөгөн мине бер генә проблема борсой - мин маркетинг һәм таргетингты, йәғни үҙебеҙҙең оҫтаханала етештерелгән әйберҙәрҙе аныҡ кешегә еткерергә булышлыҡ иткән рекламаны ныҡлы өйрәнгем килә.

Етештереү процесын өйрәндем, оҫтаханам әҙер. Бөгөн үҙебеҙҙе донъя кимәлендә өлгөрөп еткән оҫталар, тип әйтә алабыҙ. Улай ғына ла түгел, беҙ һәр бер илдең оҫталары менән ярыша алабыҙ. Әммә реклама механизмын тейешле кимәлдә белмәүем, ысынлап та, мине борсой. Әгәр ҙә мине бөгөнгө әхлаҡ ҡанундары, халыҡтың китап уҡымауы, сәйәсәт борсой, тиһәм, дөрөҫ булмаҫ ине. Һеҙ туранан-тура һорау бирҙегеҙ, мин дә яуапты туранан-тура бирергә тырыштым. Башҡа һорауҙар мине борсомай. Бөгөн минең ныҡ өйрәнгән, уҡыған темам - таргетология һәм маркетология, сөнки улар - заманса сауҙа итеүҙең төп күрһәткесе.

Һүҙемде йомғаклап, шуны ғына әйтергә теләйем: матур итеп йәшәр өсөн бер кем дә унайлы шарттар тыуҙырмай хәҙер. Кеше үҙе тырышырға тейеш. Үҙ көсөгөҙгә ышанығыҙ, хаталаныуҙан, яңылышыуҙан ҡурҡмағыҙ, һәр ваҡыт камиллыҡҡа ынтылығыҙ. Рәхәтләнеп йәшәрлек мөмкинлектәрҙе үҙегеҙ булдырығыҙ.

**Лена АБДРАХМАНОВА**
**әңгәмәләште.**

✓ ***Әле генә башымдан үткән түбәнлекле фекерҙән оялып киттем. Ғырылдаҡ, тигән булам тағы, был сихри моң сүп-сарһыҙ, таҙа, үтә күренмәле шишмәнең селтер ағышына тиң!***



Хәйҙәр ТАПАҠОВ

# ҺӨНӘРСЕЛӘР һәм ӨЙРӘНСЕКТӘР

(”Хәтерҙәге хәтирәләр” циклынан)

Фуфайка сиселгәс, саҡырылмаған ҡунаҡтың өҫтөндә күп кейеүҙән эшлектән сыҡҡан пинжәк, иҙеү тапҡыры һиҙрәгән сатраш биҙәкле сатин күлдәк икәне күренде. Түшенә ниндәйҙер атҡаҙанған билдәһен дә тағып алған. Иҫке-оҫҡоға беркетелгән миҙал, хас та һыйырға эйәр һалған һымаҡ күренә. "Эскелек мәлендә икенсе кешенекен яңылыш кейгәндер, йә яйы сыҡҡанда ҡупырайырға теләп, берәйһенекен сәлдергәндер",- тип уйлап ҡуйҙым. Теге үҙ сиратында ҡатҡан билен ауырлыҡ менән эйелдереп, сүсинкә быймаларының галошын ысҡындырҙы:

- Мин оҙаҡҡа түгел... һеҙ әйткәнгә генә...

- Хоҙай Тәғәлә бүлгән ваҡытты хисапламайыҡ, уныһы әлеге мәлдә көнүҙәк, мөһим түгел, давай, түрҙең иң түренә, - шул арала йәшерәк берәүгә күрһәтмәһен бирә лә һалды, - ә һин, дорогой брат, киленде ҡуша тартып шыл был яҡҡараҡ, икенсе ваҡыт шунда ултырырһығыҙ, үҙегеҙҙән юғарыраҡтар булмағанда!

Йәш ир менән ҡатын үпкәләгәндәй тызырайышып урындарынан ҡалҡты. Ғәйсәр ҡулдарын болғап ишаралап, уларҙы урындарында ҡалырға өндәне:

- Юҡҡа борсолмағыҙ, ултырығыҙ шунда, мин үҙ урынымды беләм!

Күпме генә ҡыҫтаһалар ҙа ир түргә ынтылмай, өҫтәл ҡырынан, әсе тир, тәмәке, тағы ла танауҙы ярып барған шундайыраҡ үҙенсәлекле ҡырҡыу еҫтәрҙе аңҡытып, минең яндан урын алды. Ерән Сәс барыбер әҙәп төшөнсәһен, тәрбиә ҡағиҙәләрен белеп еткермәйҙер, ҡыҙарған йөҙөн әсе ҡапҡандай сирып, ризаһыҙ ҡиәфәттә тағы ла арыраҡ, төпкәрәк күсте. Зерә лә шәп, үтә лә ҡулай булды әле, быбың менән танышмаҫ, ҡауышмаҫ элек үк айырылып, араларҙы бөтөнләйгә өҙҙөк, әләйгәс, өс тапҡыр талаҡ ҡысҡырыу ҙа кәрәкмәй хәҙер. Яңы күршемде өнһөҙ баш һелкеп сәләмләгәйнем ул, өҫтәл аҫтынан күрешергә ҡулын һондо, бармаҡтары имән ботағылай суғырмаҡлы, ҡаты.

- Таныш булайыҡ, исемемде ишеттегеҙ, Ғәйсәр атлы булам, фамилиям - Солтанморатов.

- Хәйҙәр.

- Татарстандың билдәле йырсыһы Хәйҙәр Бегичев бар.

- Билдәһеҙ кешемен.

- Шулай ҙа, йырлайһыңдыр, йырламаған башҡорт балаһы булмай ул.

- Яҡын дуҫтарым ҡабул итерлек, уларға ишетелерлек кенә итеп.

- Уныһы ла яраған. Төҫ-башың менән бындағыларға тартмағанһың, ҡайҙан һин, мырҙа?

- Урман Йылайырынан.

- О-о-о, Ишмулла ағай төйәгенән икәнһең, уны мин яҡындан белдем.

Ышанмайыраҡ ҡарап алдым да ары һүҙ ҡуйыртырға теләмәй, алдымдағы ашамлыҡтар һалынған тәрилкәләрҙе, үҙемә тәғәйен тулы рюмканы тегенең алдынараҡ шылдырҙым, тартынмай һыйлан, йәнәһе. Ризыҡҡа ла ҡағылмай был, эҙләп килгән йотомон да йоторға ашыҡманы, юғарынан түбәнгәрәк ҡарап, аҡһөйәктәр, зыялылар ҡоронан килеп, бында ҡыҫҡа ваҡытҡа, осраҡлы һуғылған арҙаҡлы заттай һауалы ҡиәфәттә ғорур һерәйеп тик ултыра. Бер аҙҙан хужа өлтөрәп килә һалып етте, күлдәк еңе төрөлгән йөнтәҫ беләкле ҡулын йәнәш яурынға һалды:

- Ҙурла әле, абзый, беҙҙең табынды, йырла берҙе!

- Инеп етмәҫ элек үк ауыҙ күтәреп аңрап ултырыу килешмәгән шөғөл, башҡалар ҙа бар бит әле!

- Сәсән барҙа теленде тый, тиҙәр, бүтәндәр ни, сабыр ғына көтөп ултырып торорҙар. Ә һиңә ни ҡылһаң да килешә! - Әхмәт был ир менән һин дә мин яҡындан аралаша, үҙ кешеләй тартыныуһыҙ мөрәжәғәт итә, ул ғына ла түгел, ихтирамын, хөрмәтен йәшермәй, Ғәйсәр ҙә күрмәгән-белмәгән кешегә былайтып инеп, йәйелеп ултырмаҫ ине, моғайын.

- Үҙәк буйы ҡымырйытып, йүтәлләп торам бер аҙ.

- Ниңә, бығансы тамағыңды сылатманыңмы ни? Улайһа, тотоп ебәр! - Рюмкаларға ашыраһынан араҡы ҡойҙо. - Бәлки, бер юлы, сиреҥ йыуылып төшөрлөк итеп ҡырлы эстәкәнгә һалып бирергәлер, ә?

- Һин мине кем тип иҫәпләйһең? Шул саҡлы, тигәс тә.

- Бигәйбә, кисер, уйламайыраҡ ысҡындырҙым, үҙем йырыңды тыңлағым килә, телем икенсе нимә хаҡында бытылдай.

- Әхмәт, мужыт...

- Бар ҡунаҡтарым исеменән үтенәм, абзый! Шулаймы, йәмәғәт?

Риза икәнен белдергән табын геүләгәндәй итте, аратирә ҡул сабыу тауыштары ишетелде.

- Бәлки, икенсе ваҡыт?

- Юҡ инде, икенсене көтмәйек, әлеге мәл ҡәҙерле, йырлай алмаһаң, көйлә генә, шуныһы ла баштан ашҡан!

- Белә белһәң, көйһөҙ йыр булмай ул һис ҡасан да, көйһөҙ йыр тоҙһоҙ ашҡа бәрәбәр. Көйлә, тиһең инде, нимәне?

- Билдәле, мәшһүр "Буранбай"ҙы! Уны башҡорттар араһында һинән дә шәберәк, һинән дә оҫтараҡ башҡарған бер кем дә юҡ!

- Бына быныһын инде ләғәткә һыймаҫлыҡ итеп шаштырҙың, Әхмәт! "Урал", "Буранбай", "Тәфтиләү", "Таштуғай", "Ашҡаҙар"ҙы минә ҡәҙәр ҙә йырлағандар, минән һуң да оҫта башҡарыусылар, һис һүҙһеҙ, табылыр. Атап үткән йырҙар донъя кимәлендәге операларға, уникаль, ҡабатланмаҫ иҫәпләнгән арияларға биргеһеҙ, ноталарға һыймаҫ тәрән бөгөлдәре, тырышһалар ҙа күптәр алдыра алмаған бейеклектәре менән мәртәбәлерәк, бәҫлерәк булмаһалар әле! Милләт барҙа халыҡ йырҙары йәшәй бит ул, һис ҡасан юҡҡа сыҡмай!

"Ҡупырый, ҡауҙыр бер әҙәмдер, күрәһең. Әле генә мәшһүр ҡурайсы Дилмөхәмәтовты танышлыҡҡа сығарып фәстерә ине, хәҙер шул килештә була тороп та юғары музыка хаҡында фәлсәфә һата..." Екһенеп, шулайыраҡ уйлап алдым да, быбың менән башҡаса һүҙ сыбалтырға теләмәй, һыртымды ҡуйҙым.

Ир урынынан торҙо, алдына ҡуйылған сәйгә ярыла төшкән шешенке ирендәрен тигеҙеп алды ла сикһеҙ, осһоҙ-ҡырыйһыҙ даланы иңләп ҡарағандай ҡарашын алыҫҡа, билдәһеҙлеккә йүнәлтте, шунан изге ғәмәл башҡарырға йыйынғандай, күкрәк тултырып тын алды ла онотолғандай ҡайҡайҙы. "Билдәле, танылған әртистәй ҡылана! Артыҡ килештермәй генә белгән мөнәжәтен төңрәһен дә ҡуйһын, тауышым ултырған тигәс, уның ғырылдағы кемгә хәжәт! "

Бына бер заман, тамаҡ төбөнән түгел, күңел түренән, йөрәк төпкөлөнән һаҡ ҡына сыҡҡан тауыш ҡолағымды наҙлы иркәләне:

Табаҡ та ғына табаҡ,
ай аҡ ҡағыҙ,
Буранбайҙың яҙған хаттары.
Буранбайҙың яҙған
хатын уҡып,
Зар илайҙар ауыл
ҡарттары...

Әле генә башымдан үткән түбәнлекле фекерҙән оялып киттем. Ғырылдаҡ, тигән булам тағы, был сихри моң сүп-сарһыҙ, таҙа, туҡ башаҡлы иген баҫыуының тулҡыныуына, үтә күренмәле, сафлығы күҙҙәрҙе ҡамаштырған, һалҡыны тештәргә үткән терегөмөштәй шишмәнең селтер ағышына тиң! Ыжғырҙа тумбыҡҡанда йылымыс екәт ел кинәт битемә бәрелгәндәй һиҫкәнеп киттем дә, илаһи тауыш сығанағын эҙләгәндәй, ҡарашымды аҫтан юғарыға ҡарай йүнәлттем. Ошондай йән иреткес, илаһи, ҡабатланмаҫ, йондоҙло көмбәҙҙән яуған ауазды Латвияның баш ҡалаһы Ригала, яңғырашы Европала икенсе урынды биләгән орган залында ишетеп тетрәнгәйнем, шул сихри кисереш бына бында, ауыл кимәлендә яңынан ҡабатланды. Дәһшәтле йыр яйлап күтәрелә барып, ҡапыл ян-тирәгә сойорғоно ла, тыйып алғыһыҙ, бейек, көслө тулҡындай таш стеналарға ҡаҡлыҡҡас, тотош өй эсен тултырҙы, шунан ары бында һыйып ҡала алмай, тәҙрә быялаларын зыңлатып, ваҡ кәртәләрҙе, ҡаршылыҡтарҙы емереп, беҙҙе ҡалдырып, йондоҙло йыһанға осто. Күҙ алдыма шырлыҡлы ҡара урман, тау-ҡаялар араһынан һуҙылған батҡаҡлы ат юлы килеп баҫты. Унан оҙон арбаға һаҡҡан мылтыҡлы һаҡсыларҙы ауырлыҡ менән тартып ҡарт алаша килә. Тәртәгә тайлаҡ айыуҙай арҡанға тағылған, аяҡ-ҡулдары сынйырлы, саба яуған ямғырға күлдәге еүешләнгән, оҙон сәстәре маңлайына һибелеп йәбешкән әҙмәүерҙәй ир атлай. Күптән киләләрҙер, быҒау тимеренә өйкәлгән бәкәл быуынынан һарҡҡан ҡан мәтегә буялған ялан аяҡтарҙы алһыу төҫкә мансыған. Буранбай бит был, халыҡ йырында йырланған Буранбай! Арыраҡ юл уртаһындағы бер бөртөк сәскә юғарыға үрелгән. Нишләп кенә үҫтең бында, башҡа урын тапманыңмы, тапалаһың да баһа! Ай! Арба тәгәрмәсенең тимер туғыны нескә һабаҡты йығып, ҡойоға батырып, иҙеп уҙҙы. Сәскә лә һәләк булды, Буранбай тотҡон да билдәһеҙлеккә китеп юғалды...

Ә теге ир аяҡтарын тарбайтыңҡырап, осорға йыйынған сая бөркөттәй ҡулдарын йәйә биреп баҫҡан да илһамланып һуҙа ғына. Аһәңе һуң! Уға Урал ҡаяһындағы суйыр таш ныҡлығы һалынған, йүгерек йылғаның мәңге тынмаҫ сыңы һеңгән, дәһшәтле урман шауы өҫтәлгән, тәбиғәттәге бихисап һайрар ҡоштарҙың һайрауы ҡушылған.

Буранбай ҙа Себер китеү менән,

Баҫылыр микән илдең дә ирҙәре?

Тамам. Илаһи башҡарыу, рух байрамы тамам. Ниндәй мөғжизә башҡарылды, атҡарылды күҙ алдында? Ҡәҙер кисәһендә күҙ асып йомған арала күк ҡабағының асылыпябылыуы булдымы был, әллә йәйҙең иң ҡыҫҡа төнөндә абағa сәскә атып, ҡара урман төпкөлөн көмөш нурҙарға күмеп балҡытып ебәрҙеме, әллә Хоҙай Тәғәләнең ғүмерҙә лә тормошҡа ашмаҫтай тойолған хыялды көтмәгәндә, өмөтләнмәгәндә әшкәртеүе булдымы? Аңғарманым, мәгәр әҙәм балаһын тышҡы буй-һын түгел, эске матурлыҡ йәмләй һәм биҙәй, күҙ алдымда ир һоҡланғыс, ылыҡтырғыс мөһабәт бәһлеүәнгә әйләнде, әүерелде лә ҡуйҙы. Ул ғына ла түгел, ҡот тотош өй эсенә таралып, ундағы һәммәһенең булмышын яҡтыртты, илаһи йәмгә сорнаны, сибәр, мөләйем итте. Йырсы бәүелгәндәй тора бирҙе лә, кинәт хасил булған изге тынлыҡты боҙоп, тертләтергә теләмәгәндәй һаҡ ҡына урынына сүкте. Кемеһе ҡулдарын ҡаушырып, кемеһе тубыҡтарына терһәкләнеп, кемеһе йөҙөн уйсанландырып өҫтәл тирәләй ултырған ҡунаҡтар башҡарыусыны ҙурламанылар ҙа, урынһыҙ шаушыу ҙа ҡуптарманылар, әле генә ишетелгән арбатҡыс йыр тәьҫиренә бирелеп шаңҡып, онотолоп ҡалдылар бары. Хужа инде, эсмәйенсә лә иҫергән, аңҡы-тиңкегә ҡалған хужа, күҙ йәштәрен ҡул һырты менән һыпырып, башын түбән эйҙе:

- Һин йырың менән бөйөкһөң, абзый, йырың менән ҙурһың, күркәмһең! Бына ошо башҡарыу өсөн генә лә йортоңа оло табын йыйырға, йырҙың нәгеҙен аңлаған ҡунаҡтарҙы саҡырырға мөмкин!

Кем булды әле был ир, ҡайҙан килгән, әлеге көндә ниндәй эш бөтөрә? Яйын тап килтереп, уның яғына аушайып шыбырҙаным:

- Ағай, һеҙ ниндәйҙер яңылышлыҡ арҡаһында ғына бында йөрөп ятаһығыҙ, урынығыҙ филармонияла!

- Бәй, унда эшләп ҡараным да! - Булды яуап.

- Ҡаранығыҙ? - Аптырап киттем дә, ғәжәпләнеп текәләп төпсөндөм. - Ә нишләп унан китергә иттегеҙ?

- Һыйҙырманылар.

- Ни сәбәптән?

- Әртислеккә юғары уҡыу йорттарында йырға уҡыған

✓ *Ҡәйнәм ҡаршы алғанда матур итеп биҙәлгән һыйыр малына ике ҡулым менән таяндырҙы. Йортҡа ингәс, бер еңгә менән күрештерҙе лә: "Морондоҡ инәйең булыр", - тине. Мин уға күлдәклек бүләк иттем, ул миңә бер пар өйрәк әйтте.*



кешеләрҙе һайлап алалар, гәҙәттә, ә беҙҙең һымаҡ халыҡ араһынан сыҡҡандар - һайландыҡтан ҡалғаны. Ябай ғына хәҡиҡәттә аңлап етмәй күптәр, ғилләһ шунда, ҡарғаны консерваторияла уҡытыуҙан ни фәтеүә, ул һандуғас булып һайрап китмәй бит инде күпме өйрәтһәң дә, һабан турғайы ла була алмай!

- Бөрйән районына ҙур делегация менән барҙыҡ. Рәсми саралар тамамланғандан һуң икенсе көн бөрйәндәр тайпылышһыҙ үтәлергә тейеш урындағы йолаға ярашлы иң башта Шүлгәнташ мәмерйәһен күрһәттеләр, шунан оло табын йәйелгән аҡланға алып киләләр. Үҙешмәкәрҙәрҙең концертын ҡарағанда ҡураныс, еңел кәүҙәле бер ирҙең гәжәйеп, хайран оҫта бейеүен күреп телдән ҡалдым. Ул уртаға һалынған тар ғына таҡтанан төшмәйенсә, баҫма буйлап йөрөгәндәй итеп ойота, һеңдерә баҫа ғына! Хәрәкәттәре камил, аяҡтары түгел бар булмышы бейей, юғарыға талпына! Бейеү сәнғәтен мин шулайыраҡ аңлайым: сәсән теле менән арбай, йырсы моңо менән әсир итә, рәссам ете төҫ буяу ярҙамында бөйөк картиналар яҙа, ижад итә, ә бейеүсе инде кәүҙә, аяҡ-ҡул хәрәкәттәре аша поэзияны, көйҙә, буяуҙар, төҫтәр донъяһын ҡарап ултырыусы тамашасыға еткерә. Аяҡ-ҡулдарҙың килешле тыпырҙауы бейеү түгел әле - бейеү ул күңел торошо, йән юғарылығы, рух тантанаһы!

Эргәмдәге ир миңә ошоларҙы бәйән итеп, аңлатма бирергә кереште:

- Районыбыҙҙың ҡото Йәнбирҙе ағай ул. Мин үҙем мәҙәниәт бүлегендә эшләйем. Уҙған йыл Мәскәүҙән лекциялар уҡыу, дәрестәр үткәреү маҡсатында бейеү белгесе профессор ҡатын килгәйне беҙгә, ул Йәнбирҙе ағайҙың бейеүен ҡарағас, һорай ҡуйҙы:

- Ҡайҙа уҡыған был бейеүсе? Мәләндә беҙҙә белем алһа, таныр инем, Санкт-Петербург мәктәбе, улайһа.

- Уның Бөрйәндән сығып йөрөгәне юҡ, бер ҡайҙа уҡымаған да, - тибеҙ.

- Бының булыуы мөмкин түгел, был бит һөнәрсе, иҫ китмәле талант әйәһе!

Сығыш тамамланғас, бер ҡунаҡ сыҙамайынса һөрәнләп үк ебәрҙе:

- Китсе, был таҡта һеҙгә нимә генә, ҙур сәхнә лә тар әле!

Бейеүсе тыйнаҡ йылмайҙы:

- Унда бит бейеү сәнғәтен хореография дәрестәрендә өйрәнгәндәр бейей, ә мин ауыл кешеһе!

...Баш ҡалала мәртәбәле ҡунаҡтар өсөн ойошторолған ҙур концертты ҡарарға тура килде. Тураһын әйтәм, оҡшаманы, өмөтөм аҡланманы, йәнем инрәмәне, йыр-моң, нескәлек көсәгән күңелем ас ҡалды, сөнки унда махсус уҡыу йорттарында сольфеджионы өйрәнгән, хореография дәрестәрен алғандар, көндәлек ауыр эш башҡарғандай бейей һәм йырлай ине.

(Аҙағы. Башы 1-се һанда).

*АҒИНӘЙ МӘКТӘБЕ*

**Байлыҡҡа мул көҙ, ап-аҡ ҡарлы ҡыш - доғалап саҡырылған ҡунаҡтар, гөрләп үткән туйҙар мәле булған икән элек. Етмешенсе йылдарҙағы туйҙар - доғаларына ҡыҙылдан бәйләнгән саналы аттарҙың ҡар борҡотоп сабышып урамға килеп инеүҙәре, уларҙы ҡаршылаусыларҙың шат тауыштары, ҡаршы алыусы төп ҡоҙаның өлтөрәп, йүгерә-атлай алдан килеүсе ҡоҙалар атына бүләгән килтереп бәйләүе күҙ алдында әле. Ҡайһылай матур күренештәр йылдар артында ҡалып бара. Шулай ҙа беҙ, ағинәйҙәр, туй йолаларыбыҙҙы ла берәмтекләп иҫкә төшөрөп, тупларға тырышабыҙ. Йолаларҙы барлау - "Ағинәй мәктәбе"нең бер бурысы.**

# ҮҘЕБЕҘСӘ ҮТҺЕН ТУЙҘАРЫБЫҘ!

Былтыр ҡыш ватсаптағы ағинәйҙәр чатында башҡорт туй йолаларының "кейәү муксаһы", "килен ашъяулығы", "кейәү мунсаһы", "еңгәләр сәйе" тигәндәрен иҫкә төшөрөп алған инек. Ә ноябрҙә шул уҡ чат майҙанында "Туй йолалары" конкурсы ойошторҙоҡ. Унда ҡатнашыусы ағинәйҙәр белгәндәрен яҙҙырып ебәрҙе, сәхнәләштерелгән яҙмаларын һалды. Килеңгә һыу башлатыу, килен төшөрөү, килен сәйе, никах күренештәре менән әллә күпме видеояҙмалар алдыҡ. Мәҫәлән, Таңсулпан Вассаф ҡыҙы 10 кешенән торған Мәскәү ауылы ағинәйҙәре төркөмөнөң ауыл мәсете имамы менән берлектә биш йыл элек 17 никах йолаһы үткәреүе тураһында хәбәр итте. Балбыҡ һәм Иҫке Байрамғол (Әүеш) ауылы ағинәйҙәренең беҙҙең тәбәктәгегә һәм ағинәйҙәрҙең үҙҙәре килен булып төшкән осорҙағыға яраҡлаштырып үткәргән "Килен битен асыу" йолаһы видеояҙмаһы ла бик фәһемле булды.

***Иҫке Байрамғол ауылының төп ағинәйе 72 йәшлек Рима Байрамғолова үҙен кейәүгә нисек оҙатыуҙары тураһында шуларҙы иҫкә алды:*** "Әсәйем билемә билбау бәйләне. Был әсәй кешенең ҡыҙын үҙенән айырыу билдәһе. Ә мин ишектән тура ғына сығып китмәй, ишек яңағына тотондом. Был ҡыҙ баланың атай йортонан китергә теләмәүен аңлата ине. Атайым шул саҡта миңә бер мал әйтте. Артабан ҡапҡа бағанаһына ла тотонғайным, атайым тағы бер һарыҡ әйтте. Арбаға ағайым, мал әйтеп, күтәреп ултыртты. Күтәреп ултыртыу өс тапҡыр ҡабатланды. Ҡайны йортона еткәс, киленгә таяныс малы кәрәк, тинеләр һәм бер ҡайнаға тейеш кеше бызау әйтте. Арбанан төшкәс, еңгәләр, ҡыҙҙар баш аша шаршау ҡаплап ҡына ҡәйнә йортона индерҙеләр. Йортҡа инеп, кейәүҙең бәләкәс туғандары ярыша-ярыша үҙҙәренең һөнәрҙәрен күрһәткәс, араларынан иң оҫтаһы билемдәге тауарҙы сисеп алды. Был уға бүләк булды. Үҙем дә бала саҡта Ялсығол ауылына килен булып төшкән бер еңгәнең билендәгеһен йыр йырлап алғайным..."

***Хима апай Лоҡманова ла белгәндәре менән уртаҡлашты:*** "Билбауҙы сискәс, егет яғы апайҙары киленгә күрмәлек тәңкә бирәләр. Был тәңкәләрҙе килен ике яурынбашына тегеп ҡуйырға тейеш була. Мине йорттан оҙатҡанда уҡ бөркәнсек ябындырып оҙаттылар. Тәүҙә ошо бөркәнсек менән күрше-ҡуләнгә йөрөттөләр, күрше апайҙар, еңгәләр ошо бөркәнсеккә тәңкәләр, төрлө суҡтар текте. Ҡәйнә йортона килгәс, ҡәйнәм "Бит астырыу" йолаһын үтәне. Ошо йола үтәлгәнсе бөркәнсек менән генә йөрөттөләр. Беҙҙең яҡта, шулай итеп, килен битен асыу, килен һөйөү йолаһы үтәлгән, килендә яратып теләктәр әйтелеп, бүләктәр бирелгән..."

***Ҡоҙаш ауылынан Илзидә Шәймәрҙәнова үҙенең 70-се йылдарҙа үткән туйы тураһындағы яҙмала ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр менән бүлеште:*** "Ауылдың икенсе осона ғына килен булып төшһәм дә, туйға егеүле аттарҙа килделәр. Йола буйынса, иң матур биҙәлгән һәм алдан килгән аттың дуғаһына бүләк бәйләнде. Башҡа ҡунаҡтар егелгән аттарҙа сабышып килделәр. Йортҡа инеп урынлашҡас, атайым ҡоҙалар менән таныштырып, үҙенең яғынан килгән һәр кемгә бер дуға уҙаҡ беркетте. Был уҙаҡлашыу була. Һәр кем туй барышында үҙенең уҙағын ҡарай, үҙ йортона ҡунырға алып ҡайта, һыйлай, бүләккә ҡулдәктәр кейҙерә. Икенсе көн егет яғынан килгән туй һарығы һуйыла. Ул һарыҡты ла кейәү яғы, мөгөҙҙәренә ҡыҙыл таҫмалар бәйләп, байрамға биҙәп килтерә. Иртә менән ҡыҙ яғынан ҡоҙалар (улар алдан билдәләнеп ҡуйыла) ошо туй һарығын һуялар. Туй һарығы һуйыу - үҙе бер мәрәкә тамаша була, тик еренә еткереп үтәргә кәрәк. Ике аҙна үткәс, ҡыҙ яғы кейәү яғына туйға барҙыҡ. Туй һарығынан бер өлөш, ҡаҙан төбө лә алып барҙылар. Ике яҡта ла ошо рәүешле ҡунаҡлашыу үткәрелгәндән һуң, бер ай үткәс, мине ҡәйнә йортона оҙаттылар. Ҡәйнәм ҡаршы алғанда матур итеп биҙәлгән һыйыр малына ике ҡулым менән таяндырҙы. Йортҡа ингәс, бер еңгә менән күрештерҙе лә: "Морондоҡ инәйең булыр", - тине. Мин уға күлдәклек бүләк иттем, ул миңә бер пар өйрәк әйтте. Ошо морондоҡ инәйем миңә тормош юлымда ҙур ярҙамсым булып торҙо. Һыу башлатыу хәҙергесә күмәк халыҡ ҡатнашлығында булманы. Ҡәйнәм кистән иртәгә иртә менән, кеше аяғы һил саҡта ғына һыуға барасағыбыҙҙы әйтеп, оҙатып барасаҡ бикәсемде күрһәтте. Иртән ҡәйнәм бисмиллалап: "Шәп бул, ҡотло бул, өйөң эсе туҡ булһын, - тип, теш араһына көмөш тәңкә ҡыҫтырҙы. - Тәңкәне ҡойоноң кеше күрмәгәнерәк урынына төшөрөрһөң, таң һыуы менән битеңде сайып алырһың. Һыуҙан ҡайтҡанда артыңа боролоп ҡарама, һыуҙы сайпылтма. Йортҡа ингәс, биҙрәләреңде һыуы сәсрәп киткәнсе ултыртһаң да була. Сәсрәгән һыу ырыҫҡа ғына буласаҡ", - тигән кәңәштәрен биреп оҙатты. Мин алып ҡайтҡан таң һыуынан сәй ҡайнаттылар. Оҙатып килгән әсәйем дә ҡайтмаған ине әле..."

**Шулай итеп, конкурс барышында бына ошондай бик файҙалы мәғлүмәттәр бирелде.** Уйлап ҡараһаң, туй йолаларының һәр гәмәлендә матур итеп туғанлашыу, йәштәрҙең берегеп йәшәп китеүенә булышлыҡ итеү, уларға ипле генә итеп ҙур яуаплылыҡ күндереү, күрше-күлән менән дә ипле генә итеп таныштырыу кеүек бик мәғәнәле төшөнсәләр һалынған бит. Әле иҫкә төшөргәндәрҙе бөгөн дә туй һәм никах мәжлестәренә индереп ебәрергә булыр ине. Юҡһа, туйҙарҙы алып барыусылар нисек тә кеше көлдөрөрләк итеп, нимә генә уйлап сығармай бит хәҙер. Тамада ауыҙына ғына ҡарап ултырырға тура килгәс, туйҙарҙан ҡоҙалар бер-беренһен белмәй ҙә таралыша. "Ҡыҙ йәшереү" тигән матур ғына бер йола, никахлар, выкуп булып китте һуңғы ваҡытта. Шуның менән бергә "йыртыш", "кейәү көсөгө", "ҡушҡан еңгә", " еңгәләр сәйе" кеүек һүҙҙәребеҙ ҙә онотолоп бара. Мәҫәлән, беҙҙең яҡта кейәү егете ҡыҙ йәшерелгән йортто тапҡас, ҡыҙҙар, еңгәләр менән һатыулашып бөткәс, ишек төбөндә ике еңгә тотоп торған тауарҙы йыртыр баҫып, ҡыҙ янына инә. Шул йыртыш тип атала инде. Ҡыҙҙың әсәһе алдан әҙерләп бирргән был тауарҙы ошо ике еңгә үҙҙәренә бүләк итеп ала. "Кейәү көсөгө" кейәүҙең яҡын дуҫы булып, кейәү менән бергә килә, йәшерелгән ҡыҙҙы эҙләшә. Уны шулай "көсөк" тип таныштыралар. Кейәү көсөгө өсөн йылғыр ҙа, уяу ҙа, һүҙгә үткер ҙә егет һайлана. Кейәү баҙап ҡалған осраҡтарҙа ул төп ярҙамсы, әллә күпме "кәртәләрҙе" үтеп, ҡыҙ янына имен-аман индереп ебәреү ҙә уға йөкмәтелгән була. Шаян еңгәләр алдан таҫма тағып әҙерләнгән һөйәкте кейәү көсөгөнөң муйынына тағып ҡуялар. Ҡайтҡансы һөйәге менән йөрөй ул, йолаһы шулай булғас, үпкәләшфәлән юҡ.

Әлеге конкурс барышында мәсеттә үткән никахҡа ҡайһы бер ҡыҙҙарыбыҙҙың стилләштерелгән милли кейемдә килеү осраҡтарын күреп тә ҡыуандыҡ. Тамсы тама, боҙҙо тишә, ти бит халыҡ. Милли кейемде тергеҙеү өсөн юҡҡа ғына тырышлыҡ һалмағанбыҙ икән. Киләсәктә туйҙар ҙа үҙебеҙсә генә, үҙебеҙҙекенә генә нигеҙләнеп үтһен ине, тип тә теләйбеҙ. Һәр районда урындағы халыҡтың үҙенсәлекле генә туй йолалары бар, бик бай бит халҡыбыҙ йолаларға. Бәлки, мин яҙғандарҙы дауам итеп, фекер алышыу ҙа булыр әле яраҡлы гәзитебеҙ битендә.

**(Дауамы 16-сы биттә).**



*✓ Әммә монафиҡты хаҡ мосолмандан айырып алыу мөмкин дә түгел тип әйтерлек. Ундайҙарҙың башҡа кешеләр күрһен өсөн йәмәғәт намаҙҙарын да үтәп йөрөүҙәре, саҙаҡалар биреүе, хатта хаж ҡылыуҙары ла ихтимал.*



ИНТЕРНЕТТАН



# МУНСА ШӘП!

■ Японияның Тояма университеты ғалимдары мунса менән сауналың йөрәк-ҡан тамырҙары системаһына ғына түгел, кешенең кәйефенә лә яҡшы йоғонто яһауын асыҡлаған. Британияның New Scientist журналында баҫылған тикшеренеү һөҙөмтәләренән күренеүенсә, аҙнаһына 5 тапҡыр 15 минутлап мунсаға йәки саунаға барыу йөрәк һәм ҡан тамырҙарын нығыта. Бындай терапия йөрәктең ҡан ҡыуыу һәләтен яҡшырта, кеше физик көсөргәнешкә сыҙай башлай. Өҫтәмә тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, тән температураһы күтәрелеү һөҙөмтәһендә баш мейеһенең нейрондары эшмәкәрлеге әүҙемләшә, ул "бәхет гормоны" серотонин бүленеүе өсөн яуаплы. Тимәк, мунса яратыусыларҙың кәйефе яҡшы була, үҙҙәрен яҡшыраҡ тоя, уларҙың үҙ-үҙенә ҡуйған баһаһы юғарыраҡ була. Мунса тын алыу юлдары ауырыуҙары ваҡытында ла файҙалы, иммунитетты ла нығыта, тирене таҙарта, ябығырға булышлыҡ итә.

■ Компьютер һәм төрлө күнегеүҙәр оло йәштәге кешеләрҙә йыш осраған хәтер насарайыу хәүефен 75 процентҡа кәметә. Аризоналағы Майо клиникаһы медиктары үткәргән тикшеренеүҙәрҙә 70-93 йәштәге ҡатын-ҡыҙ һәм ир-ат ҡатнаша. Анкетаға уларҙың һуңғы йылдарҙағы йәшәү рәүешен сағылдырыусы һорауҙар ҙа инә. Тиҙ атлап йөрөү, йәйәүле туризм, аэробика, көс талап итеүсе торған күнегеүҙәр, гольф уйнау, йөҙөү, теннис, йога, һуғыш сәнғәте һәм ауыр атлетика кеүек спорт төрҙәре менән шөғөлләнеүселәрҙең хәтере күпкә яҡшыраҡ булыуы асыҡлана. Шулай уҡ ҡарттарҙың заман технологиялары ҡаҙаныштары, анығыраҡ әйткәндә, компьютер менән ҡулланыуы ла хәтер функцияһының түбәнәйеүенә юл ҡуймай икән. Һорау алыуҙа 1000 оло кеше ҡатнашҡан. Компьютер менән ҡулланмаусы ҡарттарҙың 20,1 процентының хәтере нормаль тип табылған, 37,6 процентында еңел формалағы хәтер насарайыуы күҙәтелгән. Ә компьютер ҡулланыусы һәм даими рәүештә күнегеүҙәр яһаусыларҙа был айырма 36 процентҡа 18,3 процент тәшкил иткән.

■ Донъяла бик абруйлы һаналған Forbes журналы эксперттары иң файҙалы аҙыҡ-түлек исемлеген төҙөгән. Организм өсөн иң кәрәкле аҙыҡ итеп ҡурай еләге, көртмәле һәм ер еләге табылған. Еләктәрҙә май юҡ, улар витаминдарға, антиоксиданттарға бай. Был продукттар иммунитетты нығыта һәм яман шештәрҙе булдырмай. Икенсе урында сәтләүектәр һәм ҡуҙаҡлылар, ә артабан баш мейеһенә, йөрәк эшмәкәрлегенә яҡшы тәьҫир иткән балыҡ тора. Брокколи һәм пекин кәбеҫтәһе организмдан токсиндарҙы сығара, һарымһаҡ менән һуған иммунитетты күтәрә.

■ АҠШ белгестәре аллергияның яңы төрөн теркәгән. Wi-Fi үткәргесһеҙ селтәргә булған аллергия билдәләре башҡа аллергия төрҙәренән бер нәмәһе менән дә айырылмай. Уны икенсе төрлө электромагнит тулҡындарына артыҡ һиҙгерлек (Electromagnetic hypersensitivity) тип йөрөтәләр. Баш ауыртыуы, быуындар һыҙлауы, күҙҙәрҙең ҡороуы йәки йәшләнеүе, тамаҡ ҡымырйыуы - ошо билдәләр менән табиптарға мөрәжәғәт итеүселәр арта бара. Улар менән һөйләшкәндән һуң, ауырыуҙарҙың Wi-Fi зонаһында күп ваҡыт уҙғарыуы асыҡланған. Бында барыһы ла был үткәргесһеҙ селтәрҙең микротулҡынлы мейес менән бер тулҡында эшләүе сәбәпсе. Заман технологияларының зыянлы тәьҫиренән һаҡланыу өсөн табиптар йышыраҡ тәбиғәткә сығырға кәңәш итә.

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# МОНАФИҠТЫ НИСЕК АЙЫРЫРҒА,

## йәки Әҙәм балаһына иң әүәл нимә кәрәк?



**Сираттағы мәҡәләләренең береһендә Әхмәр Ғүмәр-Үтәбай гәзит уҡыусыларға: "Хаҡ мосолман менән монафиҡты нисек айырырға? Һеҙ нисек уйлайһығыҙ?" - тигән һорау ҡуйған ине. Әҙип ифрат та етди теманы күтәргән. Был төшөнсәнең башлыса динебеҙгә ҡағылыуы өсөн дә һорау тап ана шулай ҡуйылған.**

Монафиҡ - тамыры "нифәҡ" (лицемерие) булған ғәрәп һүҙе ул. Башҡортса әйткәндә, ике йөҙлө кеше. Ислам дине ҡанундары буйынса йәшәгән дәүләттәрҙә күпселекте тәшкил иткән мосолмандарҙың ризаһыҙлығынан ҡурҡып, улар араһында үҙен иманлы итеп күрһәтергә тырышҡан, әммә йөрәге менән хаҡ дингә ҡарата бөтөнләйгә ғәмһеҙ (хатта ҡаршы) булған кешеләрҙе шулай тип атайҙар. Мосолмандарға ҡушылған фарыз ғәмәлдәрҙе үтәүҙе инҡар иткәндәре өсөн иманһыҙға һанап, ҡыйырһытмаһындар тип, улар ана шундай тормош алып барырға мәжбүр. Әммә монафиҡты хаҡ мосолмандан айырып алыу мөмкин дә түгел тип әйтерлек. Ундайҙарҙың ике йөҙлөлөгөн тик Аллаһ Тәғәлә генә белә. Ундайҙарҙың башҡа кешеләр күрһен өсөн йәмәғәт намаҙҙарын да дөрөҫ кенә итеп үтәп йөрөүҙәре, башҡалар күрерлек итеп саҙаҡалар биреүе, хатта хаж ҡылыуҙары ла ихтимал. Ә инде үҙҙәре генә ҡалғанда улар бөтөнләйгә икенсегә әйләнә. Аллаһ Тәғәлә изге Ҡөрьән-Кәримдә әйтә: "...Һәм улар иман килтергән кешеләргә осраған саҡта: "Беҙ иман килтерҙек", - тиҙәр. Ә үҙҙәре шайтандары менән генә ҡалһалар: "Беҙ бит һеҙҙең менән, беҙ уларҙан мыҫҡыллап көләбеҙ генә бит", - тиҙәр. Аллаһ уларҙың үҙҙәренән көлөр һәм уларҙың һуҡыр хәлдә ҡаңғырып йөрөгән аҙашыуҙарын арттырыр!" (Әл-Бәҡара сүрәһе, 14,15 аяттар). Аллаһ китабында монафиҡтар хаҡында башҡа аяттар ҙа күп. Ә инде шәриғәттән башҡа ҡанундар хөкөм һөргән илдәрҙә Аллаһ Тәғәләгә ышанмаған, йә Уға буйһонорға теләмәгәндәргә монафиҡ булыу ҙа кәрәкмәй, йәғни уға мохтажлыҡ та юҡ. Сөнки дингә асыҡтан-асыҡ битараф булып ғүмер итһәләр ҙә, уларға бүтән кешеләр тарафынан хәүеф янамай. Хатта "Мин - атеист, Аллаһҡа бөтөнләйгә ышанмайым", тип ҡысҡырып йөрөгән хәлдә лә...

Ә үҙебеҙҙең илебеҙҙе алып ҡараһаҡ, мин, мәҫәлән, дин тотҡан мосолмандар араһында бер монафиҡ та юҡтыр, тип уйлайым. Уларҙы йома көндәре мәсеткә йөрөргә, ғөмүмән, дин талаптары буйынса йәшәргә бер кем дә мәжбүрләмәй бит. Халыҡ араһында йөрөмәгән хәлдә лә, өйҙәрендә йә ҡырҙа булһынмы, улар динебеҙ ҡанундарын үҙаллы ихлас үтәп, хатта бер генә намаҙын да уҡымай ҡалдырыуҙан ҡурҡа. Шулай уҡ мосолман өсөн фарыз (мотлаҡ) тип ҡушылған ураҙаны ла һис бер сәбәпһеҙ ҡалдырмай улар.

Әммә дин ғәмәлдәрен бөтөнләйгә инҡар иткән, Аллаһҡа ғибәҙәт ҡылыу тик руханиҙар эше тип һанаған кешеләр ҙә арабыҙҙа етерлек. Күпселек: "Намаҙ уҡып, ураҙа тотоп йөрөргә мин мулла түгел дә баһа", йә иһә "Минең гонаһтарым юҡ, ана гонаһлылар уҡыһын", йә булмаһа, "Намаҙ уҡыу миңә бөтөнләйгә кәрәк түгел", тип ифрат тыныс итеп, тураһын әйтә. Күңелендәгеһен йәшермәгән бындай кешене лә ике йөҙлө тип атап булмай. Киң күңелле, ихлас, йомарт, эшһөйәр, көнкүрештә ярҙамсыл булған, әммә дини юҫыҡта бөтөнләй белемһеҙ бындай милләттәштәрҙе тик йәлләргә генә ҡала.

КАЛЕНДАРЬ БИТТӘРЕНӘН

# АҒАС - ЕМЕШЕ, КЕШЕ - ЭШЕ МЕНӘН



**Халҡыбыҙҙың фән һәм техника, нефть һәм газ табыу, уны эшкәртеү, шулай уҡ геология-минералогия өлкәһендә эшләп, фиҙаҡәр хеҙмәт өлгөләре күрһәткән билдәле инженер-техниктар, геологтар, математик, физик, химиктарыбыҙ, медицина белгестәре, педагог кеүек юғары ҡаҙаныштарға өлгәшкән талантлы шәхестәре байтаҡ.**

Уларҙың күбеһе үткән быуаттың 60-90-сы йылдарында фиҙаҡәр хеҙмәт өлгөһө күрһәтеп, маҡтаулы исемдәргә, дәүләт наградаларына лайыҡ булған. Бындай арҙаҡлы милләттәштәребеҙҙең исемдәре һәм хеҙмәттәре беҙгә, бөгөнгө замандаштарға, яҡшы мәғлүм. Шул уҡ ваҡытта киң ҡатлам халыҡҡа билдәле булып етмәгән шәхестәребеҙ ҙә күп. Дөрөҫ, ваҡытында хеҙмәттәре маҡтаулы исемдәргә лә, наградаларға ла лайыҡ булған, ләкин ваҡыт үтеү менән яңы заман еле һәм үҙгәрештәр болғанышында хеҙмәт романтизмы менән энтузиазм һүрелә барып, уның ысын геройҙары хаҡһыҙ рәүештә онотолоуға дусар ителде. Уларҙың исемдәрен һәм хеҙмәт ҡаҙаныштарын бөртөкләп йыйып, халҡыбыҙ хәтеренә, яңы быуындар иғтибарына ҡайтарыуҙа Башҡортостан Республикаһының Архив эштәре буйынса идаралыҡ коллективы маҡтаулы үә сауаплы эш башҡара: йыл һайын һәр айҙың күренекле һәм иҫтәлекле даталар календарында тарихи ваҡиғалар, Советтар Союзы, Рәсәй Геройҙары исемлеге менән бер рәттән, заманында хеҙмәт ҡаһарманлығы күрһәткән һәм дәүләт наградалары, маҡтаулы исемдәргә лайыҡ булған Социалистик Хеҙмәт Геройҙары һәм башҡа ябай хеҙмәт ветерандары хаҡында ла мәғлүмәттәр туплап сығара. 2022 йылдың ғинуар айында тыуған ана шундай шәхестәрҙең береүһе һәм берәгәйлеһе хаҡында айырым телгә алып китеүҙе кәрәк таптыҡ.

Әйткәндәй, иғтибар итһәгеҙ, башҡорттар араһында нефтселәр, геология-минералогия белгестәре бик күп. Был республикабыҙҙың нефть ятҡылыҡтары һәм башҡа ҡаҙылма байлыҡтарға бай булыуы менән дә аңлатыла, әлбиттә. Башҡорттар борондан мәғдәнселек менән шөғөлләнгән, баҡыр, ҡорос, суйын, көмөш иреткән. Был йәһәттән милли кадрҙар әҙерләү маҡсатында ғәйнә башҡорто, атаҡлы рәсәй мәғдән сәнәғәтсеһе Исмәғил Тасимовтың Санкт-Петербургтағы бөгөнгө Тау институтына нигеҙ һалыуы хаҡында ла яҡшы беләбеҙ. Ана шул Тасимов мәктәбе вариҫтары - заманыбыҙҙың күренекле ғалим-геологтары араһында геология-минералогия фәндәре докторы, профессор, БР Фәндәр Академияһының ағза-мөхбире, БАССР-ҙың атҡаҙанған фән эшмәкәре Әхтәм Рәхмәтулла улы **Кинйәкәевтың** исеме һәм бай тормош юлы республикала йәшәүсе киң ҡатлам өсөн әллә ни таныш та түгелдер. Был, ғәҙәттә, бар донъяһын онотоп, ятҡан эшендә баш баҫып хеҙмәт иткән баҫалҡы кешеләр менән була торған хәл. Икенсенән, дан, исем, награда тигән маҡсаттар ят булғандыр ундайҙарға, сөнки уларҙың тормош ынтылыштарында яңынан-яңы асыштарға өлгәшеү, үҙ хеҙмәтенән шатлыҡ һәм ләззәт табыу теләге - әлеге энтузиазм өҫтөнлөк иткәндер. Өсөнсөнән, академик Кинйәкәев миҫалына килгәндә, һәр төрлө награда һәм яңғырауыҡлы исемдәргә ҡарағанда ла ҡәҙерлерәк нәмә - ғүмер бүләк иткән уға яҙмыш: йәш кенә көйө Бөйөк Ватан һуғышы ғәрәсәтен үтеп, тыуған иленә иҫән-һау әйләнеп ҡайтыу бәхетенә лайыҡ булған. Данлы нәҫеле дәрәжәһен тотоп, ваҡлыҡтарҙан өҫтөн булып, ғорур һәм намыҫлы ғүмер юлы үткән ул. Сығышы менән Бүздәк районынан - аҫаба биләр башҡорттары-

✔ *"Мин төнөн янған усаҡҡа осҡан күбәләктәрҙе уттан ҡыуған һымаҡ, һеҙҙе тамуҡ утына ебәрмәҫкә, унан ҡурсалап, тотоп алып ҡалырға тырышам. Ә һеҙ минән ысҡынып, һаман утҡа ынтылаһығыҙ..."*



Ә бәғзе берәүҙәр "Һин үҙеңде мосолман тип һанайһың, ә ни өсөн дин тотмайһың, намаҙ уҡымайһың?" тигән һорауға "Уҡыр инем дә, әммә эшем күп, ваҡытым юҡ", йә "Картайғас уҡырмын, әлегә әҙер түгелмен", йә былмаһа, "Өйрәнергә хәтерем насар, хәҙер ҡартайҙым, миңә һуң инде", тигән һымаҡ бихисап һылтау табырға тырыша. Дингә ҡағылышлы һорауҙар менән дә ҡыҙыҡһынмай улар. Тик донъяуи эштәр менән генә мәшғүл булып, дини ғилемгә бына ошондай һалҡын ҡарашлы яҡташтарыма Исламдың асылын бер аҙ аңлатҡанда, бәлки, уларға файҙаһы ла тейер тигән өмөтөмдө бер ҡасан да өҙмәйем, шулай ҙа. Фәҡәт аят мәжлестәренә генә йөрөргә яратҡан милләттәштәремә Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең Аллаһ илсеһе булғанлығын, уның һәр һүҙе тик Раббыбыҙ бойороғо буйынса әйтелгәнен һәм уны үтәү мосолманмын тигән һәммә кешенең бурысы булыуы хаҡында һәр саҡ нәсихәттәр әйтке килә. Төрлө һылтау табып, динебеҙҙе ошо көнгәсә өйрәнмәй ғүмер иткән яҡташтарымдың үҙҙәренә үҙҙәре золом (ғәҙелһеҙлек) ҡылып йәшәүҙәрен белмәүе йәл. Аллаһ Тәғәлә төшөргән диндә халҡына өйрәтеүгә бөтә ғүмерен бағышлаған Бәйғәмбәребеҙ ғәфләттә (вайымһыҙлыҡта) йәшәгән яҡындарына былай тип әйткән сахих хәҙис бар: "Мин төнөн янған усаҡҡа осҡан күбәләктәрҙе уттан ҡыуған һымаҡ, һеҙҙе тамуҡ утына ебәрмәҫкә, унан ҡурсалап, тотоп алып ҡалырға тырышам. Ә һеҙ минән ысҡынып, һаман утҡа ынтылаһығыҙ..."

Бөгөнгө көндә ғибәҙәт ҡылып йәшәргә ныҡ хыялланып та, әммә намаҙ, доғалар уҡырға мөмкинлеге булмаған бер кеше лә юҡ. Хаҡ дингә тотҡан өсөн ҡыҫырыҡлау, ниндәйҙер яза биреү тигән нәмә юҡ бит хәҙер. Ә совет заманын иҫләһәк, дин тотоусы кешеләрҙе асыҡтан-асыҡ мыҫҡыллаған, уларҙы кәмһеткән, "шыр наҙан" тип һанаған осорҙоң шаһитыбыҙ бит инде күптәребеҙ. Диндарҙарҙы төрмәләргә ябып интектергән, хатта уларҙы үлем язаһына хөкөм иткән дәүер ҙә булған. Дингә ҡаршы әүҙем пропаганда һәм башҡа төр ысулдар менән ҡаҡҡылапһуҡҡылап, күпселекте хаҡ диндән тайпылдырырға өлгәшкән беҙҙең партия етәкселәре. Бөтөнләйгә динен белмәгән (хатта бик күптәре атеист булып киткән) әллә нисә быуын үҫеп сыҡты бит инде совет дәүерендә. Иманлы, динле булыу күпселектең аңында тик "үлгәндәргә йылына бер тапҡыр муллалап аят уҡытыуҙан һәм унда тинлектәр өләшеп ултырыуҙан ғына ғибәрәт" булып ҡалды. Ҡыҙғаныс, әлбиттә.

Бөгөнгө көнөбөҙ өсөн Аллаһ Тәғәләгә һәр саҡ шөкөр итәм. Раббыбыҙға иман килтереп йәшәргә теләүселәрҙе хөкүмәтебеҙ йәберһетмәй. Бик күптәрҙең битрафҡ булыуына ҡарамаҫтан, халҡыбыҙҙың ниндәйҙер өлөшө әкренләп хаҡ юлға баҫа башлауы һөйөндөрә. Йома көндө бөтөнләй таныш булмаған кешеләр ҙә мәсеттә осрашып, бер-береһенә яҡты йөҙ менән йылмайып, ҡул биреше сәләмләшә. Ә берәй яҡының менән йәнәш тороп намаҙ уҡыуҙары айырыуса оло шатлыҡ. Аҙна һайын Сибай ғибәҙәт йортонда ҡәләмдәшем Радик Өмөтҡужин ҡәрҙәш менән "Әссәләмү ғәләйкүм!" тип ҡосаҡлашып күрешеүемде көтөп алам. Йәш егеттәребеҙ, ҡыҙҙарыбыҙ күпләп Исламға килә. Өлкәндәргә ҡарата ихтирам, йылы мөнәсәбәт бөркөлөп тора был йәштәрҙән. Мәсет ишеген асып, үҙҙәренән алда үткәреп тә ебәрәләр. Ҡартырактар бер аҙ һуңа ҡалып ингәс, ипле, йәштәр килеп ҡултыҡлап ала һалалар. Намаҙҙан һуң ҡайтырға сыҡҡан олораҡтарға хатта: "Олатай, ултырығыҙ, өйөгөҙгә алып барып ташлайым", - тип, үҙҙәренең машиналарына саҡырыусылар ҙа күп. Яҡташтарыбыҙҙан тыш, Аллаһ йортона ғибәҙәт ҡылырға башҡа халыҡ вәкилдәре, хатта урыҫ милләтенән булғандар ҙа йөрөй. Бына шулай, иманлы йәштәребеҙҙе ҡарап һөйөнөп бөтә алмаһам, намаҙға баҫҡан олатайҙарҙың бик аҙ булыуына нығ эсем боша. Мәҙин аҙан ҡысҡырғас, күп йәштәр йәмәғәт намаҙына ашыҡҡанда, бәғзе ҡарттар йомшаҡйомшаҡ баҫып, мәсет яғына боролоп та ҡарамай үҙып китә. Йәл, бик йәл...

Мосолман кеше Ислам диненең биш терәген дә белергә бурыслы: Аллаһтан башҡа илаһ юҡ, ә Мөхәммәт с.ғ.с - уның илсеһе, тип шәһитлек биреү, намаҙ уҡыу, Рамаҙан айында ураҙа тотоу, байлығын етһә, йылына бер тапҡыр зәкәт биреү, хәлендән килһә, ғүмерендә бер мәртәбә хаж ҡылыу. Динебеҙҙең ошо ҡанундарын, үкенескә, күптәр танырға теләмәй. Бәйғәмбәр әйткән ошо һүҙҙәрҙе һөйләй башлаған мосолманды "фанат" тип атап, йә тағы ниндәйҙер берәй ярлыҡ тағып, уға ҡырын ҡарай ҙа башлай бәғзеләр. Сөнки хаҡ дингә килгәндәр һуңғы осор "Күп эсмәгеҙ, тәмәке тартмағыҙ, әҙәпле булығыҙ" тиеүҙән башҡа, динебеҙҙең ана шул иң төп талаптарын да Ҡөрьән-Кәримдән, Бәйғәмбәр с.ғ.с. хәҙистәренән әүҙем өйрәнеп, уларҙы башҡаларға өйрәтергә тырыша (был да хаҡ мосолмандың бурысы). Әммә әҙәм балаһына ниҙер ҡушылһа йә инһә тыйылһа ла, берҙәй оҡшамай шул. Октябрь түңкәрелешенән һуң атеизм тормошона күнегеп өлгөргән күптәр иманға өндәүселәрҙе яратмай. Ана шулайтыуҙары менән үҙҙәренә үҙҙәре оло ғәҙелһеҙлек ҡыла улар... Изге Ҡөрьән-Кәримдә Йәһәннәм утына ташланған кешеләрҙән ут һаҡсыларының: "Һеҙгә өгөтләүсе-иҫкәртеүселәр килмәнеме ни?" - тип һораҫаҡтары, ә уларға: "Эйе, беҙгә өгөтләүсе-иҫкәртеүсе килде, әммә беҙ уға ышанманыҡ", тип яуап бирәсәктәре һәм нык үкенәсәктәре хаҡында аяттар бар (Әл-Мүлк (Хакимиәт) сүрәһе, 8-10 аяттар).

Һүҙ азағында. Дин өлкәһенән тыш, донъяуи эштәрҙә лә, йәғни, көнкүрешебеҙҙә ике йөҙлө булған әҙәмдәр эргә-тирәбеҙҙә юҡ түгелдер. Алдауҙы, берәй нәмә вәғәҙә итеп тә үтәмәүҙе, үҙенә тапшырылған аманатҡа хыянат ҡылыуҙы ла монафиҡлыҡ билдәләре тип һанаған бит Бәйғәмбәр ғәләйһиссәләм.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

нан, боронғо атаҡлы фамилияны йөрөтөүсе Кинйәкәевтар нәҫелен дауам итеүсе була Әхтәм Рәхмәтулла улы. Кинйәкәевтар нәҫелендә мәғдәнселәр байтаҡ. Шуларҙың береһе - Нуруш Кинйәкәев 1740 йылда Ағиҙел үре бассейнындағы Алатауҙа көмөш мәғдәне таба һәм уны иретеү менән шөғөлләнә. 2022 йылдың 1 ғинуарында тыуыуына 100 йыл тулыусы билдәләнеүсе ғалим Әхтәм Кинйәкәевтың йәшләй генә геология-минералогия менән ҡыҙыҡһыныуы шуға күрә нәҫелдән килгән ген ауазы булараҡ, бик тәбиғи ҡабул ителгәндер. 1922 йылда Бүҙәк ауылында тыуып үҫкән егет 1940 йылда 18 йәшендә Ҡыҙыл армия сафына саҡырыла һәм Бөйөк Ватан һуғышы ҡубып киткәс, армия сафынан тура фронтҡа оҙатыла. Көньяҡ-Көнбайыш фронтта 2-се танк дивизияһының 2-се мотоуҡсылар полкы составында һуғыша. Украина, Белоруссия, Польшаны азат итеүҙә ҡатнаша, бөйөк Еңеүҙе 1945 йылдың 5 майында Германияның Бреслау ҡалаһында ҡаршылай. Һуғыштан һуң 1946 йылда И.М.Губкин исемендәге Мәскәү нефть химияһы һәм газ сәнәғәте институтының геология факультетын тамамлай, Өфө нефть институтында уҡыта, кандидатлыҡ диссертацияһы яҡлай. Артабанғы яҙмыш елдәре уны Башҡортостандан ситтә йөрөтһә лә, ошо ваҡыттар эсендә ул геология-минералогия буйынса фәндәр докторы ғилми дәрәжәһенә эйә була һәм тыуған республикабыҙға әйләнеп ҡайта. Башҡорт дәүләт университеты профессоры вазифаһында оҙаҡ йылдар - 2014 йылға тиклем геология кафедраһын етәкләй, Башҡортостан атом электр станцияһы, Иштуған һыу һаҡлағыстар төҙөлөшөнә геоэкологик экспертиза үткәреүгә етәкселек итә, уның тарафынан "Асылыкүл" тәбиғәт паркын ойоштороуға нигеҙләмә эшләнә.

Ғөмүмән, БР Архив эштәре буйынса идаралыҡ төҙөгән әлеге йыллыҡ тарихи календарь биттәрендә хеҙмәт ҡаһарманлыҡтары тарихта ҡалған ветерандарҙың да, шулай уҡ әлеге көндә улар өлгөһөн дауам итеп, һөнәрҙәренән йәмтәм табып эшләүсе, маҡтаулы исемдәргә лайыҡ булған бик күп замандаштарыбыҙ исемдәре менән дә танышырға мөмкин. Мәҫәлән, ғинуарҙа шулай уҡ Баймаҡ районы элекке Ленин исемендәге колхоздың атҡаҙанған механизаторы, Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ орденлы Шәһәрғази **Бүкәнбаевтың** (1927-2009), Хәйбулла районы Маҡан совхозының Һарыгүл МТС-ы тракторсыһы, атҡаҙанған механизатор Солтансәлим **Юлановтың** (1927-1979), Бөрйән районы Байназар ауылында тыуған һәм Иҫке Монасип урта мәктәбе директоры, тарих уҡытыусыһы, Бөйөк Ватан һуғышы ветераны, бик күп орден һәм миҙалдар кавалеры, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, матбуғат дуҫы Сәлих **Дәүләтбирҙиндың** (1927-2017), тел белгесе, филология фәндәре кандидаты, өлкән ғилми хеҙмәткәр, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Таңһылыу **Күсимованың** (1927-1999) тыуыуҙарына - 95 йыл; журналист, сатирик яҙыусы, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге Хөкүмәт премияһы лауреаты Султан **Иманғоловтың** (1932-2001) тыуыуына - 90 йыл, ә педагог, методист, педагогия фәндәре кандидаты, М.Аҡмулла исемендәге БДПУ-ның сит телдәр факультеты доценты булып эшләгән һәм сығышы менән Күгәрсен районы Теләүембәт ауылынан Мирхәт **Хәсәновҡа** 90 йәш тулыу билдәләнә. Шулай уҡ Баймаҡ районы "Алға" колхозы һауынсыһы, "Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ" һәм "Почет билдәһе" орденлары кавалеры Асия **Рәхимҡолованың** (1937-2021), билдәле яҙыусы, ғалим, әҙәбиәт белгесе, филология фәндәре докторы, профессор, БР Фәндәр академияһы ағза-мөхбире, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Роберт **Байымовтың** ( 1937-2010) тыуыуына 85 йыл тулыу даталары уларҙың яҡындары, яҡташтары һәм йәмәғәтселек тарафынан хөрмәтләп иҫкә алыныр.

Бөгөнгө көндә арабыҙҙа илһамлы ижад өлгөһө күрһәтеп, маҡтаулы исемдәргә эйә булған замандаштарыбыҙ - физика-математика фәндәре докторы, БДУ профессоры Ринат **Юлмөхәмәтовты**, композитор, педагог Айһылыу **Сәлмәнованы** - 65 йәштәре тулыу уңайынан; Башҡортостандың атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәрҙәре, ҡәләмдәштәребеҙ - Фәрит **Ҡоҙабаевты** (Хәйбулла районы), Гөлдәриә **Йосоповаһы**, Роза **Төхбәтованы**, Миңзифа **Илтенбаеваны** шулай уҡ күркәм юбилейҙары менән ҡотлайбыҙ!

**Фәүзиә ИШБИРҘИНА.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Көндәлек ғәмәлдәрегеҙҙе таҙартыу

Беҙҙең быуат уртаһында бер гаваялы Гавайи аҡыл эйәләре - кахундарҙың бик күп серҙәрен асып биргән китап яҙған. Нәшриәткә алып барырға тип юлға сыҡҡан авторҙың ҡулынан был ҡульяҙманы бер эт тартып ала һәм өҙгөсләп бөтөрә. Автор китапты ҡабаттан күсереп яҙа. Әммә карапта сәйәхәт иткәндә ҡульяҙма тулҡын аҫтында ҡала һәм ҡабаттан юҡҡа сыға. Ул уны өсөнсөгә күсереп яҙа. Шунда ғына ҡульяҙманы китап итеп баҫтырып сағарырға насип була.

Уға ошоғаса ниәтен тормошҡа ашырырға нимә ҡамасаулаған һуң? Әгәр аңдың юғары кимәлен аңлау дәрәжәһенә етһәгеҙ, бының осраҡлы булмауына, ә ошо серҙе халыҡҡа еткереүгә ҡамасаулау Юғары аңдың хикмәте булыуына инанырһығыҙ. Беҙ әле аҡылды файҙаланыуҙың тейешле кимәленә етмәгәнбеҙ, тип уйлайым.

Ҡасандыр сер булып ҡалған нәмәләр бөгөн сер булыуҙан туҡтай. Боронғо серҙәр асыла. Ҡасандыр аңлашылмаған һабаҡтар аңлашыла башлай. Фән мейене тағы ла һөҙөмтәлерәк ҡулланыу ысулдарын аса. Әммә былар барыһы ла мейенең һул яҡ ярымшарына ғына ҡағыла. Уң яҡ ярымшар һаман эшкә егелмәгән. Беҙ һаман да рухи етәкселек алырға тырышмай, матди тормошҡа табынабыҙ. Әгәр һеҙ уңыш - ул түккән энергия һөҙөмтәһе булыуына, ныҡлы ныҡышмалылыҡ барлыҡ өлкәлә лә ярҙам итеренә, уңыш өсөн бары тик ялҡытҡыс хеҙмәт кәрәклегенә ышанаһығыҙ икән, был һеҙҙең иректә. Әммә ябайыраҡ юл да бар.

Америка индеецтарының күпселек ҡәбиләләре кешеләрҙең тормошона йоғонто яһаусы Бөйөк рух булыуына ышана. Шулай уҡ улар кешеләр генә түгел, йәнһеҙ предметтар ҙа рухи көскә эйә тип һанаған. Һөҙөмтәлә индеецтар ауыл хужалығында шундай кимәлгә еткән - улар тарафынан йорт шарттарында үҫтереүгә яраҡлаштырылған кукуруз һәм картуф бөгөн бөтөн донъя халҡы рационының яртыһын тиерлек тәшкил итә. Индеецтарҙың дауалаусыларының, шамандарының, ҡанбабаларының бурысы Хоҙайҙан ҡәбиләләштәренә төрлө проблемаларҙы хәл итеүҙә ярҙам һорау булған.

* * *

Әгәр һеҙ урамдағы ябай кешегә, беҙ Аллаға оҡшашбыҙ, тиһәгеҙ, улар һеҙҙән көләсәк кенә. Ә өндәге төш ярҙамында бөтөн нәмәне хәл итеп була. Мейегеҙҙең уң яҡ ярымшарын әүҙемләштереп, һеҙ Илаһ, фәрештәләр һәм башҡа күҙгә күренмәҫ рухи көстәр менән бәйләнеш булдырып, боронғо аҡыл эйәләренә тиңләшәһегеҙ. Көндәлек тормошоғоҙҙо ыңғай фекер йөрөтөүгеҙ, башҡаларға ҡарата изгелек ҡылыуығыҙ, үҙегеҙҙе тағы ла матур ғәмәлдәргә һәм һүҙҙәргә программалау менән таҙартаһығыҙ.

Һеҙ асыҡ булаһығыҙ. Һеҙ матди тормоштоң һул яҡ ярымшарындағы сикләүҙәрҙән сығып, матдилыҡты рухиәт менән берләштергән ике ярымшар ҙа эшләгән, сәләмәтлек, байлыҡ, бәхет өлкәһендә сикһеҙ мөмкинлектәр биргән кимәлгә күтәреләһегеҙ.

**Роберт СТОУН.**

**(Дауамы бар).**



## 17 ЯНВАРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Тайны госпожи Кирсановой". [12+]
17.15 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.20, 22.30 Т/с "Склифосовский". [16+]
23.35 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.20, 3.10 Т/с "Пыльная работа". [16+]
4.00 Т/с "Семейный детектив". [16+]
4.50 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 Профилактика на канале с 7.00 до 14.00.**
**14.00 Новости недели (на рус.яз).**
**14.45 Специальный репортаж. [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе… [12+]**
**16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**16.30 Т/с "Есть нюансы". [12+]**
**17.30 Ради добра. [12+]**
**17.45, 20.45, 5.15 История одного села. [12+]**
**18.00 Пофутболим? [12+]**
**18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**21.00 "Елкән". [6+]**
**22.00 Спортивная история. [12+]**
**23.00 Күстәнәс. [12+]**
**23.30 Топ 5 клипов. [12+]**
**0.00 Х/ф "Связь". [16+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 "Земляки". [12+]**
**5.00 Башҡорттар. [6+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 18 ЯНВАРЯ ВТОРНИК
### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Тайны госпожи Кирсановой". [12+]
17.15 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.20, 22.30 Т/с "Склифосовский". [16+]
23.35 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.20, 3.10 Т/с "Пыльная работа". [16+]
4.00 Т/с "Семейный детектив". [16+]
4.50 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Есть нюансы". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Хазина". [0+]**
**15.00 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**15.30, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.45 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 "Дорога к храму". [0+]**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 История одного села. [12+]**
**21.00 Детей много не бывает. [6+]**
**22.00 Теге өсәү! [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Инопланетный код". [18+]**
**3.00 "Спектакль "Заблудшая". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 19 ЯНВАРЯ СРЕДА
### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Тайны госпожи Кирсановой". [12+]
17.15 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Склифосовский". [16+]
23.35 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.20 Т/с "Пыльная работа". [16+]
4.00 Т/с "Семейный детектив". [16+]
4.50 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Есть нюансы". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15, 4.30 Автограф. [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Тормош. [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Апчхи". [0+]**
**15.30 "Сулпылар". [6+]**
**15.45 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 Тайм-аут. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байыҡ" представляет… [12+]**
**0.00 Х/ф "Оператор". [16+]**
**3.00 Спектакль "Не ломайте крылья". [12+]**
**5.00 "Хазина". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 20 ЯНВАРЯ ЧЕТВЕРГ
### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Тайны госпожи Кирсановой". [12+]
17.15 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.20, 22.30 Т/с "Склифосовский". [16+]
23.35 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.20, 3.10 Т/с "Пыльная работа". [16+]
4.00 Т/с "Семейный детектив". [16+]
4.50 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Есть нюансы". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Теге өсәү! [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 История одного села. [12+]**
**21.00 Башҡорттар. [6+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 "Ете егет". [12+]**
**23.45 История одного села. [16+]**
**0.00 Х/ф "Не говори ничего". [16+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Девушка с веснушками". [12+]**
**4.45 Әлләсе… [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 21 ЯНВАРЯ ПЯТНИЦА
### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Тайны госпожи Кирсановой". [12+]
17.15 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.20, 22.30, 23.35, 0.40 Т/с "Склифосовский". [16+]
1.45 Х/ф "Родные пенаты". [12+]
4.56 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Д/с "Зеленые животные". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15, 21.00 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.30, 4.45 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30 Заветное слово наследия. [12+]**
**14.30 Башҡорттар. [6+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15, 4.00 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 "Аль-Фатиха". [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 "Башҡорт йыры". [12+]**
**19.45 Специальный репортаж. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 История одного села. [12+]**
**22.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**23.30 Автограф. [12+]**
**0.00 Х/ф "В ловушке времени". [12+]**
**2.30 Спектакль"Пылкие любовники". [12+]**
**5.15 "Млечный путь". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 22 ЯНВАРЯ СУББОТА
### РОССИЯ 1
5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.30 Юмор! Юмор!! Юмор!!! [16+]
12.35 Доктор Мясников. [12+]
13.30 Т/с "Теорема Пифагора". [16+]
20.00 Привет, Андрей! [12+]
21.00 Х/ф "Все, что захочешь". [12+]
1.00 Х/ф "Белая ворона". [16+]
4.19 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [0+]**
**8.45 "Ете егет". [12+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 "Выше всех!" [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Книга сказок". [0+]**
**11.00 "Сыйырсыҡ". [0+]**
**11.15 Әлләсе… [12+]**
**12.00 Күстәнәс. [12+]**
**12.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.00 "Автограф". [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Концерт народного артиста РБ Азамата Тимирова. [12+]**
**19.00, 4.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**19.45 Ради добра. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 "Байыҡ" представляет… [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**22.30, 1.45 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 "Башҡорт йыры". [12+]**
**0.00 Х/ф "Тайное окно". [12+]**
**2.30 Спектакль "Кьоджинские перепалки". [12+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 23 ЯНВАРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### РОССИЯ 1
5.20, 3.15 Х/ф "Варенька". [16+]
7.15 Устами младенца.
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.30 Парад юмора. [16+]
13.30 Т/с "Теорема Пифагора". [16+]
17.50 Танцы со Звёздами. Новый сезон. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.30 Х/ф "Свой-Чужой". [16+]
4.59 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 "Ҡурай даны". [12+]**
**9.30 Тормош. [12+]**
**10.00 "Бейе". [0+]**
**10.15 "АйТекә!" [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Сулпылар". [0+]**
**11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.30 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз). [12+]**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 "Дорога к храму". [0+]**
**16.30, 3.00 Историческая среда. [12+]**
**17.00 "Все песни о прекрасном". Концерт. [12+]**
**18.00 "Радуга рулит".**
**19.00 Д/ф "Герой своего времени". Сосланбек Тавасиев". [12+]**
**20.15 Әлләсе… [12+]**
**21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.30, 3.30 Х/ф "Корсиканец". [12+]**
**1.15 Спектакль "Мы с тобой одной крови". [12+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**
**6.00 Итоги недели (на рус. яз). [0+]**

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры
**18 ғинуар "Балам"** (В. Емелева), спектакль-терапия. 18.00 16+
**19 ғинуар "Йәнем, иртәгә яңы көн тыуыр"** (Я. Пулинович). 16+
**20 ғинуар "Хыялға ҡаршы"** (А. Баймөхәмәтовтың повесы буйынса А. Ишбулдина инсц.). 12+
**21 ғинуар "Хыялый"** (С. Әбүзәр), лирик комедия. 12+
**23 ғинуар "Ул бит кисә ине"** (А. Әхмәтғәлиева), лирик комедия. 18.00 12+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры
**23 ғинуар "Пеппи ДлинныйЧулок"** (А. Линдгрен), мажара. 12.00 0+
**"Яҙмышымдың икенсе бүлеге"** (Н. Саймон), трагикомедия. 18.00 16+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры
**22 ғинуар "Слоненок"** (Р. Киплинг). 11.00, 13.00 0+
**"Гуси-лебеди"** (А. Чалухиди). 16.00 0+
**23 ғинуар "Дюймовочка"** (Г.-Х. Андерсен). 11.00, 13.00 0+
**"Гуси-лебеди"** (А. Чалухиди). 16.00 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы
**18 ғинуар "Лаунж-концерт. Фимбо"** 6+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры
**18-19 ғинуар "Глумов"** (А. Островский), пьеса. 12+
**22 ғинуар "Золушка"** (Д. Голубецкий), әкиәт. 13.00 0+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе
**20 ғинуар "Минең ҡатынымдың исеме Морис"** (Р. Шарт), комедия. 16+
**21 ғинуар "Ҡарауыл! Атай өйләнә?!"** (Б. Рацер, В. Константинов), комедия. 12+
**22 ғинуар "Ай булмаһа, йондоҙ бар…"** (Т. Миңнуллин), драма. 12+
**23 ғинуар Премьера! "В поисках волшебства"** (М. Хейфец), әкиәти хикәйәт. 12.00 0+
**Премьера! "Эх, күгәрсенкәйҙәрем…"** (Ф. Бүләков), комедия. 18.00 12+

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

**1443 һижри йыл.**

| Ғинуар (Йомадиәл ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 17 (14) дүшәмбе | 8:00 | 9:30 | 13:30 | 15:35 | 17:21 | 18:51 |
| 18 (15) шишәмбе | 7:59 | 9:29 | 13:30 | 15:37 | 17:23 | 18:53 |
| 19 (16) шаршамбы | 7:58 | 9:28 | 13:30 | 15:39 | 17:25 | 18:55 |
| 20 (17) кесе йома | 7:57 | 9:27 | 13:30 | 15:41 | 17:27 | 18:57 |
| 21 (18) йома | 7:55 | 9:25 | 13:30 | 15:42 | 17:29 | 18:59 |
| 22 (19) шәмбе | 7:54 | 9:24 | 13:30 | 15:44 | 17:31 | 19:01 |
| 23 (20) йәкшәмбе | 7:53 | 9:23 | 13:30 | 15:46 | 17:33 | 19:03 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# КӨПТӘН КӘРӘК ИНЕ!

**Республикала "Урал батыр" эпосы буйынса сериал төшөрөү планлаштырыла.**

Режиссер, продюсер, "АсҡарФильм" студияһы етәксеһе Айнур Асҡаров республикала кино индустрияһын үҫтереү мәсьәләләренә арналған кәңәшмәлә "Урал батыр" эпосы буйынса һигеҙ сериялы фильм төшөрөргә йыйыныуы хаҡында һөйләне. Фильмды этник стимпанк жанрында төшөрөү, уны кинопрокатта түгел, ә онлайн майҙансыҡтарҙа күрһәтеү планлаштырыла, тине режиссер. Айнур Асҡаров кинопроизводствонан рибейттар (һалым ҡайтармаһы) темаһын да күтәрҙе. Уның һүҙҙәренсә, был программа кино һәм телепроизводство өсөн льготалы шарттар булдырылған 10 төбәктә эшләй: төбәктәр рибейттар программаһы буйынса сығымдарҙың бер өлөшөн кире ҡайтара. Пилот төбәктәрҙә төшөрөлгән сериалдар һәм фильмдар ярҙамында яңы эш урындары булдырыла, ә территориялар туристарҙы күпләп йәлеп итә башлай.

Башҡортостан Башлығы фекеренсә, был тема ентекле өйрәнеүҙе талап итә, сөнки төбәктәрҙә төшөрөлгән фильмдар һирәк осраҡта ғына прокатта үҙ сығымын ҡаплай. Донъя киноиндустрияһында ла фильмдарҙың 10 проценты ғына килем килтерә, ҡайһы саҡта Голливуд блокбастерҙары ла прокатта уңышһыҙлыҡҡа осрай. Һуңғы йылдарҙа беҙҙең режиссерҙарҙың фильмдарының илдә ҙур уңыш менән прокатҡа сығыуын иҫәпкә алып, республикала кинематография булышлыҡ итеү системаһын төҙөү зарур, тип иҫәпләй Радий Хәбиров. "Ғорурлыҡ менән күрһәтә алырҙай сифатлы, ҡыҙыҡлы кинопродукт кәрәк", - тине республика етәксеһе. Башҡортостанда "Көмөш Аҡбуҙат" халыҡ-ара кинофестивален дә әүҙемерәк үҫтереү мөһим, тип тә билдәләне ул.

# АЙНУРҘЫҢ "БУРАН" ФИЛЬМЫ...



**Мәскәүҙә Айнур Асҡаровтың Свердловск киностудияһында төшөрөлгән "Буран" фильмының премьераһы булды.**

"Буран" драмаһы 2016 йылдың ҡышында режиссерҙың тыуған яғында - Хәйбулла районында булған ысын хәлваҡиғаларға нигеҙләнгән. Унда автомобиль трассаһында көҙ асҡылыҙ ҡаты буранда иҫән ҡалған хоккей йондоҙо Максим Ковалевтың тарихы бәйән ителә. Сценарийҙы Айнур Асҡаров Рада Демент һәм Айҙар Аҡманов менән бергә яҙған. Фильмда төп ролдәрҙе Ангелина Поплавская ("Дылды", "Всё могло быть иначе", "Илья Муромец" сериалдары) һәм Александр Головин ("Кадетство", "Папины дочки" сериалдары, "Сволочи", "Ёлки" фильмдары йондоҙо) башҡарған. Унда шулай уҡ Михаил Сафронов һәм Маша Лобанова төшкән. ТАСС хәбәр итеүенсә, фильмдың бюджеты 45 миллион һум тәшкил иткән.

2020 йылда "Буран" фильмы Сямэнь ҡалаһында Ҡытайҙың "Алтын әтәс" кинопремияһының Рәсәй киноһы секцияһын асыу фильмы булараҡ күрһәтелгән. Минскиҙа картинаның премьераһы 2021 йылдың 25 ноябрендә күрһәтелде. 2022 йылдың ғинуарында фильм онлайн-кинотеатрҙарға сыға.

# ҠУРСАҠ ТЕАТРЫ ЯҢЫРА

**2022 йылда Өфөлә "Мәҙәниәт" милли проекты сиктәрендә Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театрын яңыртып төҙөү эштәре башлана.**

Был хаҡта БР Мәҙәниәт министрлығының матбуғат хеҙмәте хәбәр итте. Театрға капиталь ремонт ул асылған 1976 йылдан бирле үткәрелмәгән. Театр бинаһын яңыртыу һәм уның тирә-яҡ биләмәһен төҙөкләндереү менән бер рәттән, уға төкәтмә һалыу ҙа ҡарала. Әлеге бинаның Октябрь проспектына ҡараған яғынан артыҡ конструкциялар, шулай уҡ торлаҡ йорт яғынан шлак блоктарҙан төҙөлгән гараж, кейенеү-сисенеү урыны, касса һәм вестибюлдең бер өлөшөн үҙ эсенә алған бер ҡатлы төкәтмә алып ташланасаҡ. Яңы проект буйынса 300 урынлыҡ тамаша залын яңыртып ҡороу, 135 урынлыҡ бәләкәй зал, 40 урынлыҡ балалар кафеһы, уйын бүлмәһе, ижади үҫтереүсе уйын һәм балалар студиялары төҙөү күҙаллана.

# ШУНДАЙ ХЕҘМӘТТӘШЛЕК

**Былтыр ноябрь айында Нидерландтар Короллегенең Гельдерланд провинцияһы Вессен ауылы һәм Вийе ҡалаһында илде Наполеон хакимлығынан азат итеүгә 208 йыл тулыу айҡанлы төрлө саралар уҙғарылғайны. Шулар һөҙөмтәһендә Нидерландтар Короллегенең Гелвинк музейы директоры Юрн Буйсман башланғысында документаль фильм төшөрөлгән.**

"Донъялағы эпидемиологик хәлгә бәйле Башҡортостан Республикаһы делегацияһы был проектта тулыһынса ҡатнаша алманы. "Мәҙәни-ара партнерлыҡ үҙәге" ижтимағи-мәғәни башланғыстарҙы үҫтереү буйынса автономиялы коммерция булмаған ойошма үтенесенә ярашлы, сараларға Башҡортостандан сыҡҡан вәкилдәр - әлеге көндә Германияла йәшәгән Ирек Баишев һәм Динара Даниэль, Польшанан Азат һәм Таһир Ҡужиндар, Нидерландтарҙан Лилиә Абаева ғына саҡырылды", - ти Мәҙәни-ара партнерлыҡ үҙәге директоры, Башҡортостан-Нидерландтар хеҙмәттәшлеге проекты етәксеһе Валентина Латыпова.

Байрам саралары сиктәрендә Башҡортостан тураһында фотокүргәҙмә, Вийе ҡалаһы тарихи музейында күргәҙмә, кисеүгә яҡын ерҙә шул осорҙағы башҡорт яугирҙарының хәрби обмундированиеһы презентацияһы, Вессен ауылында Эйссель буйында башҡорт яугиры һәйкәле эргәһендә концерт һәм флешмоб, остаһлыҡ дәрестәре ойошторолдо. Вийе ҡалаһы паркында Рәсәй генералы Александр Бенкендорфҡа һәйкәл ҡуйылыуға арнап митинг үтте. Уның авторы РФ-ның атҡаҙанған рәссамы, скульптор Александр Таратынов. Һәйкәл 1813 йылдың ноябрь урталарында 1-се рус башҡорт полкы бивуағы урынында тора. Саҡырылған ҡунаҡтар һыбайлы һәйкәл эргәһенә ҡуйылған аудиогидлы эскәмйәне асыуҙа ла ҡатнашты. Хәҙер телләгән һәр кем бында ултырып, генерал А. Бенкендорф етәкселегендәге башҡорт яугирҙарының Нидерландтарҙы Наполеон ғәскәрҙәренән азат итеүе тарихын тыңлай алаСаҡ.

БЫЛ - ҠЫҘЫҠ

# ЮЛБАРЫҪ ҠАЙҘА ЙӘШӘЙ?

Юлбарыҫ Азия территорияһында киң таралған. Улар төньякта ла, үҙәк һәм көньяҡ өлөшөндә лә йәшәй. Бөгөн был йәнлеккә юғалыу ҡурҡынысы янай һәм тәү осорҙағы тереклек итеү биләмәһенең ни бары 7 процентын ғына биләп торалар. Иң күбе Һиндостан, Бангладеш, Ҡытай һәм Рәсәй территорияһында йәшәйҙәр. Иң эре юлбарыҫтар төньяҡтараҡ, тайгала осрай. Уларҙың ҙурлығы 3,5 метр, ауырлығы 310 килограмм булырға мөмкин. Бәләкәйерәктәре йылы төбәктәрҙә - тропик урмандарҙа, һаҙлыҡтарҙа һәм мангр шырлыҡтарында йәшәй. Улар ҙурлығы буйынса 2,7-2,9 метр, ә ауырлыҡтары уртаса 230 килограмм.



Ҡырағай юлбарыҫтарҙы Һиндостандың төньяҡ-көнсығышында урынлашҡан Бандхавгарх ҡурсаулығына барып күрергә мөмкин. Был паркка 1968 йылдан Милли ҡурсаулыҡ статусы бирелгән һәм ул закон тарафынан һаҡлана. Ә ҡырағай юлбарыҫтар ни бары 3 мең баш ҡына ҡалған. Улар юғалып барған йәнлектәр исемлегендә һәм Ҡыҙыл китапҡа индерелгәндәр. Быға кешеләрҙең хужалыҡ эшмәкәрлеге һәм табыш йәки халыҡ медицинаһында ҡулланыу маҡсатында күп һунар итеүе сәбәпсе булған. Азия илдәрендә юлбарыҫтың тән өлөштәре һауыҡтыра, көс һәм ғүмер өҫтәй ала тигән ышаныс йәшәй. Әммә быға фәнни дәлилдәр юҡ. Ҡытайҙа бындай "дарыуҙар" һатыу ҡаты тыйылған, ә браконьерҙарҙы үлем ялаа язалау ҡаралған. Әммә бындай күп төрлө һаҡлау сараларына ҡарамаҫтан, юлбарыҫтар һаны ҡырҡа кәмей. Һуңғы иҫәпләүҙәргә ярашлы 2500-3000 тирәһе өлкән йәнлектәр ҡалған. Ә бына иркенән мәхрүм ителгәндәре - күберәк. Рәсми булмаған мәғлүмәттәргә ярашлы, шәхси хужалыҡтарҙа һәм зоопарктарҙа 20 меңгә яҡын юлбарыҫ аҫрала.

СӘЛӘМӘТ БУЛ!



# СИРҘЕҢ АҘАҒЫ ЛА ХӘҮЕФЛЕ

**Башҡортостандың Һаулыҡ һаҡлау министрлығы үткәргән брифингта COVID-19 билдәләре оҙаҡҡа һуҙылғанда сәләмәт тормошҡа тулыһынса ҡайтыу өсөн ҡайҙа һәм нисек реабилитация үтергә мөмкин булыуы хаҡында мәғлүмәт бирелде.**

Тажлы зәхмәт ауыр билдәләр менән үтеү осоронан тыш, уның оҙаҡ ваҡытҡа һуҙылған һәм тулы тормош алып барыуға ҡамасаулаған эҙемтәләренән ҡотолоу өсөн республикала реабилитация үтеү мөмкинлеге ҡаралған. Унда был сирҙә үткәргән һәр кем ҡатнаша ала, ауырыуҙың ни тиклем ауыр булыуынан сығып, реабилитация амбулатор йәки стационар шарттарҙа уҙғарыла. Реабилитация уҙғарыуҙы бернисә төркөмгә бүлеп башҡаралар. Беренсе төркөмдә ковидты үткәреүсе ике һәм унан да күберәк хроник сирҙәре булғандар. Икенсе төркөмгә ковид менән сирләгән, ләкин хроник сирҙәре булмағандар индерелгән. Табипҡа ике йылдан ашыу мөрәжәғәт итмәгән һәм ковид менән сирләгәндәр өсөнсө төркөмдә тәшкил итә. Реабилитация үтеү өсөн урындағы дауаханаға мөрәжәғәт итергә кәрәк. Республикала реабилитация үтеү өсөн бер нисә стационар дауахана бар, тип белдерҙеләр брифингта.

Һуңғы арала барлыҡҡа килгән long COVID-тың билдәләре ковидтан һуңғы йәки ҡайһы бер хроник сирҙәрҙең симптомдарына оҡшауы ныҡлыҡ өҫтөнә алына табиптар белдереүендә. Шулай ҙа иң киң таралған билдәләре рәтендә тын алыуының ауырлашыуы (одышка), тиҙ арыусанлыҡ, быуындар ауыртыуы, паник һөжүм (панические атаки), сәстәрҙең ҡойолоуы һәм хроник сирҙәрҙең киҫкенләшеүе тора.

Әгәр ҙә ковид менән сирләүсенең бер айҙан һуң IgM антиматдәһе күтәрелһә, ә IgG күрһәткесе бер үк кимәлдә ҡала килһә, был "оҙайлы COVID" хаҡында һөйләй, ти белгестәр.

Пандемия айырыуса йөклө ҡатын-ҡыҙҙарҙың һаулығы өсөн ауыр күренештәргә килтергән. Онлайн форматта үткән брифингта белдереүҙәренсә, ковид менән сирләүсе ауырлы ҡатын-ҡыҙҙар араһында алдан бала табыу осрағы 6,7 тапҡырға, сабыйҙың үле тыуыу осрағы 8,4 тапҡырға һәм әсәнең үлеменә килтереү осрағы 6 тапҡырға арткан. Ковид менән бәйле хәлдә тотороҡландырыу өсөн республикала төрлө саралар тормошҡа ашырыла. Перинаталь үҙәк нигеҙендә, мәсәлән, COVID-19 менән сирләүсе ауырлы ҡатын-ҡыҙҙарҙы күҙәтеү өсөн Амбулатор күҙәтеү үҙәге, Өфөнөң Дим дауаханаһында буласаҡ әсәләр өсөн өсөнсө кимәлдәге күп профилле стационар табиптары дежурлыҡ иткән махсуслаштырылған госпиталь эшләй. Айырыуса ауыр хәлдәге йөклө ҡатын-ҡыҙҙар өсөн Мәскәү һәм Санкт-Петербург табиптарын йәлеп итеү юлы менән консилиумдар уҙғарыла. Медицина хеҙмәткәрҙәре белдереүенсә, әсә һәм сабыйҙың һаулығын һаҡлап ҡалыуҙың төп ысулы - вакцина эшләтеү.

"Бала табыуҙы планлаштырған ҡатын-ҡыҙҙарға привиканы ауырға ҡалғанға тиклем эшләтеү ҡулай. Ҡатын-ҡыҙҙар консультацияларында ковид тураһында аңлатыуҙар алып барыла. Бөгөнгө көндә республикала иҫәптә торған ауырлы ҡатын-ҡыҙҙарҙың 14 проценты прививка эшләткән. Был Волга буйы федераль округында иң юғары күрһәткестәрҙең береһе", - ти һаулыҡ һаҡлау министры урынбаҫары Игорь Засядкин.

ЯҘЫУСЫҒА ӨС ҺОРАУ

# ӘҪӘР ТӘБИҒИ БУЛЫРҒА ТЕЙЕШ!

**Ғинуар айында 55 тип аталған ғүмер арғымағына атланған шағир, драматург, прозаик, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Салауат ӘБУЗӘРГӘгә бирҙек өс һораућыҙ:**



**Салауат, һин һәр жанрҙа ла уңышлы эшләгән ижадсы буларак, артыҡ һүҙҙән, күләм өсөн яҙыуҙан, юл араһына һыу ҡойоуҙан азатһың. Быға нисек өлгәшәһең?**

- Гәзит-журнал редакцияларында, һәр саҡ тигеләй, әҙәбиәт һәм мәҙәниәт бүлегендә эшләргә тура килде. Ҡулъяҙма баҫтырырлыҡмы-юҡмы икәненә ҡарамай, барыбер уҡып сығаһың - авторға яуап бирергә кәрәк бит. Ситтән ҡарағанда яҡшыраҡ күренә, тиҙәр. Ҡулъяҙмаларҙағы оҙон-оҙон һүҙ сурытыу, әҫәргә, геройҙарҙың характерын асыуға ҡағылышы булмаған һүрәтләүҙәргә төшөп китеү биҙрәтеп ебәрә, уҡығы килмәй башлай. Саманан ашып биҙәнгән ҡыҙҙар һымаҡ: килолап кершән һөртөлгән, яһалма ағзалар йәбештерелгән... Белмәйем, кемгә нисектер, ләкин был миндә ытырғыныс ҡына тыуҙыра, "ғашиҡ" булыу тураһында әйтеп тә тормайым.

Ҡыҫҡаһы, тәбиғи матурлыҡҡа етәме ни! Әҫәр ҙә тәбиғи булырға тейеш. Әйтәйек, "мода" артынан ҡыуып, тегенеһен-быныһын йәбештереп, ниндәйҙер "идеал"дарға оҡшарға маташаһың икән, тәбиғәт биргән үҙ асылың юғала. Һәр кемдең ҡабатланмаҫ үҙ асылы бар, шуны һаҡларға кәрәк. Үҙенсәлек тип атала был.

**Һин Рәмил Ҡолдәүләт, Рәйес Түләк, Ғәбиҙулла Зариповтар менән бер заманда тиерлек уҡыған кеше буларак, уларҙың юҡлығын нисек кисерәһең? Иҫән булһалар, донъябыҙ икенсе төрлөрәк булыр ине, тип уйламайһыңмы?**

- Рәмил Ҡолдәүләт, Рәйес Түләк, Ғәбиҙулла Зарипов, Марсель Искәндәр, Дамир Шәрәфетдинов, Ғилман Ишкинин - әҙәбиәтебеҙ кисергән ҙур юғалтыу. Тотош бер быуын! Улар менән рухташ булдыҡ, күрешеп-аралашып йәшәнек. Йәл, ижад сәскәләренең таждары асылған мәлдә генә был донъянан киттеләр. Улар йыш иҫкә төшә, төшкәлә керәләр. Тормош юлымда улар һымаҡ шиғри йәнле кешеләр осрағанға рәхмәтлемен!

"Иҫән булһалар, донъябыҙ икенсе төрлөрәк булыр ине, тип уйламайһыңмы?" тигәндә мин әҙәбиәт донъяһы тип аңлайым. Әлбиттә, улар әҙәбиәтебеҙҙе яңы әҫәрҙәр менән байытыр ине, уҡыусылар Рәйес Түләктең "Мең дә икенсе кис..." кеүек, бәлки, унан да шәберәк китабын уҡып ҡыуаныр, уйланыр ине... Былар - "ине" генә шул, бойомға ашмаҫ хыял ғына...

Шулай ҙа, әҙәбиәттең донъяға йоғонтоһона ҡарағанда, донъяның әҙәбиәткә йоғонтоһо ҙурыраҡ. Һәр заман үҙ яҙыусыһын, үҙ әҫәрен тыуҙыра. Хатта мөхәббәт кеүек мәңгелек темаларҙа ла заман заңы сағылыш таба. Хәйер, яҙыусының төп маҡсаты "донъяны икенсе төрлө" итеүҙә түгел, уны матурлауҙа, уның матурлығын, насар яҡтарын кешеләргә күрһәтеүҙә...

**Иң төп әҫәреңде яҙҙыңмы әле? Яҙмаған булһаң, ул нимә тураһындағы поэма, повесть, драма, роман?**

- Йылғаны һикермәй тороп, "һоп" тип ҡысҡырмайҙар, тигән әйтем бар. Алдымда һикереп сығырлыҡ ҡына йылға түгел, дарья йәйрәп ята. Яҙыла башлаған, ҡағыҙға һөлдәһен генә сыймаклап ҡуйған, башта йөрөгән "әҫәрҙәр", ябай ғына итеп әйткәндә, муйындан! Ләкин, әлеге лә баяғы, ялҡаулыҡ тәгәрмәскә таяҡ тыға.

Шулай ҙа, "төп әҫәр" тигән иллюзияға бирелмәҫ йәштәмен инде. Минең өсөн ижад төп урында тора. Көнөлдә һығып яҙғаныңды кемдәрҙер оҡшата икән - ҡыуаныс!

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**яҙып алды.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЕРҘӘ ТАМУҠ БАР... меланхоликтың йөрәгендә

Барыһын да аңларға тырышма - бер ни ҙә аңламаясаҡһың.

**(Сузуки).**

Мин үҙ яҙмышымдың хужаһымын, йәнемдең капитанымын.

**(Уильям Хенли).**

Ниҙелер танып белер өсөн дә, ниндәйҙер байлыҡҡа эйә булыр өсөн дә ғазапланырға кәрәк.

**(Ҡытай халыҡ мәҡәле).**

Ерҙә тамуҡ бар, тиһәләр, ул меланхоликтың йөрәгендә булыр.

**(Ричард Бартон).**

Тормош театрҙағы спектакль кеүек: уның күпме дауам итеүе түгел, ә яҡшы уйналыуы мөһим.

**(Луций Сенека).**

Иң ҡурҡыныс ышанмаусылыҡ - ул үҙ-үҙеңә ышанмау.

**(Томас Карлейль).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бик үк йәш булмаған бер сауҙагәр сит яҡтарҙан һылыу бер йәш кәләш алып ҡайта. Уларҙың баллы айы бер йылға һуҙыла. Бына сауҙагәргә тауар артынан йыраҡ илгә сәфәр сығырға ваҡыт етә. Әлбиттә, уға йәш кәләшен ҡалдырып китеүе еңел бирелмәй, уны төрлө икеләнеүҙәр, көнсөллөк тойғоһо солғап ала. Шулай ҙа сәфәр сыҡмай сараһы булмай сауҙагәрҙең һәм ул китер алдынан өйҙәге өлкән генә хеҙмәтсеһенә кәләшен күҙәтеп, ҡарап торорға бойороҡ бирә.**

**Өс айҙан һуң бик күп тауар һәм йәш ҡатынына бүләктәр тейәп, өйөнә ҡайтып төшә сауҙагәр. Уны өй түпһаһында баяғы хеҙмәтсеһе илай-илай ҡаршы ала. Ул хужабикәнең бүлмәһендәге ҙур һандыҡта уның һөйәркәһе йәшеренгән икәнлеге тураһында хәбәр итә. Икеләнеүҙәренең дөрөҫкә сыҡҡанын ишеткән сауҙагәр тәрән ҡайғыға бата. Ишек түпһаһына ултырып, ни эшләргә икән, тип уйлана башлай. "Әгәр хәҙер шаһиттар саҡырып, ҡатынымдың бүлмәһенә инеп, һандыҡты асһам, ә унда уның һөйәркәһе булмай сыҡһа, ҡатынымды бик ныҡ рәнйетәсәкмен һәм ул минән китәсәк, ә мин унһыҙ йәшәй алмайым. Әгәр мин һандыҡты асһам һәм унда ысынлап та сит ир бикләнгән булһа, шәриғәт буйынса ҡатынымды хыянаты өсөн таяҡ менән туҡмаясаҡтар һәм илдән ҡыуасаҡтар. Ә мин уны яратам һәм унһыҙ йәшәй алмайым..." Өйөнөң түпһаһында шулай уйланып, икеләнеп бер аҙ ултырғас, сауҙагәр үҙенең хеҙмәтсеһенә... теге һандыҡты асып ҡарамайынса, баҡсаға сығарып, ергә күмеп ҡуйырға бойора..."**

АҒИНӘЙ МӘКТӘБЕ

# ҮҘЕБЕҘСӘ ҮТҺЕН ТУЙҘАРЫБЫҘ!

**(Дауамы. Башы 11-се биттә).**

**Булып үткән конкурстан Иҫке Балбыҡ ауылы ағинәйҙәренең "Килен битен асыу" йолаһы сценарийын тәҡдим итәйем әле, файҙаланыусылар ҙа булыр, бәлки.**

*Килен төшкәс, килендең билен сисеү, һыу башлатыу ғәмәләдәрен үтәп, ул килтергән һыуҙан сәй эсергәс, киленде ауыл халҡына күрһәтеү йолалары үтәлә.*

**Зилә:** Һыуҙан ҡайтҡанда килен бик ипле генә баҫып, һыуын сайпылтмай ғына атлап ҡайтты, уңған булыр киленебеҙ.

**Барыһы:** Эйе, эйе, килен уңған күренә!

**Рәмилә:** Килендең сәйен эскәндә, беҙ уға төрлө һорауҙар бирҙек, йомаҡ ҡойҙоҡ. Төплө, аҡыллы яуаптарын бирҙе киленебеҙ, зирәк булмаҡсы!

**Рәфилә:** Әйҙәгеҙ, килендең битен асайыҡ инде. Ауыл халҡына, күрше-күләнгә күрһәтәйек.

**Рәзилә:** Туҡтағыҙ әле, тәүҙә күрнис алайыҡ. Ҡәйнә кеше таратһын әле килененең күрнисен.

**Барыһы ла:** Эйе шул, Нәжибә апай, тарат килен күрнисен.

*(Нәжибә апай күрнис итеп түшелдеректәр тарата, рәхмәт әйтеп алалар).*

**Рәмилә:** Әйҙәгеҙ инде сығарып күрһәтәйек киленде, килен битен асайыҡ.

*(Киленде бөркәнсеге менән алып инәләр, уртаға ултырталар)*

**Зилә:** Килен килде, күрегеҙ, күрмәлеген бирегеҙ. Килен битен асабыҙ, өләшөн әйтеп инегеҙ, килен битен асабыҙ. Әүхәленде әйт килен, килен,
Буҫағаһынан, уң аяҡтан ин, килен.

*(Киленгә алъяпҡыс бүләк итә).*

**Рәмилә:** Түлле бул, түлле бул, бүҙәнәләй түлле бул! Иренмәһәң, игеҙ тап, йыбанмаһаң, йыл да тап! Минән йөҙөк булыр бүләккә.

**Рәзилә:** Ҡолон, ҡолон, ҡолонсаҡ, бына булдың киленсәк. Минең кеүек зирәк бул, минең кеүек һирәк бул. Минән ошо таҫтамалды ҡабул итеп ал, килен.

**Рәсилә:** Килен, килен, киленсәк. Аллы төйөн төйөнсәк. Ауыҙ-мороноң сусаңдап, һүҙ йөрөтмә, киленсәк. Апһындарға бирешмә, ҡәйнәң менән ирешмә. Минән көмөш беләҙек.

**Рәфилә:** Ирең ҡушҡан һәр эште еренә еткер, киленсәк. Кеше һыйыр һауғанда, йоҡлап ятма, киленсәк. Бына минән һырғалар.

**Ҡәйнә:** *(килененә мамыҡ шәл яба)* Юлың тәңкәле булһын, һыйырың һөтлө булһын. Ҡаҙың бәпкәле булһын, йылҡың йылғыр булһын. Алдың тулы бала булһын, артың тулы мал булһын. Минең улым һиңә ир, иреңде балалай ҡара, һәр даим иреңә яра.

**Зәһинә:** Был һебә ебе тип атала. Таратам һәр берегеҙгә. Тегеп ҡуй, йоғоносо булһын, һалып ҡуй, йыуанысы булһын...

*Киленде таҡмаҡ әйтеп бейетеп алалар. Һуңынан таҡмаҡлап өгөт-нәсихәттәрҙе дауам итәләр.*

**Мәрзиә СОЛТАНБАЕВА,**
**Учалы районы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе.**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
Мөхәрририәт:
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зөйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ООО "СПУТНИК-ЮГ" нәшриәтендә баҫылды (453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури урамы, 4, офис 203).

**Телефондар:**
Баш мөхәррир 253-25-44
Хәбәрселәр 252-39-99, 246-03-24
Матбуғат таратыу 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
14 ғинуар 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3387
Заказ - 39